ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-1 февраль-март (шаҡай-буранай)

2019

№8 (842)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә февралдә һәм мартта 2019 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда яҙылыу иғлан ителде. 615 һумға әле үк яҙылып ҡуйһағыҙ, оторһоғоҙ. Май айынан хаҡтар бер аҙ юғарыраҡ буласаҡ. Ә 2019 йылдың тәүге яртыһы өсөн иһә 18 мартҡа тиклем яҙылһағыҙ (өс айға - 307 һум 50 тин), гәзитебеҙҙе майҙан алдыра башлаясаҡһығыҙ.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Кем хаҡлы:**
ҡыҙылдармы, аҡтармы?



2

**Ватанды һаҡлаусы булайыҡ...**



тик ҡоралға тотонорға яҙмаһын! 8-9

**Бөркөттәр оя ташламай**



11

**Иң бай кейәү кем?**



12-13

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ирмен тигән ир-егеткә бөгөн дә берҙәм кутәрелеп яу асыр күренештәр етерлек. Мәҫәлән, һеҙ йәшәгән тарафтарҙа маңҡортлоҡ, эскелек, тәмәке-наркотик кеүек афәт менән көрәшеүсе ир-азаматтар бармы?

*Иҙел МОНАСИПОВ, Баймаҡ районы Ишмырҙа мәктәбе директоры, ауыл биләмәһе башҡорттары ҡоролтайы рәйесе:* Тормошобоҙҙағы кире күренештәргә ҡаршы көрәште яуға тиңләүегеҙ менән хаҡлыһығыҙҙыр, моғайын. Ысынлап та, күпме түҙергә, өндәшмәҫкә була? Бер ауыл кешеләре - тимәк, бер ғаилә тип әйтерлек бит: кемдең нисек йәшәгәне, ни менән шөғөлләнгәне ус төбөндәгеләй күренеп тора. Һуңғы ваҡыт ҡайһы бер ауылдарҙың ир-егеттәре берләшеп, үҙ төбәктәрендә сәләмәт тормош рәүеше өсөн бер төптән көрәшкә ҡалҡыныуы хаҡында ишетеп-белеп торабыҙ: төрлө ойошмаларға берләшкән ир-егеттәр эскелеккә ҡаршы көрәште үҙ ҡулдарына алды, тип яҙып сыҡҡайны "Киске Өфө" үҙенең быйылғы 6-сы һанында. Баймаҡ, Әбйәлил, Күгәрсен, Ғафури райондары һәм Сибай ҡалаһынан алты егет ошо юҫыҡта гәзит биттәрендә үҙ тәжрибәләре менән уртаҡлашты. Уларҙың һөйләшеүен күтәреп алғым килә, сөнки беҙ ҙә төшөп ҡалғандарҙан түгел, ауылдаштарыбыҙҙа сәләмәт тормошта йәшәүгә ынтылыш булдырыу теләге менән янабыҙ беҙ ҙә. Былтыр Яңы йыл алдынан ауылдың ир-егеттәр ҡорон ойоштороу тап шул маҡсаттан сығып эшләнде лә: йәмәғәт әүҙемлегенә, сәләмәт тормошҡа мөмкин тиклем күберәк кешене йәлеп итеү. Әле бына Ватанды һаҡлаусылар көнөнә бағышлап иғлан ителгән илһөйәрлек айлығын башлап ебәргәйнек, ул ахырына ла яҡынлай. Ир-егеттәр ҡоро үҙ эшен ике йүнәлештә алып бармаҡсы: кешеләрҙе әүҙем спорт сараларына ылыҡтырыу һәм шуның аша эскелек күренештәрен тамырынан юҡ итеү. Ҡорға 62 ир-егет тупланды, шуларҙың йәшерәктәре 5 командаға бүленеп, ауыл спартакиадаһын волейбол уйыны менән башлап ебәрҙе, унан - баскетбол, саңғы уҙыштары; өлкәнерәк ағайҙар иһә шахматта көс һынаша. Әйткәндәй, балаларға боҙ майҙаны эшләп бирҙек, киләсәктә хоккей ҡумтаһы ла булыр, тип торабыҙ. Малайҙарға мәктәп эскәмйәһенән үк ир-егет тәрбиәһе биреп, армия сафтарына сыныҡтырып, шул уҡ ваҡытта төплө белем биреп әҙерләү ҙә беҙҙең бурыс бит. ГТО нормаларын тапшырабыҙ, һөҙөмтәләр һөйөндөрә: 5 уҡыусы алтын миҙалға лайыҡ булһа, көмөш һәм бронза миҙалдар ҙа байтаҡ яуланды. Үҙемә лә улар араһында ҡайнап, бергә йөрөү файҙаға ғына булды: мин дә алтын миҙалға тапшырҙым нормаларҙы. Маҡтанғандан әйтмәйем, ә иң тәүҙә үҙеңә өлгө күрһәтеү фарыз, тигән принцип менән эшләргә ғәҙәтләнелгән. Ауыл ир-егеттәре ҡорона ойошоу эҙһеҙ генә үтмәне, әлбиттә. Иң элек уның тәьҫире ауылдаш уҙамандарҙың асылып, бергәрәк тартылып китеүҙәрендә лә асыҡ күренә; спорт, йыйын һәм башҡа шундай сараларға ҡыҙыҡһыныу менән, ихласлап ҡатнашыуҙары, үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашыуҙары - барыһы ла бик ҡиммәт беҙҙең өсөн. Ир-егеттәр ҡоро рәйесе Рауил Тотманов, спорт сараларын ойоштороуҙа башлап йөрөүсе Фәһим Ишмырҙин, йәштәрҙе әйҙәүсе Надир Солтанов һәм башҡа лидерҙарыбыҙҙың эшмәкәрлек сифаттары ҡыуандыра, дөйөм эш барышында ауыл йәмәғәтселеге иң беренсе уларға таяна. Ауылды төҙөк, матур хәлдә тотоу ҙа бит ир-егет бурысы. Был йәһәттән бер-ике күпер һалыу, зыярат кәртәләрен йүнәтеү, ират ҡулы талап ителгән башҡа ҡайһы бер эштәребеҙ бар. Эшмәкәрлегебеҙҙең иң мөһим, кисектергеһеҙ бурысы шулай ҙа - эскелек күренештәренә, үҙ файҙаһын ҡайғыртып, ауылдаштарын ағыулап ятыусы намыҫһыҙ әҙәмдәргә ҡаршы көрәш. Был йәһәттән дә ир-азаматтарыбыҙ ҡоро тәүәккәллек ҡылып, берҙәм тотонор, тигән ышаныстамын.

(Дауамы 3-сө биттә).

## ИР-ЕГЕТЛЕ ИЛ КӨСЛӨ

*Сыбыҡ менеп сабыр малайға,*
*Тамағы туҡ булһа, ҡалай ҙа!*
*Урамдарҙа йүгереп уйнап йөрөр*
*Малайҙар бар әле, алай ҙа.*

*Елек кеүек кенә егеткә,*
*Ҡыҙҙар күҙләүҙәргә ек етә.*
*Егеттәргә ҡарап йән йылына,*
*Киләсәккә өмөт ҡылына.*

*Дәрәжәһе ирҙең - аҡылдыр,*
*Аҡыл тотҡан ирҙәр аҫылдыр.*
*Арыҫландай ирҙәр хужа булһа,*
*Буй бирер ҙә ҡатын баҫылыр.*

*Аҡһаҡалдар кәңәш ҡороуға,*
*Кәрәк ыҙандарға бороуға.*
*Уйлап ҡына яйлы яуап табыр,*
*Йәштәр төбәлеп биргән һорауға.*

*Ир-егете булған ил көслө,*
*Яҡын барып булмаҫ күс төҫлө.*
*Булһын, әйҙә, ҡырыҫ, булһын ҡаты,*
*Ил нигеҙе бит ул ир заты!*

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**



*✓ Элек аҡтарҙы дошман күреп, хәҙер килеп ҡыҙыл большевиктарҙы ләғнәтләүебеҙ әлеге Батьканың "Аҡтарҙы ҡыҙарғанса, ҡыҙылдарҙы - ағарғанса туҡмарға!", тигән лозунгыһын хәтерләтә биреп тә ҡуя...*



УЙЛЫҒА - УЙ

**Һуңғы ике-өс тиҫтә йыл эсендә илебеҙҙәге һәр төрлө үҙгәрештәргә күҙ ҙә эйәрмәй тиерлек. Шул арала "бөйөк һәм еңелмәҫ" коммунистар партияһы етәкләгән "емерелмәҫ" Союздың да бөтөнләйгә емерелеп бөтөүенә барыбыҙ ҙа шаһитбыҙ. Союздаш республикалар йәмғиәте сәйгә һалған шаҡмаҡлы шәкәр һымаҡ, ирене лә бөттө. Олатайҙарыбыҙ мең михнәттәр менән төҙөгән социалистик ҡоролош урынына элекке капитализм еңел генә ҡабаттан килеп ултырҙы. "Бөйөк Союз"дың әрмеһе генә лә исемен бер нисә мәртәбә үҙгәртте...**

# КЕМ ХАҠЛЫ: ҠЫҘЫЛДАРМЫ, АҠТАРМЫ?



Оҙаҡ йылдар хәрби хеҙмәттә йөрөгән кеше булараҡ, башлыса шул әрмебеҙ хаҡында уйланам. 1918 йылдың 23 февралендә төҙөлгән Ҡыҙыл армияның балаһын, күпмелер ваҡыт Совет армияһы тип йөрөтөп, хәҙерге көндә, нәҡ батша ваҡытындағы һымаҡ, "Рәсәй армияһы", ә уның тыуған көнөн "Ил һаҡлаусылар көнө" тип атайбыҙ... Ҡасандыр совет власының дошмандарын - Аҡ армияны, һәр төрлө анархист төркөмдәрен тар-мар иткән, унан Гитлер Германияһын пыранзаран килтереп, бөтә Европаны тиерлек фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарған ошо әрмебеҙ әле булһа беҙҙә потенциаль дошмандарыбыҙҙан һаҡлап торғанлығын берәү ҙә инҡар итеп маташмаҫ. Әммә, бынан ҡырҡ-илле йыл ғына элек булған сәйәсәтебеҙҙе әлеге менән йәнәш ҡуйып, шулай уҡ оло быуын тарихсыларының яҙмаларын хәҙергеләрҙеке менән сағыштырып уҡып, һуңғы осорҙа йыш күрһәтелгән элекке һәм яңы фильмдарҙы алмаш-тилмәш ҡарай торғаҫ, үҙебеҙҙең хәҙер аҡтар яҡлымы, әллә ҡыҙылдар яғындамы икәнебеҙҙе ҡапыл аңлап та булмай. Нәҡ теге "Чапаев" фильмында легендар комдивҡа: "Вы за большевиков, аль за коммунистов?" - тип һорау биргән наҙан крәҫтиән һымаҡбыҙ. Был ауыл "мужигына" Василий Иванович "За интернационал", тигән яуап тапты шунда ла. Ә беҙ уның һымаҡ уҡ тапҡыр түгелбеҙ шул, күп саҡта яуапһыҙ ҙа ҡалабыҙ...

Әхмәр Үтәбай "Киске Өфө"-лә сыҡҡан бер мәҡәләһендә күптәребеҙ онотоп барған "Батька Махно"ны иҫкә алды. Һәр төрлө үҙенсәлектәре менән йә бер, йә икенсе ҡалыпҡа тап килмәгән бындай шәхес тә бар шул тарихта... "Бей красных, пока не побелеют! Бей белых, пока не покраснеют!" тигән лозунг аҫтында аҡтарға ла, ҡыҙылдарға ла бер юлы ҡаршы һуғышып йөрөгән "Совет власы дошманы, анархист Нестор Махно" хаҡында мәктәптә уҡыған буйынса ғына беләм. Беҙҙең быуындың мәктәп йылдары совет ҡоролошон, большевиктар партияһын, Ҡыҙыл армияны күккә сөйөп маҡтаған, бөтә Ер йөҙөндә шуларҙан да яҡшыраҡ башҡа бер нәмә лә булмауы хаҡында инанған осорға тап килде бит инде. Ана шул саҡта күрһәткән фильмдарҙы ҡарап, дәһшәтле ҡыҙылгвардеецтарыбыҙ менән ғорурлана, уларҙың нисек аҡ ғәскәрҙе туҡмағанын күреп шатлана инек. Хатта махновсылар аҡтарға ҡаршы һуғышҡан бәғзе бер эпизодтарҙан да ниндәйҙер ҡәнәғәтлек кисерҙек. Сөнки ул саҡта беҙгә аҡгвардеецтарҙан да насарыраҡ кешеләр булмаған, тигән фекерҙе һеңдерҙеләр. Дөрөҫөн генә әйткәндә, уларҙы беҙгә Гитлер фашистары һымағыраҡ итеп һүрәтләнеләр. Уның ҡарауы, "бөйөк Ленин" нигеҙ һалған большевиктар партияһы етәкселегендәге Ҡыҙыл ғәскәрҙе данлап, уның сафында хеҙмәт итеүҙе әллә ни күреп, партия өсөн хатта йәнебеҙҙе бирергә әҙер булыуыбыҙ - ана шул замандың үҙенсәлектәренең береһе.

Боронғо тарихты уҡыһаң, барса нәмә асыҡ, аңлайышлы һымаҡ. Сөнки тарихсылар элекке ваҡиғаларҙы беҙгә "рәтләп", матурлап, һәр өлөшөн кәрәк урынға һалып, кәрәкмәгән (йә оҡшамаған!) урынын киҫеп ташлап, ентекләп "сәйнәп" биргән. Беҙгә уларҙы тик йотаһы ғына ҡалған. Ә бына бер юлы илдәге төрлө ҡоролоштоң шаһиты булған, һәр үҙгәреште үҙ иңендә татыған кешеләр өсөн һуңғы ярты быуат эсендәге ҡапма-ҡаршылыҡлы "ваҡиғалар бутҡаһынан" дөрөҫ кенә берәй һығымта сығарып яһауы анһаттан түгел, йәмәғәт! Элек "ҡанлы Николай"ҙы ләғнәтләһәк, илдә үҙгәртеп ҡороу башланғас та, кисә генә үҙебеҙ бөйөкләгән "данлы большевиктар"ҙы инде "ҡанлы" тип атай башланыҡ. Ул ғына ла түгел, Николай батшаға хәҙер һәйкәлдәр ҡуябыҙ, аҡгвардеецтарға ҡарата мөнәсәбәтебеҙ ҡырҡа яҡшыра бара. Башҡорт автономиһы өсөн йәнен аямай көрәшкән батыр милләттәштәребеҙҙе ҡасандыр "халыҡ дошманы, милләтсе вәлидовсылар" тип атап йөрөткәнебеҙ ҙә, моғайын, күптәребеҙҙең хәтерендәлер. Күптән түгел граждандар һуғышы командармы Фрунзе исемен йөрөткән баш ҡалабыҙҙағы урам хәҙер автономиябыҙға нигеҙ һалыусы Әхмәтзәки Вәлиди туғандың исемен йөрөтә...

Үткән ана шул барлыҡ ваҡиғаларҙы ябайлаштырып, күңел менән бағып, ирекһеҙҙән, түбәндәге картинаны күҙ алдына килтерәм. Элек аҡтарҙы дошман күреп, хәҙер килеп ҡыҙыл большевиктарҙы ләғнәтләүебеҙ әлеге Батьканың "Аҡтарҙы ҡыҙарғанса, ҡыҙылдарҙы - ағарғанса туҡмарға!", тигән лозунгыһын хәтерләтә биреп тә ҡуя... Ысынлап та шулай түгелме ни? Егерменсе йылдарҙа атай-олатайҙарыбыҙ аҡтарҙы "туҡмап, ҡыҙартып" алған булһа, беҙ иһә яңы сәйәсәткә яраҡлаштырып, үҙгәртеп ҡороуҙар мәлендә нәжескә батырғылап, хатта туҡмап тиерлек, Ҡыҙыл әрмебеҙҙе "ағартып" та ҡуйҙыҡ. Элегерәк бер мәҡәләмдә лә ошо хаҡта әсенеп яҙып үткәйнем. Туҡһанынсы йылдар башында, үҙгәртеп ҡороуҙарҙың ҡыҙған осоронда, беҙ, хәрбиҙәр, бәғзе бер мәғлүмәт саралары-ның лөғәтендә "һоро шинелдәге әрәмтамаҡтар" ҙа булып киттек... Ил һаҡсыларын ана шулай тип атауҙарына, ысынлап та, күңел әрней ине. Үткән хәлдәрҙең тик яҡшыларын ғына хәтерләргә тырышыуыма ҡарамаҫтан, 23 февраль көнө етә башлаһа, нишләптер, ана шул ваҡыт иҫемә төшә лә тора, ауыҙыңа май булғыры... Шулай, ҡәҙерле яҡташтарым, илдә бәхетле, етеш тормош вәғәҙә иткән коммунистик йәмғиәт төҙөүгә ынтылған социалистик ҡоролош мәлендә хеҙмәт итә башлап, әлеге үҙгәртеп ҡороуҙарҙы баштан-аяҡ үҙ иңендә кисергән хәрби кеше булараҡ, әрмебеҙҙе унда-бында "һелкеткеләп" алып йөрөү дәүерҙәрен иҫләп, асыҡ ҡына күҙ алдынан үткәреп алыу ҙа, бәлки, кәрәктер...

Әле лә илебеҙгә үлемесле йәҙрә ҡоралдарын төбәгән АҠШ һәм башҡа дәүләттәрҙе үҙе менән иҫәпләшергә мәжбүр итә әрмебеҙ. Һуңғы осор сәйәсәтенә ярашлы, ана шул армияның абруйын ҡабаттан күтәрергә тырышыуҙарҙы ситтән күҙәтеп, тағы ниндәйҙер ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерәм. Хәҙер инде аҡ та, ҡыҙыл да булмаған әрмебеҙгә, саҡырылыш йә иһә контракт буйынса хеҙмәттәге егеттәребеҙҙең еңел булмаған кәсептәренә уңыштар, еңеллектәр теләгем килә. Ә инде хәрбиҙәребеҙҙең ышығында тыныс ҡына йәшәп ятҡан яҡташтарыбыҙға: "Һаҡсыларыбыҙҙы әрләмәйек, уларҙы һәр ерҙә хөрмәт итәйек!" тип кенә әйтер инем.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы подполковник.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһе менән сығыш яһағанда 2020 йылдың 1 ғинуарынан беренсе һәм икенсе балаға түләүҙәр планкаһын ике йәшәү минимумына тиклем күтәрергә тәҡдим итте. Бынан тыш, ул беренсе һәм икенсе балаға пособиеларҙы йән башына уртаса килеме ике йәшәү минимумынан кәмерәк булған ғаиләләр алырға тейешлеген билдәләне. Владимир Путин шулай уҡ 2019 йылдың 1 июленән инвалид балаларҙы ҡарау буйынса пособиеларҙы 10 мең һумға тиклем арттырыуҙары хаҡында әйтте.

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров республиканың милли һәм федераль проекттарҙы тормошҡа ашырыуға әҙерлеге тураһында белдерҙе. 2024 йылға тиклем төбәк проекттарын финанслауҙың дөйөм күләме 180 миллиард һум самаһы тәшкил итер тип күҙаллана. Быйыл федераль бюджеттан 15 миллиард һумдан ашыу керем көтөлә.

✓Башҡортостанда йыл һайын үткәрелгән "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы муниципаль берәмеге" конкурсына ғаризалар ҡабул ителә башланы. Унда ауыл һәм ҡала биләмәләре ҡатнаша, улар араһынан иң яҡшы үҙидара органдарын асыҡлайҙар. Ойоштороусылар ғаризаларҙың 2019 йылдың 20 мартына тиклем ҡабул ителеүен билдәләне.

✓Сибай балалары Евпаториялағы "Хыял" шифаханаһына дауаланырға юлланды. 250 баланы 29 өлкән кеше оҙатып бара, улар араһында тәжрибәле уҡытыусылар һәм медицина хеҙмәткәрҙәре бар. Төркөм Магнитогорскиҙан Симферополгә оса, унан шифаханаға тиклем автобустарҙа бара. Балаларҙың икенсе төркөмө - 250 бала Ҡырымға 10 мартта юллана.

✓ "Салауат Юлаев" хоккей командаһы үҙ майҙанында Ҡаҙандың "Аҡ барыҫ"ын ҡабул итте. Алдан билдәләнеүенсә, беҙҙең көйәрмәндәр "Өфө-Арена"лағы был матчҡа барлыҡ билеттарҙы һатып алып бөткәйне. Уйын көйәрмәндәрҙе көйҙөрмәне һәм "Салауат Юлаев" командаһының еңеүе менән тамамланды. Шулай итеп, "Салауат Юлаев" Континенталь хоккей лигаһы регуляр чемпионатының һуңғы матчын уйнаны һәм Көнсығыш конференцияһында 6-сы урында плей-оффҡа сыҡты.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Әлегесә, яу ҡырындағы кеүек үк. Бөгөн бит халыҡты иң йүҙкеткәне - эскелек, башҡа алама ғәҙәттәр. Беҙҙең Бөрйән ир-егеттәре республикала иң беренселәрҙән булып айыҡлыҡ өсөн көрәш иғлан итте һәм эшкә лә тотондо.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ирмен тигән ир-егеткә бөгөн дә берҙәм күтәрелеп яу асыр күренештәр етерлек. Мәҫәлән, һеҙ йәшәгән тарафтарҙа маңҡортлоҡ, эскелек, тәмәке-наркотик кеүек афәт менән көрәшеүсе ир-азаматтар бармы?

**Башы 1-се биттә).**

***Зиннур БОҪҠОНОВ, Бөрйән районы Ҡыпсаҡ ауылы мәктәбенең физкультура уҡытыусыһы:*** Дөрөҫ әйтәһегеҙ, ирмен тигән ир-егеттең бер ҡасан да ҡул ҡаушырып ултырыр форсаты булмаҫ: уның тәғәйен урыны - тормоштоң алғы һыҙығында. Әлегесә, яу ҡырындағы кеүек үк. Бөгөн бит халыҡты иң йүҙкеткәне - эскелек, башҡа алама ғәҙәттәр. Беҙҙең Бөрйән районы ир-егеттәре лә башҡаса түҙеп тормаҫҡа булды быһдай ғибрәткә: республикала иң беренселәрҙән булып айыҡлыҡ өсөн көрәш иғлан итте һәм эшкә лә тотондо: башлап йөрөүсе лидерҙар төркөмө ҡор йыйҙы һәм өй беренсә йөрөп, кем эскелек менән шөғөлләнә, кем тыйылған ағыулы спирт эсемлектәре менән сауҙа итеп ята, кемеһе сәмәй ҡыуа - һәр береһе менән һөйләшеп, аңлатып, аңларға теләмәгәндәрен видеоға төшөрөп, уларҙы бөтөн донъяға фаш итте. Әле кисә генә лә бына ошо мәсьәләләр буйынса ауыл сходы булғайны, унда эскелеккә ҡаршы көрәш алып барыуҙың аныҡ саралары билдәләнде. Шулай уҡ ауылдаштарҙы сәләмәт тормош рәүешенә йәлеп итеү маҡсатында физкультура һәм спорт кеүек күмәк һауыҡтырыу саралары планы ла тикшерелде. Үҙем күп йылдар инде физкультура уҡытыусыһы булып эшләгәнлектән, инанғанмын: күмәк спорт саралары халыҡты сәләмәт тормошҡа йәлеп итеүҙә иң беренсе һөҙөмтәле сара ул. Шуға ла ауылыбыҙҙа аҙна һайын берәй спорт ярышы үткәрелеп тора. Теге аҙнала, мәҫәлән, балалар араһында хоккей уйналды, унан һуң боҙға өлкәндәрҙе сығарырға иҫәп. Яңыраҡ ҡына өлкәндәр араһында волейбол ярыштары ла булып үткәйне. Шөкөр, янып торған ир-егеттәребеҙ барҙа, ҡыпсаҡтар киләсәктә лә һынатмаҫ, тип уйлайым: йылдар буйы тормошобоҙҙо кирегә һөйрәгән алама ғәҙәттәрҙе тамырынан юҡ итеүгә бар көстәрен һалырҙар. Бәхеткә, Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров тарафынан да был йәһәттән хуплау таптыҡ: эскелеккә һәм суррогат эсемлектәр менән сауҙа итеүгә ҡаршы кисектергеһеҙ, ҡаты саралар күреү кәрәклеген ныҡлап әйтте ул: "Алкоголь һәм тәмәке ҡулланыу яман ғәҙәт кенә түгел, ә ҡот осҡос социаль бәлә... Беҙҙә эскелек менән мауыҡҡан ғаиләләр байтаҡ, улар менән берәй бәлә килеп сыҡмаҫ элек, һәр береһе менән ныҡлап эшләргә кәрәк. Участковыйҙар, социаль хеҙмәткәрҙәр, уҡытыусылар араһында быһдай хәлгә битарафтар булырға тейеш түгел", - тине бит ул һәм хатта республика прокуратураһының сираттағы ултырышында көн тәртибенә тап ошо мәсьәлә ҡуйылды. Хәҙер составында спирт булған ағыулы эсемлектәр менән кеҫә ҡалынайтыусы алыпһатарҙарға ла көн бөтәсәк, былай булғас!

***Рәйсә МЕЛКОЕДОВА, Йылайыр районы Матрай ауылы ағинәйе:*** Ҡатын-ҡыҙ нисек кенә әүҙем, берҙәм булмаһын, ил-йорт ныҡлығы, тормошобоҙ именлеге барыбер ир-егеттең ышаныслы ҡулдарында, тип әйтер инем, сөнки ғаиләлә - баш, балаларға - атай, илебеҙгә ныҡлы таяныс улар. Беҙҙең ауылда ла күп ундай ир-егет, тик, ҡыҙғанысҡа күрә, ауылда йүнле эш булмағанлыҡтан, аҡса эшләргә ситкә сығып китеүселәр ҙә байтаҡ. Шунлыҡтан, ауылда йәшәп донъя көткән урта һәм өлкән йәштәге ирҙәр "Аҡһаҡалдар ҡоро"на берләшкәйне, етәксеһе күсеп китеү сәбәпле, уның эше туҡтап ҡалыуға ҡарамаҫтан, ошо араларҙа ҡорҙо тергеҙеү бурысын хәл итербеҙ, тип торабыҙ, сөнки ауылыбыҙҙа матур итеп донъя көтөп, үҙаллы хужалыҡ итеп, ғаиләһен хәстәрләп йәшәүсе ир-егеттәр, шөкөр, бар әле. Мәҫәлән, ошо көндәрҙә бөтөн ил буйынса афған һуғышында ҡатнашҡан яугир-интернационалистарға хөрмәт күрһәтелә, улар менән осрашыуҙар ойоштороло, һәләк булғандары иҫтәлегенә таҡтаташтар, һәйкәлдәр асыла. Беҙҙең ауыл биләмәһендә лә ошо ғәрәсәттә йөрөп, иҫән ҡайтҡан дүрт яугир йәшәй. Бөтәһе лә етеш, матур донъя көтәләр, уңған ғаилә башлыҡтары, хәҙер үҙҙәре ҡартатай инде күптән. Шуларҙың береһе - Юлай Байназаров тирә-йүндә бер тигән балта оҫтаһы. Кем бура күтәрә, йорт һала - уның ярҙамыһыҙ булмай. Ишек-тәҙрәләрен эшләү тиһеңме, башҡа төрлө ярҙам кәрәкме - оҫта ҡулдар һәр саҡ кәрәк. Рәмил Йософов шулай уҡ эшһеҙ ултырмай, балалар баҡсаһын йылылыҡ менән тәьмин итеүсе оператор. Ғаиләһе уңған, мал аҫрайҙар. Владимир Хөсәйенов шәхси хужалығында йылҡы малы үрсетә, шунһң файҙаһын күреп йәшәйҙәр. Тырыш ғаилә, һүҙ ҙә юҡ. Тағын бер яугирыбыҙ Наил Теләүкәев Суртанүҙәктә йәшәй, шәхси хужалыҡтарҙан һөт йыйып тапшыра. Шулай уҡ бик егәрле, уңған ғаилә, йорт-ҡаралтылары бөтөн, донъялары етеш. Ҡатыны һыйыр һауа. Был егеттәр тыныс тормоштоң ҡәҙерен беләләр, алама ғәҙәттәр уларға юлдаш түгел - шуныһы ҡыуаныс. Уларҙан тыш, Чечня һуғышында ҡатнашып ҡайтҡан егеггәр ҙә бар. Ил именлеген тәьмин итеп, утлы мәхшәр эсендә иҫән-һау йөрөп ҡайтҡан был егеттәребеҙҙең күңелдәре ҡатмаған, киреһенсә, бөгөнгө тыныс шарттарҙа ла улар ауылдаштарына һәм ғаиләләренә терәк-таяныс булып, эш һөйөүсән, тыуып-үҫкән кесе ватаныбыҙға тоғролоҡло, мәрхәмәтле кешеләр булып ҡала алдылар, рәхмәт уларға! Байрам уңайынан ауыл биләмәһендә үҙ эштәрен асып, ауылдаштарын аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеп, һәр төрлө саралар үткәреүҙә матди ярҙам күрһәтеп тороусы фермер һәм эшҡыуарҙарыбыҙға ла рәхмәт, улар менән дә хаҡлы ғорурланабыҙ. Бына улар (тотош ауыл биләмәһе буйынса): һөт етештереү, малсылыҡ, игенселек буйынса уңышлы эшләүсе Бүләк Әптиков, уға ярҙам итеүсе Ирек Мәҡсүтов, Илшат Үтәшев һәм уның улы Илфат; Булат Үтәев, Сынбулат Мәҡсүтов; "Күләгә" кафеһы асып, унда төрлө осрашыуҙар, аят мәжлестәре үткәреүҙә ярҙам итеүсе эшҡыуарыбыҙ Юлдаш Ғәләүетдинов; элек совхоз директоры, ауыл Советы рәйесе булып эшләгән тынғыһыҙ ветеран Ғүмәр Ҡашҡаров (ул йәштәр менән әүҙем эшләй, волейбол командаһы ойошторҙо; "Байыҡ" бейеү конкурсының Гран-приһын яуланы), магазин асып, ауылды аҙыҡ-түлек, сәнәғәт һәм көнкүреш тауарҙары менән тәьмин итеүсе эшҡыуарҙар Әхәт Сөләймәнов, приютта эшләп йөрөүсе Илшат Салауатов, ауыл мәҙәниәт усағын дөрләтеүсе Руслан Йәрмөхәмәтов менән Илшат Насиров кеүек егеттәребеҙ ауылдарыбыҙ күрке һәм ныҡлы таянысы ла улар.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

БЫНАҒАЙЫШ!

**Был Чубайс тигәндәре лә ҡартайҙы түгелме, ниһайәт: тел төбө гел генә маразмға тартып тик тора лабаһа. Ярай әле, эсендәген бушатырға шул Гайдар форумы бар, шуның трибунаһынан тороп, туҙға яҙмаған хәбәр һатырға әүәҫләнеп китте был.**

# ҠАРТЛЫҠҠА - ҺАЛЫММЫ?

Бер яҡтан, уның хәлен аңларға ла була: үҙенә ҡарата көс еткеһеҙ сиккә еткән халыҡ нәфрәтен күтәреп йөрөү уйын тиһеңме әллә, шуғалыр ҙа, теге таҙ ҡысҡырған ағас ҡыуышын хәтерләтеүсе ошо форумға килеп, әленән-әле әҙәм ышанмаҫ хәбәрен яр һалып, "пар сығарып" киткеләй. Үҙе лә хәҙер апаруҡ ҡарттар отрядына ҡараһа ла (ни хәл итәһең: байлыҡ та хатта бәлтерәүҙән ҡотҡара алмай), уның кем икәненә имандары камил өлкән быуын ватандаштарын айырыуса күрә алмай имеш ул. "Кеше өлкәнәйгән һайын йышыраҡ ауырый, тимәк, табиптарға ла күберәк ул мөрәжәғәт итә. Шул уҡ ваҡытта, йәшенә ҡарамаҫтан, һалымды бөтәһе лә бер төрлө түләй. Нишләп әле бигүк ауырып бармаған йәштәр ҡарттарҙың дауаланыуы өсөн түләргә тейеш булып сыға?" - тигән һорау ҡуя Чубайс һәм ҡарттарҙың йәше арта барған һайын, сумманы ла арттыра барып, махсус һалым түләү тәртибен индерергә тәҡдим итә. "Ҡарттар йәштәр елкәһендә ултырмаһын өсөн", - тип тә өҫтәй. Тотош "Роснано" һынлы фән өлкәһе ышанып тапшырылған был әҙәмдең маразматик "асыштары" ғилем өлкәһенә бер ни ҙә бирмәһә лә, йәмғиәтебеҙҙең әхлаҡи һәм гуманистик нигеҙҙәрен арыу ғына ҡаҡшатырлыҡ яңғырай. Хәйер, нимә менән генә шөғөлләнмәй "Роснано" башлығы, тик "Роснано" проблемалары менән генә түгел. Уны тағы ла илдә өлкән йәштәгеләр өсөн "артыҡ ныҡ юғары социаль стандарттар" мәсьәләһе лә бик борсой икән. "Улар ярайһы ғына ҙур пенсия ала, айырыуса пенсия реформаһынан һуң. Ниңә уларға шул хәтлем? Ҡарттар бит барыбер күбеһенсә өйҙәрендә ултыра, аҡсаларын бер нәмәгә лә тотонмай. Шулай булғас, әйҙә, пенсияларының бер өлөшөн үҙҙәренә дауаланыуға бирһендәр". Был йән өшөткөс һүҙҙәрҙән ирекһеҙҙән һорау тыуа: ә кемгә бында дауаланырға кәрәк икән әле?..

Йәмғиәттең кешелеклелек "температураһы" ундағы ҡарттарға ҡарата булған мөнәсәбәт кимәле менән үлсәнә, тигән хәҡиҡәттең, бәхеткә, йәше лә, синыфы ла юҡ; ул хәҙер нисәмә йылдарға һуҙылған баҙар шарттарында ла, ошоноң ише чубайстарҙың, асылда, ярымҡырағай капиталистик аң кимәленә лә ҡарамаҫтан, шул уҡ хәҡиҡәт булып ҡала. Ярай, сирле ҡарттар менән бер төрлө һалым түләргә ғәрләнгәс, әйҙә, быһдай "прихватизаторҙар" класы өсөн айырым - элиталы - һалым системаһы булдырыуҙы талап итергә кәрәк, кеҫә ҡалынлығына ҡарап, йәғни прогрессив шкала буйынса. Юғиһә, был төр һалым тураһында яйлап ҡына оноттора баралар түгелме? Халыҡтың ауыртҡан бармағына баҫып, Чубайс әфәнде үҙе лә һиҙмәҫтән үҙе ҡаҙыған соҡорға үҙе килеп эләгеүе лә бар әле. Бирһен Хоҙай!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Бөрйән районында 22 февралдә "Урал батырҙың ҡышҡы уйындары" байрамы уҙғарылды. 23 февралдә Иҫке Собханғол ауылының Күҙәмбәт яланында Ватанды һаҡлаусылар көнөнә арналған саналы аттар ярыштары ойошторола. Ауыл биләмәләре һәм ойошмалар араһында йоланы тергеҙеү өсөн команда иҫәбендә Исмәғил Ғәбитовтың күсмә кубогы уйнатыла.

✓Киҙеү һәм киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән ауырығандарҙың артыуына бәйле, шулай уҡ инфекцияның таралыуын иҫкәртеү өсөн республиканың медицина ойошмаларында сикләү саралары (карантин) индерелде. Дауаханаларға кешеләрҙе индереү, балалар поликлиникаларында профилактик ҡабул итеү, мәктәпкәсә һәм мәғариф учреждениеларында балаларҙы планлы диспансерлаштырыу ваҡытлыса туҡтатыла.

✓Ватанды һаҡлаусылар көнө уңайынан өҫтәмә ял көнө булмай. Ә бына 8-10 мартта рәсәйҙәрҙе оҙайлы ялдар көтә. Майҙа Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы көнөнә - 1-нән 5-енә тиклем һәм Еңеү көнөнә 9-нан 12-еһенә ҡәҙәр ял. Бынан тыш, Халыҡтар берҙәмлеге көнөндә лә рәсәйҙәр оҙаҡ ял итә - 2 ноябрҙән 4-енә тиклем.

✓2019 йылдың 6 февраленән беренсе балаға социаль түләү (300 мең һум) биреү буйынса вәкәләттәр икенсе органға күсте. Хәҙер ата-әсәләр бөтә кәрәкле документтарҙы Башҡортостан Республикаһының торлаҡ программаларын тормошҡа ашырыу идаралығына килтерергә тейеш. Учреждениеның адресы: Өфө, Достоевский урамы, 101-се йорт. Тулыраҡ мәғлүмәтте 8 (347) 218-15-19, 8-961-046-77-29, 8-961-047-99-04 телефондары буйынса белергә мөмкин.

✓2019 йылдың 1 ғинуарына республикала уртаса пенсия 13 585 һумға етте, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда 1,195 миллиондан ашыу пенсионер йәшәй, 2018 йылдың ғинуарында - 1,177 миллион. Республика пенсионерҙарының күпселеге йәки 1,097 миллионға яҡыны страховка пенсияһын ала. Быһдай пенсияның уртаса күләме төбәктә 13 962 һум тәшкил итә. Ҡартлыҡ буйынса пенсия алған кешеләрҙең пенсияһы - уртаса 14 386 һум.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

БАШ ҠАЛАМ



**Өфө - ҙур һәм матур ҡала. Йәшел ҡала. Ниндәйҙер кимәлдә таҙа һәм йәшәү өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған ҡала. Ләкин мине Өфөнөң төрлө райондарына булған төрлөсә ҡараш аптырата.**

# ҮҘӘККӘ ИҒТИБАР ҘУР,

## ә Черниковкаға, Шаҡшаға...

Телеүҙәк, республика Хөкүмәте урынлашҡан яҡтар, ғөмүмән, ҡаланың үҙәгенә иғтибар күп. Ундағы юлдар ҙа, парк һәм скверҙар ҙа бөхтә, ҡаралған. Ә үҙәктән әҙ генә ситкә китеп, Инорс, Черниковка һәм башҡа биҫтәләргә күҙ һалығыҙ - бөтөнләй икенсе донъяға килеп сыҡҡандай тояһың үҙеңде. Ғөмүмән, төрлө яҡлап ҡарағанда ла, башҡа райондар Ленин, Киров, Совет райондарына булған иғтибарҙан мәхрүм. Мәҫәлән, мин Шаҡша биҫтәһендә йәшәйем. Беҙҙең тарафтарға етәкселек һирәк килә һәм беҙҙе борсоған проблемалар менән күптәр таныш түгел. Яңы башлыҡ автобустар мәсьәләһен хәл итеүҙе тәүмаҡсат итеп ҡуйҙы. Легаль булмаған маршруттар ябылды, "Башавтотранс"ҡа яңы автобустар алынды. Ләкин беҙҙең Шаҡшаға заманса, ғәриптәр һәм коляскалы әсәйҙәр өсөн уңайлы "Башавтотранс" автобустары бик һирәк йөрөй. Әгәр ҙә баланы коляскаһыҙ йәки санаһыҙ ҙа алып сығып булһа, ғәриптәр өсөн уңайлы шарттарҙың булыуы мөһим. Был уларҙың еңмешлеге йәки мыжыҡлығы түгел, ә мохтажлығы. Шаҡша йәки Черниковкала ғына түгел, ә тотош Өфө урамдарында инвалид коляскаһында йөрөгән кешеләрҙе күрәһегеҙме? Юҡ, сөнки улар өйҙә ултырырға мәжбүр. Сөнки улар үҙ подъездарынан да сығып етә алмай. Ә кинотеатр, театр һәм башҡа урындарға үҙаллы йөрөү тураһында беҙ, ғәриптәр, хыялланабыҙ ғына. Хатта тротуарҙан төшөү урындары ла көйләнмәгән. Ошо йәһәттән ҡалабыҙҙа башҡараһы эштәр күп һәм улар етәкселек иғтибарынан ситтә ҡалмаҫ, тип ышанам.

Беҙҙең Шаҡша биҫтәһендә шулай уҡ тиҙ арала хәл итәһе проблема - урамдарҙа яҡтыртыуҙы көйләү. Был мәсьәләлә лә күтәрелде, отчеттар эшләнде, ләкин ҡағыҙ барыһына ла түҙә, ә ысынбарлыҡта барыһы ла шулай яҡшымы икән һуң? Хәл һәйбәтләнде, ләкин беҙҙә, мәҫәлән, мәсьәлә тулыһынса хәл ителмәне.

Шулай уҡ, юл йөрөү темаһына әйләнеп ҡайтҡанда, автобустар өсөн туҡталҡалар юҡ кимәлендә. Уҡыусы балалар һәм ололар ямғыр, ҡар аҫтында автобус көтөп торорға мәжбүр.

Минең яҙмам Өфөнөң һәм, башлыса, Шаҡша районының кире яҡтарын ғына күрһәтеүгә ҡайтып ҡалмаһын өсөн, баш ҡалала үҙемә оҡшаған күренештәрҙе лә һүрәтләп үтәм. Театрҙарыбыҙ оҡшай. Уларҙың матурлығы, мөһабәтлеге күңелемә яҡын. Театр биналарына тыштан ҡарап та һоҡланам, спектаклдәргә барған саҡта уларҙың эске күркәмлегенән дә рухи ләззәт алам. Шау быяланан торған һәм бына-бына ҡойолоп төшөр кеүек күренгән замана йорттарынан айырмалы рәүештә, элекке ваҡытта төҙөлгәндәре ныҡ һәм ышанысла тойола.

Ҡалалағы фонтандар оҡшай. Ләкин улар әҙ һәм әлеге лә баяғы ҡаланың бер өлөшөндә күп, ә ҡалған яҡтарҙа юҡ, тиһәң дә була. Ҡала хакимиәте Ҡала мәҙәниәт һарайы янындағы матур фонтанды ла тиҙ арала йүнәтеп ҡуйыу мөмкинлеге тапһа, бик яҡшы булыр ине. Шулай уҡ парктарҙағы иҫәпһеҙ-һанһыҙ уйынсыҡ, туңдырма һәм башҡа төрлө әйбер, аҙыҡ-түлек һатыусыларҙы бер урынғараҡ туплап булмаймы икән? Парктың йәмен ебәреп торалар, миңә ҡалһа...

**Рәфҡәт УСМАНОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# РИЗАЛАШМАЙБЫҘ!

**Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров төбәктә сүп-сар сығарыу өсөн билдәләнгән хаҡты арттырыуға ҡырҡа ҡаршы булыуын белдерҙе.**

"Минең менән алып еткерелмәгән табыш тураһында һөйләшеүҙәр алып барырға кәрәкмәй! 70 тип әйткәс, тимәк, 70! Ә төбәк операторҙарының эш сифатын баһаларбыҙ әле. Әлегә уларҙан ҙур инвестиция һалыуҙы күрмәйем. Улар аҡса һалып, сүп-сарҙы сорттарға айырыу буйынса 20 завод төҙөһәләр, аңлайым, ул саҡта килһендәр, һөйләшербеҙ. Әлегә миңә уларға нисек ауыр икәнен әйтмәгеҙ", - тип билдәләне республика етәксеһе. Ведомстволар республикала сүп-сар йыйыу тарифтарын һәм нормативтарын бер нисә тапҡыр ҡараны. Декабрҙә төбәк операторҙарының тарифтары 4-29 процентҡа кәметелде. Башҡортостандың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты декабрҙә яҡынса ошо хаҡтарҙы билдәләне: күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәргә - 70-тән алып 98 һумғаса, шәхси йорттарҙа йәшәүселәргә - 71-ҙән 100 һумға тиклем. Башҡортостан етәксеһе был суммалар менән ризалашманы.

Уҙған аҙнала республика Экология министрлығы республика биләмәһендә контейнер майҙансыҡтарын төҙөүгә бәйле сүп-сар сығарыу хаҡының артыуы тураһында хәбәр иткәйне.

# ФЕРМЕРҘАРҒА ЯРҘАМ

**2019 йылға фермерҙарға грант ярҙамы 1,1 миллиард һум күләмендә билдәләнгән, тип хәбәр итте хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан вице-премьеры - ауыл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Илшат Фәзрахманов.**

Был - "Яңы эш башлаған фермер", "Ғаилә малсылыҡ фермаһы", "Кооперативтар" һәм "Килем килтереүсе предприятие" республика проекты программалары буйынса аҡсаның дөйөм күләме. Уҙған йыл йомғаҡтарына килгәндә, иң күп грантты Урал аръяғы төньяҡ-көнсығыш субтөбәге хужалыҡтары алған. Мәҫәлән, Баймаҡ районы фермерҙары 142,3 миллион һумға 61 грант алған, Йәрмәкәй районында 7,2 миллион һумға дүрт "фермер" гранты алынған. Быйыл муниципалитет башлыҡтарының эшенә, шул иҫәптән районға фермер гранттарын йәлеп итеү һөҙөмтәләре буйынса рейтинг төҙөлә, тип иҫкә төшөрҙө Илшат Фәзрахманов. Әле Башҡортостанда 6,5 мең крәҫтиән-фермер хужалығы эшләй. Фермер хужалыҡтарының тулайым продукция етештереүҙәге өлөшө былтыр 11,5 процент - 17,5 миллиард һум тәшкил иткән. Был Волга буйы федераль округында - өсөнсө, Рәсәйҙә 11-се урын. Башҡортостан фермерҙары 33 процент ашлыҡ, 30 процент көнбағыш, 22 процент шәкәр сөгөлдөрө, 15 процент ябыҡ грунтта үҫтерелгән йәшелсә, 5 процент ит һәм 11 процент һөт етештерә. Башҡортостанда 620 мең шәхси ярҙамсы хужалыҡ иҫәпләнә. Уларҙың килемен арттырыу өсөн республиканың Ауыл хужалығы министрлығы килем килтереүсе предприятиелар булдырыу программаһын әҙерләгән. Ауыл хужалығы министрлығы планына ярашлы, 2020 йылдың аҙағына 4,5 мең шәхси ярҙамсы хужалыҡ кооперативтарға берләшергә, һөҙөмтәлә уларҙың килемлелеге 10 проценттан артырға тейеш.

# СИБАЙҘАҒЫ ХӘЛ

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Сибайҙа карьерға һыу ағыҙыу эштәрен 20 мартҡа тиклем тамамлауҙы талап итәсәге хаҡында белдерҙе.**

"Тау-байыҡтырыу комбинаты вәкилдәре менән осрашҡанда үҙебеҙ өсөн ваҡыт билдәләнек - 20 март. Карьерға һыу ебәреүҙе 20 мартҡа ҡәҙәр тамамлауҙы талап итәсәкмен, бының күләмле эш икәнен аңлап торам, - тине республика етәксеһе Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров ҡатнашлығындағы кәңәшмә йомғаҡтары буйынса брифингта. - Башҡа шахталарҙа эштәр алып барыла. Унда эшләгән бер нисә йөҙ кешенең ғүмере һәм именлеге хаҡында һүҙ бара, шуға һағыраҡ булырға кәрәк. Әлегә беҙ һыу горизонтын туғыҙ метрға күтәрҙек, ә бер нисә тиҫтә метрға күтәрергә кәрәк. Горизонт күтәрелә башлаһа, төрлө тәрәнлектә һәм төрлө урындарҙа быҫҡып янған участкалар яйлап һыу аҫтында ҡаласаҡ. Билдәләнгән датаға уҡ хәлдең яҡшыра башлауын күрербеҙ, тип ышанам".

Сибай ҡала хакимиәте башлығы Рөстәм Афзалов белдереүенсә, карьерға һыу ағыҙыу эштәре планға ярашлы бара. Әлеге ваҡытта һыу менән тултырыу нөктәһе 540 метр кимәлендә теркәлгән, 9 метр горизонт һыу менән тултырылған. Унын һүҙҙәренсә, Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты һыу ағыҙыу кимәлен тәүлегенә 10 мең кубометрға тиклем еткергән, көкөрт диоксидын кәметеү өсөн эзбиз килтерелә.

# КЕМ АЛЫҠ!

**Башҡортостан Башлығының дәүләт һәм республика халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн гранттарын алыуға 287 ғариза бирелгән. Документтар ҡабул итеү 31 ғинуарҙа тамамланды.**

Рафаэль Шафиҡов рәйеслегендәге Эксперт советының беренсе ултырышы уҙҙы. Совет ағзалары үҙ йүнәлештәре буйынса ғаризаларҙы ҡарай башланы. Шулай уҡ документтарға юридик экспертиза үткәреләсәк. Конкурсҡа килгән ғаризаларҙың 123-ө - мәғариф, 84-е - мәҙәниәт, 24-е - фән, 13-ө - киң мәғлүмәт саралары, 9-ы йәштәр сәйәсәте һәм спорт өлкәһенә ҡарай. Рәсәй төбәктәренән - 18, айырым йәмәғәт ойошмаларынан 16 ғариза килгән. Эксперттар 20 мартҡа тиклем конкурс ғаризаларына баһа бирергә тейеш. Артабан конкурс комиссияһы еңеүселәрҙе билдәләй. Быйыл грант ярҙамының дөйөм суммаһы - 74 миллион һум. Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығында белдереүҙәренсә, 2019 йылдың 50 миллион һумына 2018 йылда тотонолмаған 24 миллион һум өҫтәлгән. Республика Башлығы гранттарына төрлө өлкәләрҙә Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм төбәктәге халыҡтарҙың телдәрен, шулай уҡ республиканан ситтә башҡорт телен һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү йәһәтенән эшмәкәрлек алып барған дәүләт һәм муниципаль унитар предприятиелары, коммерцияға ҡарамаған ойошмалар дәғүә итә. 2018 йылда гранттарға 325 ғариза бирелгәйне, улар араһынан 12 еңеүсене һайлап алдылар.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәсәй мәктәптәренең уҡыу программаһына илдең Мәҙәниәт һәм Мәғариф министрлыҡтары мәҙәни нормативтар индерергә йыйына. Йәғни, уҡыусылар йылына билдәле бер һандағы күргәҙмәләргә, музейҙарға, спектаклдәргә йөрөргә һәм бер нисә яҡшы фильм (башлыса илебеҙҙекен) ҡарарға тейеш. РФ Мәҙәниәт министры Мединский билдәләүенсә, һуңынан улар "махсус булдырылған ҡағыҙ йәки электрон көндәлектә" үҙҙәренең тәьҫораттары менән уртаҡлашырға бурыслы.

✓Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын байрам итеүгә саҡырылған ҡунаҡтар өсөн дөйөм суммаһы 6 миллион һумлыҡ сувенир продукцияһына заказ бирәләр. Тейешле дәүләт һатып алыуы Башҡортостан Республикаһының хужалыҡ идаралығынан рәсми сайтта баҫылған. Юғарыла әйтелгән аҡсаға 95 мәғлүмәт плакаты, 1 мең блокнот, саҡырыу ҡағыҙҙары, исемле карточкалар, алтын декорациялар менән көмөш ручкалар, республика гербы һәм "1919-2019" логотибы менән 200 күн, 800 яһалма күн портфель әҙерләү күҙаллана.

✓23 февралдә Өфөлә "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексында Өфө саңғы марафоны уҙа. 15-70 йәшлек һәм унан да өлкәнерәк 500-ҙән ашыу һәүәҫкәрҙең ҡатнашыуы көтөлә. Марафонда ҡатнашыусыларға һайлау буйынса 2019 метр, шулай уҡ 20 саҡрым, 30 саҡрым һәм 50 саҡрым аралар тәҡдим ителә. Ирекле стилдә йөрөргә мөмкин. Асыу тантанаһы иртәнге сәғәт 11-ҙә була.

✓Үҙәк банк Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығына 3 һәм 50 һумлыҡ иҫтәлекле тәңкәләр сығара. Тәүге көмөш тәңкәлә милли батыр Салауат Юлаев һәйкәле һәм республиканың тарихи-мәҙәни үҙенсәлеге төшөрөлгән. 50 һумлыҡ алтын тәңкәлә Өфөләге Конгресс-холл һәм Башҡортостандың дәүләт гербы һүрәтләнгән. Арттараҡ - башҡорт орнаменты. Ҡағиҙә булараҡ, Үҙәк банк иҫтәлекле тәңкәләрҙе коммерция банктарының махсус бүлектәре аша һата.

✓Кредиттар тарихының милли бюроһы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2018 йылда Башҡортостанда йәшәүселәр автомобиль һатып алыу өсөн 24 млрд 46 млн һум аҡса алған. Автокредиттарҙың күләме 2017 йыл менән сағыштырғанда 22% артҡан. Был күрһәткес менән республика ҙур суммалағы автокредиттары булған биш төбәк иҫәбендә ҡала. Бюро мәғлүмәттәренә ярашлы, кредит машиналарының өлөшө һатылған автомобилдәрҙең дөйөм һанынан 50% ашыу тәшкил итә.

✓ Программаға ярашлы, подъездарҙа тәҙрә рамдары алмаштырыласаҡ, беренсе ҡаттағы иҙәнгә плитә түшәләсәк, тамбурҙың ағас ишеге урынына пластиктан эшләнгәне ҡуйыласаҡ, стеналар буяласаҡ һәм башҡа эштәр башҡарыласаҡ.



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Яҙ һулышын тояһығыҙмы, дуҫтар? Көн торошо ҡапыл ғына үҙгәреп китте, ҡояш йылмая башланы, ҡыйыҡтарҙан тамсылар тама, ә аяҡ аҫтында... Эйе, күләүектәр йүгерә. Ул тиклем артыҡ шәп тә йүгермәйҙәр, әммә ҡар менән ҡушылып, бутҡа яһайҙар инде. Ҡала хакимиәтендә лә ошо ике темаға: ҡыйыҡтарҙы һәм урамдарҙы ҡарҙан таҙартыуға тәү сиратта иғтибар йүнәлтелде.**

# ХАЛЫҠ ИҪКӘРТЕЛГӘН БУЛҺЫН!

Кәңәшмәне алып барыусы ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Салауат Хөсәйенов аҙна башында Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың Хөкүмәт ултырышында урамдарҙы ҡарҙан таҙартыу сифатын тағы ла бер тапҡыр иҫкә алыуын билдәләне. "Бөгөн 900 кеше урынына 1400 кеше йәләп ителеүгә ҡарамаҫтан, бигерәк тә ихаталарҙы таҙартыуҙа, эшләп еткерелмәгән урындар асыҡлана. Алдағы ике көндә йәйәүлеләргә унайлыҡтар булдырыу һәм транспорттың тотҡарлыҡһыҙ хәрәкәт итеүе маҡсатында ихаталарҙа, тротуарҙарҙа, урамдарҙа тәртип булдырыуҙы йөкмәтәм", - тигән бурыс ҡуйҙы яуаплы хеҙмәттәр алдына.

Шулай уҡ, Салауат Сәхи улы әйтеүенсә, уҙған ял көндәрендә ҡалала ҡыйыҡтарҙы ҡарҙан таҙартыу буйынса рейд үткән. "Хәүефле урындарҙы рейдтар барышында түгел, ә һәр ваҡыт белеп торорға кәрәк, - тине ул район хакимиәттәре башлыҡтарына һәм яуаплы хеҙмәттәр етәкселәренә тәнҡит уғын төбәп. - Юҡһа, бөгөн иртән районлардарҙың береһендә машинаға ҡыйыҡтан ҡар төшөүе тураһында мәғлүмәт бар, ә шул уҡ урам буйынса тиҙ арала сара күреүҙе оҙаҡҡа һуҙабыҙ. Шуға күрә һәр берегеҙ һәр йортто, һәр бинаны, һәр учреждениены тикшереп сығығыҙ, үҙ вазифағыҙ буйынса саралар күрегеҙ. Бер генә предприятие ла тикшереүҙән ситтә ҡалырға тейеш түгел. Кәрәк икән, шунда уҡ таҙартыу эштәрен башлағыҙ. Өлгөрмәйһегеҙ икән - иҫкәртеүсе щиттар ҡуйығыҙ йәки ул яҡҡа үтеүҙе ябығыҙ. Халыҡ иҫкәртелеүле булырға тейеш".

Салауат Сәхи улының иғтибарынан балаларға белем биреү учреждениелары ла ситтә ҡалманы. Ундағы хәл-торош менән ҡала хакимиәтенең мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова таныштырҙы. Уның белдереүенсә, мәғариф учреждениелары ҡыйыҡтарҙы таҙартыуға махсус ойошмалар, МУП-тар, торлаҡ-коммуналь хужалыҡтар менән килешеү төҙөп, уларҙың хеҙмәте менән файҙалана. Был актуаль мәсьәләгә йомғаҡ яһап, Салауат Сәхи улы муниципалитет ҡарамағындағы матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралырының да аңлатыу эштәре алып барыу буйынса яуаплылығын билдәләне.

Оператив кәңәшмәлә башҡалар менән бер рәттән көн үҙәгенә подъездарҙы ремонтлау темаһы ла сығарылды. Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Хөкүмәт кәңәшмәһендә лә был теманы урап үтмәне, сөнки тейешле документтарҙы әҙерләп, республика Торлаҡ хужалығы министрлығына тапшырыу ваҡыты 20 февралгә тип билдәләнһә, хәҙер ул 1 мартҡаса оҙайтылды. Был йәһәттән Өфө ҡалаһында алып барылған эшмәкәрлек менән Өфө ҡалаһының Торлаҡ хужалығы идаралығы МБУ-һы директоры Раил Мирхәйҙәров таныштырҙы. Билдәләнеүенсә, быйыл баш ҡалала 548 күп фатирлы йортта 1600 подъезды ремонтлау планлаштырыла. Дөйөм алғанда, подъездарҙы капиталь ремонтлау программаһына 3604 йорт (10413 подъезд) индерелгән. Был исемлеккә 2010 йылдан һуң тапшырылған һәм 2013, 2018 йылдарҙа баҫҡыс майҙансыҡтарына ағымдағы ремонт эшләнгән йорттар инмәй. Программаға ярашлы, подъездарҙа ағас тәҙрә рамдары һәм яңаҡтары - пластикка алмаштырыласаҡ, иңеү урыны төҙөкләндереләсәк, беренсе ҡаттағы иҙәнгә плитә түшәләсәк, тамбурҙың ағас ишеге урынына пластиктан эшләнгәне ҡуйыласаҡ, стеналар буяласаҡ, лампочкалар энергия һаҡлаусы яҡтылыҡ сығанаҡтарына, почта йәшниктәре алмаштырыласаҡ һәм башҡа эштәр башҡарыласаҡ.

Раил Нур улы белдереүенсә, программала ҡатнашыуҙың бер шарты булып ошо йортта йәшәүселәрҙең дөйөм йыйылышта эштәрҙе башҡарыу исемлеген һәм стеналарҙы ниндәй төҫкә буяу зарурлығын асыҡлаған ҡарары тора. Был йәһәттән, идара итеүсе компаниялар йыйылыштар үткәргән һәм барлыҡ ҡарарҙарҙы Төбәк операторына тапшырған. Әгәр инде халыҡ исемлеккә инмәгән ниндәйҙер эште башҡарырға теләһә, ул программаны финанслашыусы булып инә ала. Подъездарҙы ремонтлауҙы 1 ноябргә тамамлау планлаштырылған.

Салауат Хөсәйенов мәсьәләнең бик етди булыуын һәм ремонтты ысын һөнәр оҫталары башҡарырға тейешлеген билдәләне, сөнки подъездарҙа инженер коммуникациялары ла бар һәм улар зыян күреп, өҫтәмә проблема тыуҙырырға тейеш түгел. Шулай уҡ ремонт эшендә ҡулланылған материалдарға махсус хеҙмәттәрҙең яңғын хәүефһеҙлеге талаптарына тап килеүе буйынса тикшереү үткәреү мәсьәләһе лә һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Атап үтелгән мөһим мәлдәр һәр район хакимиәте башлығының шәхси контроленә тапшырылды.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ХАҠТАР НИ ХАҠ?

**2019 йылдың 1 июленән Башҡортостанда йәшәүселәрҙе сираттағы тапҡыр торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә хаҡтың артыуы көтә.** Республиканың Тарифтар буйынса дәүләт комитетында хәбәр итеүҙәренсә, быйыл 1 июлдән халыҡ өсөн уртаса тарифтар түбәндәгесә тәшкил итә:

✓ һыу менән тәьмин итеү буйынса - 1 кубометр өсөн 25,96 һум, һыу булеү буйынса - 1 кубометр өсөн 26,28 һум, шуға ярашлы үсеш - 1,6 процент һәм 1,4 процент.

✓ йылылыҡ энергияһына хаҡ Башҡортостан буйынса уртаса 1992,89 һум/Гкал (НДС менән) тәшкил итә, үсеш - 101,85 процент;

✓ электр энергияһына бер ставкалы тариф 3,6 процент арта. Ауыл ерендә һәм ҡалала электр плитәләре ҡулланылған йорттарҙа тариф 0,7 коэффициенты менән билдәләнгән;

✓ 2019 йылдың тәүге ярты йыллығында халыҡҡа тәбиғи газ өсөн хаҡ, уны файҙаланыу йүнәлешенә ҡарап, 1 кубометр өсөн 6,62 һумдан алып 7,10 һумғаса тәшкил итә. Социаль-иҡтисади үсеш прогнозы 2019 йылдың икенсе ярты йыллығынан 1,4 проценттан артмауын күҙ уңында тота.

Халыҡтың коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү структураһына һыу менән тәьмин итеү (8 процент), һыу булеү (7 процент), эҫе һыу менән тәьмин итеү (8 процент), йылытыу (47 процент), газ менән тәьмин итеү (3 процент) һәм электр менән тәьмин итеү (24 процент) инә.

2019 йылда тарифтар ике этапта арттырыла: 1 ғинуарҙан бөтә илдә хаҡтар 1,7 процентҡа артты, 1 июлдән иһә Рәсәйҙең төбәгенә ҡарап.

ҠЫҪҠАСА

## ТАШҠЫН ДА ЕТЕР...

✓ **Башҡортостандың баш ҡалаһы яҙғы ташҡынға әҙерләнә.** Был хаҡта Өфө хакимиәте сайтында баҫылған рәсми документта хәбәр ителә. Мэрияла ҡаланың барлыҡ райондарында халыҡтың йәшәйешен тәьмин итеү һәм яҙғы ташҡынды аварияһыҙ үткәреү буйынса саралар планы төҙөлә. "11 мартҡа тиклем ташҡынға ҡаршы комиссиялар ойошторорға", - тиелә Өфө хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин ҡул ҡуйған документта. Ҙур һыуға әҙерләнеү процесын беренсе урынбаҫар Салауат Хөсәйенов контролдә тота. Шуны билдәләп үтәйек: Башҡортостанда ташҡындың иң юғары нөктәһе, ҡағиҙә булараҡ, апрель башына-уртаһына тура килә.

✓ **Өфө мәктәптәрен 1 апрелдән биш көнлөк уҡыу аҙнаһына күсерергә әҙерләйҙәр.** Өфө хакимиәтенең мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазова әйтеүенсә, уҡытыусылар аҙнаны планлаштырғанда ҡайһы бер шарттарҙы иҫәпкә алырға бурыслы. Атап әйткәндә, көнөнә уҡыу йөкләмәһе беренсе класс уҡыусылары өсөн - дүрт, 2-4 класс уҡыусылары өсөн - биш, 5-6 класс уҡыусылары өсөн - алты һәм 7-11 класс уҡыусылары өсөн ете дәрестән артмаҫҡа тейеш. Биш көнлөк уҡыу аҙнаһына ике сменала эшләгән мәктәптәр ҙә күсә ала. Бының өсөн көндөң икенсе яртыһындағы дәрестәр 40 минутҡа тиклем ҡыҫҡартыла һәм уҡыу киске сәғәт 7-лә тамамлана. Өфө мәктәптәре биш көнлөк менән таныш, ҡалала бындай тәжрибә 2016 йылдан бирле ҡулланыла. Әлеге ваҡытта республика Мәғариф министрлығында тотош Башҡортостанда саралар бер төрлө булһын өсөн методик тәҡдимдәр әҙерләнә.

✓ **7 майҙа һәм 20 сентябрҙә Рәсәйҙә йәнә "Эшкә - велосипедта" акцияһы уҙғарыла.** Башҡортостанда йәшәүселәрҙе акцияға ҡушылырға саҡыралар. "Көндәлек эштәрҙе башҡарыу өсөн велосипедта йөрөү - еңел һәм уңайлы, бының өсөн махсус кейем йәки әҙерлек кәрәкмәй", - ти ойошторосылар. Акция граждандарҙы шәхси автотранспорт урынына хәрәкәт итеүҙең әүҙем төрҙәрен йышыраҡ файҙаланырға күндерергә, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалауҙы әүҙемләштерергә, дәүләт, коммерция һәм дәүләткә ҡарамаған ойошмаларҙың иғтибарын ҡаланың экологияһын һаҡлау һәм транспорт эшен яҡшыртыу проблемаларына йәлеп итергә ярҙам итә.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәк

❖ Йөрәктең тибеү йышлығы боҙолһа, сәбәбе организмға калий-натрий тигеҙлеге һәм магний етешмәүе булыуы бар. 1,5 литр һыйҙырышлы термосҡа 5-әр ҡалаҡ дүләнә (боярышник) һәм уның сәскәләрен, 2 ҡалаҡ гөлйемеш, 16 бөртөк күрәгә, 1 ҡалаҡ кипкән ҡара йөҙөм һалырға һәм өҫтөнә яңы ҡайнап сыҡҡан һыу ҡойорға, төнгәләккә ҡалдырырға. Төнәтмәне көнөнә 3 мәртәбә 1-әр стакан эсергә.

❖ Көн һайын 3-әр грейпфрут, 7 күрәгә, ә йәйгеһен күберәк ташҡабаҡ ашарға. Уларҙа калий күп.

❖ 1 кг мүк еләген, 1 кг лимонды ит турағыс аша үткәреп, 1 кг бал ҡушып болғатырға һәм көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға.

### Аяҡтар тирләһә...

❖ Имән ҡайырыһынан онтаҡ (он кеүек) яһағыҙ һәм аяҡтарығыҙға һибеп, ойоҡбаш кейеп, йоҡларға ятығыҙ. Иртәнсәк аяҡтарҙы һалҡынса һыу менән йыуығыҙ. Аяҡ тирләүе бөткәнсе, һис юғында кәмегәнсе шулай эшләгеҙ.

### Һаулығыңды тикшер

❖ Тырнаҡҡа ҡара тап төшһә, бауыр ауыртыуы билдәһе.

❖ Ҡолаҡҡа оҡшаған тырнаҡ булһа, тимер етмәй, йәғни, матдәләр алмашыныуы боҙолоуын аңлата.

❖ Батынҡы, күперенке урындар бауыр ауыртҡанда, сәс ҡойолғанда, быуындар һыҙлағанда барлыҡҡа килә.

### Тамаҡ ауыртҡанда

❖ Әсе ҡаймаҡты йоҡларға ятыр алдынан һәм иртәнсәк йылытып ашарға кәрәк.

### Йоҡоһоҙлоҡтан

❖ Кисен 15 минут булһа ла тоҙло һыуға ултырығыҙ, һөртөнөп, йоҡларға ятығыҙ.

❖ Йоҡо алдынан саф һауала йөрөгөҙ.

❖ Йоҡо бүлмәһен елләтегеҙ, йылылыҡ 18 градус булһын.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

**Кейеҙ биҙәүҙең тағы бер ысулы булып бұҫтау йәки ҡалын туҡыманан аппликациялар ҡулланыу тора. Геометрик фигуралар - өсмөйөш, ромб йәки ҡуҫҡар биҙәктәр фабрика тауарынан да, өйҙә һуғылған туҡыманан да ҡырҡылған.**

Был биҙәктәрҙе кейеҙгә йәки уның тышлығы ролен үтәгән туҡымаға һырығандар. Бындай биҙәү ысулы көнсығыш ҡаҙаҡтарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа осрай. Беҙҙә иһә Урал аръяғының көнсығышында, көньяҡ башҡорттарында осрай. Борон был ысул менән төрлө маҡсатта тотонолған кейеҙҙәрҙе генә түгел, ә бұҫтау кейемде лә матурлағандар. XX быуаттың 70-се йылдарына тиклем Ҡурған өлкәһе һәм таулы Башҡортостанда туйҙың мөһим атрибуты булараҡ ҡулланылған серге һәм сергетыш биҙәкләнгән.



*Туй аты. Ҡурған өлкәһе Әлмән районы Аҫҡар ауылы. 1972 й.*

Ҡурғанда ҡыҙыл йәки йәшел биҙәк (ул тар ҙа, киң дә булыуы ихтимал) бер буй булып, кейеҙҙең ситенән һалынған. Урта өлөшө, ғәҙәттә, һирәк осрай торған ҡалынайтылған кейеҙҙән була. Орнаментта ҡыҙыл, йәшел, һары төҫтәр ҡулланылған.

1972 йылдағы экспедиция ваҡытында Ҡурған өлкәһенең Аҫҡар ауылында музейға эйәр аҫтына һалына торған кейеҙ бүләк иттеләр. Ул төрлө төҫтәге йөн сүктар һәм иске ағы һары ҡаймалы киң ҡыҙыл туҡымаға һалынған биҙәкле аппликациялы ине. Биҙәктәр йәшел туҡыманан ҡырҡылған. Кейеҙҙең мөйөштәренә 2 йәшел, 2 ҡыҙыл өсмөйөш тегелгән (төҫ симметрияһы диагональ буйынса һаҡланған), уларға һары биҙәктәр һалынған.



*Кейеҙҙәрҙәге аппликацияны биҙәктәр өлгөләре.*

Ошо уҡ йорттағы тағы бер эйәр аҫты кейеҙе тап булды. Нигеҙҙе тәшкил иткән аҡ кейеҙ тар ҡыҙыл буй менән тышланған. Уның өҫтөнә кейеҙҙең уратһына ҡаратып киртләс биҙәк беркетелгән. Киртләсте ҡырҡҡандан ҡалған тауарҙан бәләкәй өсмөйөштәр бесеп, уның менән ошо биҙәктең ситтәрен биҙәгәндәр. Ҡыҙыл таҫмалар менән иске майҙандың мөйөштәре киҫелгән. Бындай эйәрҙәр туйға махсус әҙерләнгән. Матурлап биҙәлгәне ҡыҙҙың атаһы бүләк итеп биргән кейәү атына тәғәйенләнгән.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҒАИЛӘ ҺАБАҠТАРЫ

**"Киске Өфө"ләге малайҙар, атайҙар, ғөмүмән, тәрбиә хаҡындағы яҙмаларҙы ҡыҙыҡһынып уҡып барам. Үҙемдең дә фекерҙәр тыуа торҙо, ләкин бығаса яҙырға ҡыйманым. Быныӊ да үҙ этнәкәһе бар - минең радиусымда малайҙар ҙа, атай ҙа булманы. Атай үлгәндә миңә бер йәш булмай ҡалған. 11 айлыҡ ҡына ҡыҙ бала үлем түшәгендә ятҡан атаһының ҡул сәғәтенә алданып, атлап киткән дә, артабан тормош дауылдары ҡосағына атайһыҙ ташланған. Шуға күрә күңелемдең атай була торған урыны буш. Берәй әхирәтем атаһы тураһында матур итеп һөйләһә, эстән генә, атайҙы ла әсәйҙе яратҡан һымаҡ яратып буламы икән ней, тип уйлай торғайным. Ир туғандарым да юҡ. Беҙ ғаиләлә биш ҡыҙ бала үҫтек. Бөтә ир-ат эше беҙҙең елкәлә булды. Миләүшә Ҡаһарманованың "Атайыма ошаҡлаштым" тигән мәҡәләһендә, атайым көрәк, һәнәк тотторманы, тигәнен уҡығас, хатта күңләшеп ҡуйҙым. Ә был эш ҡоралдары беҙҙең ҡулдан төшмәне. Эйе, атайлылар атайға таяна, ошаҡлаша ла алалыр, ә атайһыҙҙар кемгә ошаҡлашырға, кемгә һыйынырға тейеш һуң? Минең яҙмам ошо хаҡта.**

# АТАЙЛЫ БАЛА - АРҠАЛЫ,

## ә атайһыҙ бала?

### Атайһыҙлыҡ утын быстырҙы...

... Көндөҙ хужалыҡ бесәнлегенә кәбән алырға барған сағында юлайҡан алып ҡайтҡан һырғый ҡайын ағастарын тракторист ағай беҙҙең өй тапҡырына ҡалдырып китте. Энерҙә күрше ағай уны быса башланы. Беҙ апайым менән бәләкәй ағас санаға көс-хәл менән тейәп, теге ыуан сей түмәрҙәрҙе ихатаға ташыйбыҙ. Әсәй әллә ҡасандан бирле көткән утын килгән бит! Шуға эштең ауырлығын да тоймай, йүгереп йөрөйбөҙ. Аҙаҡ ул түмәрҙәрҙе ишек алдында ярабыҙ. Күтәреп бәрергә көс етмәй, һыуыҡ көндә туңған түмәрҙәрҙең ситтәрен сәрпей-сәрпей, нәҙегәйтеп алғас, балта менән күтәреп, икенсе түмәргә һуҡһаң, урталай ярылып китә. Өлкән ике апай ҡырҙа уҡыуҙа, шуға әсәй, апай, мин - өсәүләп алмашлап ярабыҙ. Унан әрҙәнәгә теҙәбеҙ. Йәш ҡайындың ауырлығы... Был утын киләһе ҡыш өсөн. Йәйгеһен әрҙәнәгә тейергә ярамай - был яҙылмаған закон. Йәйгеһен әсәй таң менән тороп, ферма тирәһенән һайғау-таҡта ҡалдыҡтары һымаҡ нәмәләрҙе яурынына һалып йөкмәп алып ҡайта. Үҙе сенаж һалырғамы, миндек бәйләргәме, ҡырға эшкә киткәндә беҙгә шуларҙы бысып, ярып ҡуйырға ҡуша. Аласыҡҡа тик шундай утынды ғына яғабыҙ. Апайым менән бысабыҙ. Атайлы әхирәттәргә мәрәкә - улар беҙгә килеп, ҡыҙыҡ өсөн арҡыры бысҡы менән утын бысып ҡарайҙар...

Йылдар үтеп, инде үҙебеҙ күҙле-башлы булғас, Гүзәл апайымдарға бер барғанымда утынлыҡтарына күҙ һалып, "Утынығыҙ бөтөп бара түгелме, фәлән ағай утын һатып йөрөй ине..." тигәс, апайым: "Бөтһә, табыр, ир бар бит, бала саҡта үҙәгемә үткән ул утын. Шуға хатта уйлағым да килмәй, ҡыҫылмайым да. Эҙнең утынһыҙ итмәй ул барыбер", - тип ҡуйҙы...

### Атайһыҙлыҡ күбәсе итте...

Әсәй бесәнде беҙҙең менән, йәғни ыбыр-сыбыр ҡыҙҙары менән генә әҙерләй. Шуға ла был эште беҙ июль урталарында башлап, август аҙағында тамамлайбыҙ. Ҡурала ике һыйыр, ике башмаҡ, быҙауҙар, тиҫтәләп һарыҡ-кәзә. Бөтә кәрәк-яраҡты елкәгә йөкмәп, йәйәүләп китәбеҙ сабынлыҡҡа. Елкәлә - салғы, ҡулда тәйөнсөк, баҡырса. Әсәйгә тәйөнсөк эләкмәй, ул салғыһын елкәһенә һала ла, юл буйы йөн ойоҡбаш бәйләп бара. Нисек эләгеп йығылмағандыр. Ишле балаларға өлгөрттөргә кәрәк бит. Бакуй араһында хәл алырға туҡтағанда ла бәйләмен ҡулына ала һала. Бәләкәй генә саҡтан өйрәттеләр салғыға. Йыйыу, күбәләү - тотошлайы менән беҙҙең елкәлә. Кәбән ҡойорға берәй ағай килһә, мин ат башында күбә тарттырам. Ағайҙар аяҙҙа уҙәренең бесәненән бушамағас, ямғырлыраҡ мәлдәрҙә һалына ине кәбәндәребеҙ. Шуға ҡышҡыһын бесәндең ҡатмағын ҡайһы саҡ балта менән тумырырға тура килә. Ҡарайып серегән урындары ла байтаҡ була... Үҫә төшкәс, күбә эшләүгә шәп булдым. Һеңлем менән әсәй бакуй йыйып өлгөртә алмай, мин өҫтәренә менә яҙып күбәләй торғайным. Яхмарҙарҙы тапап-тапап эшләгәс, һәнәктең осон ерҙ ҡаҙап, туп-тура итеп күтәреп алһаң, еңелерәк була. Күбәгә һалынған һәр яхмарҙан һуң ситкәрәк китеп, йүгереп барып, һәнәкккә таянып күбәмә осоп ҡына менеп, тапап төшәм. Эҙнәмдең: "Таңһылыу, күбәң елле була, ат һөйрәмәй, бәлкәйерәк итеп эшлә әле", - тигәне хәтерҙә.

...Бесәнгә, йөк булмаһын, тип, емешеләк ҡайнатмалары алып йөрөмәнек, урманда ҡайнатып ашанЫҡ. Һаҙҙан ҡарағат, эргәләге әрәмәнән ҡурай еләге, үләң араһынан турғай еләге, шартый йыйып алабыҙ ҙа, балығы ашалған ҡалай кәнсирҙә шәкәр менән бутап, шул емешеләктәрҙе һалып, вариниә ҡайнатып алабыҙ. Их, ул ҡатышманың тәмлелеге-е! Өйҙә кискә аш бешереп ҡуйған кеше юҡ, шуға, икенсе сәйгә өлгәрһән, тип, барғас та сулмәккә ит һалып ебәрәбеҙ. Уның аҫтына киҫкә һалып ҡуйһаң, яйлап ҡайнап тик ултыра. Әсәй әйтмешләй, өйҙәге утынға ла экономия. Кискеһен ҡайтыу тағы ла ауырыраҡ. Көнө буйы аяғөҫтә йөрөгәс, арыта. Әсәй аҡһабыраҡ атлай. Етмәһә, күрше бабайҙан сүкетергә тип, көн аша салғыларҙы йөкмәп алып ҡайтабыҙ. Эргәнән атайлы балалар хуш еҫле бесән тейәлгән арбала ҡырын ятып ҡына үтеп китә. Ҡайһы саҡ берәйһе ултыртып ала. Шундағы көнләшеүем атайлы балаларға! Миләүшә Ҡаһарманова әйтмешләй, болараҡ булһа ла, атай булһын ине ул, тип уйлай инем. Арбалы ат рәхәтлектең сиге һымаҡ күренә ине. Ҡайтыуға, йәшелсәгә һыу һибеү, ашарға бешереү, һыйыр һауыу, ваҡ малды әҙләп алыу кеүек эштәр көтөп тора. Юҡ, зарланып, яҙмышты, тормошто әрләп башҡармаҡ был эштәрҙе, шулай тейеш, кәрәк тип эшләнек. Урамда уйнап та өлгөрә инек әле ул.

### Атайһыҙлыҡ балта ла тотторҙо...

Сөй ҡатыу, берәй нәмәне рәтләп бысып ҡуйыу кеүек эштәргә ҡул килешеп китте. Клубта эшләгән сағымда, һауынсылар етмәгәс, йәйләүгә ебәрҙеләр. Беҙгә, ҡыҙҙарға, яңы ғына төҙөлгән өйҙә бирҙеләр. Төҙөүселәр беҙҙән алда ғына эште тамамлап ҡайтҡандар. Тегендә лә, бында ла таҡта киҫәктәре ятып ҡалған. Мин шуларҙан аҙыҡ-түлек һәм китаптар, биҙәнгестәр өсөн айырым кәштәләр әтмәләп ҡуйҙым. Атайлы әхирәттәремдең аптырап бер булғаны хәтерҙә. Уларҙың балтаны ҡулдарына ла тотҡаны юҡ ине, әлбиттә... Ә минең уста балта, көрәк, һәнәк, салғы һаптары һалған һөйәлдәр бер ваҡытта ла бөтмәне.

### Күҫәк ағай ҙа, атай ҙа булды...

Эйе, ағайлы, атайлы ҡыҙҙар, атайыма әйтәм, ағайымдан кәрәгендә бирҙертәм, тигән һүҙҙәре менән күп мәсьәләләрен хәл итә торғайны. Ә минең артта бер кем дә юҡ. Ҙур ғаиләнән етеш йәшәтәм тип мәңге эштән ҡайтып инмәгән әсәйгә ошаҡлашып булмай - үҙенде һыҙлып әрләй ҙә ҡуя. Шуға, үҙемде үҙем яҡлап, ҡатынҡы, хатта ҡырыҫыраҡ, уҫалыраҡ булып үҫтем, шикелле.

Мәктәптә уҡыған саҡтар. Парталар ағастан ине. Хәтерегеҙҙәлер, уларҙың ҡапҡастары, портфель һала торған урындары булды. Бына шул ерҙә сумкам менән йөнәшә ... утын ағасы ята торғайны. Ул мәлдә һәр класс айырым мейес менән йылытылды. Шуға йыйыштырыусы апай, һурыҡһын, тип, мейес артына һәр ваҡыт утын һалып ҡуя торғайны. Шуларҙың берәүһе мотлаҡ минең парта аҫтында "кибә" ине. Малайҙар быны белде һәм миңә артыҡ оронсоҡтары теймәне. Хәйер, бер малайҙың сәғәтен онтаным. Икенсе рәттә беҙҙән саҡ ҡына алдараҡ ултырған бер малай (хәйер, үҫмер инде, танауына еҫ кәрә башлаған мәлдә - 8 класта булды, ахыры, был хәл) бәләкәй көҙгө алып килә лә, көҙгөнән беҙҙе ҡарай ҙа ултыра торғайны (әхирәтемдеме, минеме - кем белһен). Был минең зитҡа тейә бит инде. Был бер ҡулын беҙҙең партаға һалып, икенсе ҡулына көҙгөнән тотоп, сираттағы тапҡыр көлә-көлә беҙҙе ҡарап ултыра. Йәнем көйөп китте лә, теге утын ағасын эшкә ҡуштым да ҡуйҙым - беҙҙе партаға һалған ҡулына һуҡтым. Ул тиклем нык итеп түгел инде. Ләкин еңе эсендә күренмәй торған ҡул сәғәтен онтарға эшкингәнмен. Һыр бирмәһәм дә ҡот осто. Етмәһә, әсәһе уҡытыусы тегенен. Ҡасан уҡытыусы апай инеп әрләр икән, тип көтәүелләп йөрөнөм, инмәне. Төштән һуң мәктәпкә ниндәйҙер сарағa барҙыҡ. Шунда контратакаға күстем. "Азамат, егет түгел икәнһең. Сәғәтең тураһында әсәйеңә әйткәнһең дә икән",- тинем дә ҡуйҙым. Был аптырап китте. "Әсәйемә хеҙмәт дәресендә таҡта ташығанда таҡта төшөп онталды, тигәйнем ул", тигәс, тәңгә лә, йәнгә лә бер аҙ йылы йүгерҙе. Егет булған икән класташым, тейем хәҙер.

Әйткәндәй, мәктәп тамамлап, ауыл клубында эшләп йөрөгәндә лә ҡапҡам төбөндә һуйыл торҙо. Егеттәр ҡапҡанан индермәй бәйләнә башлаһа, һуйылды бер сығарып күрһәтеүем етә ине. Утын ағасы менән һуйыл шулай миңә ағай ҙа, атай ҙа булды... "Уға яҡынлап булмай, йә берәй әсе генә һүҙен әйтә лә, иҫеңде йыйғансы инеп тә китә, йә һуйылын сығара" тигәндәр миңә күҙе төшөп йөрөгән бер егеткә лә. Шунан был оҙата килергә ҡурҡып йөрөгән. Йылдар үткәс, һөйләп көлдөрҙө...

### Атайһыҙлыҡ шулай ҡыйыу иткәндер...

Атайһыҙлыҡ ат егергә лә өйрәтте. Ул мәлдә ауылдағы байтаҡ эштәр ат менән башҡарылды. Бер мәл райондың билдәле ҡобайырсыһы Гүзәл Һырлыбаева беҙҙең

ауыл клубында эшләне һәм (ул ваҡытта Ҡасҡынбаева ине әле) беҙҙә фатирҙа торҙо. Үҙебеҙҙең бер туған апай һымаҡ булды ул. Әле лә шулай, аралашып, туғандар һымаҡ йәшәйбеҙ. 8 мартҡа был ауылына ҡайтырға булды. Ауылыбыҙ төпкөлдә, техника (трактор) район үҙәгенә бик һирәк кенә, райпоға тауарға ғына бара. Апайҙың ауылы район үҙәге аръяғында. Район үҙәгенә тиклем беҙҙең ауылдан 30 саҡрым, артабан - 15 саҡрым. Ауыл йәштәренең тегене ҡайтарғыһы килмәй. Гармунсы, йырсы Гүзәлһеҙ байрам байрам буламы һуң. Апай бригадирҙан ат һорай. Теге егеттәргә ат һарайынан ат барып алып, егеп бирергә ҡуша. Кашауай санаға ат егеп бирҙеләр. Әсәй санаға толоптар сығарып һалды. Иптәшкә мине алды Гүзәл апай. Ҡышҡы тын юл. Мине толопҡа төрөп ултырттылар. Икәүләп сығып киттек. Нисек бүренән ҡурҡмағанбыҙҙыр. Тик ат теңкәне ҡоротто бит. Бара-бара ла юл ситендәге көртҡә сума, бара ла сума. Баҡтиһәң, кире боролһон, ауылына ҡайта алмаһын, тип, егеттәр, шаяртып, бер күҙе һуҡыр атты егеп биргәндәр икән. Инде район үҙәгенә етергә 4-5 саҡырым самаһы ҡалғас, тау башында атыбыҙ туғарылды. Гүзәл апай бөтөнләй ат күреп үсмәгән әлеге лә баяғы "атайлы бала". "Аптырап, аттың бер уң яғына, бер һул яғына сығып йөрөй инем, толоп эсенән танауы ғына күренеп ултырған 12 йәшлек Таңһылыу команда бирә башламаһынмы: анауыһын аттың бауыры аҫтынан үткәр, тегенеһен үҙеңә ҡарай тарт, хәҙер аяғыңды ҡамытҡа терәп тарт, тип өйрәтеп ултыра, мин йүгереп йөрөп, ул әйткәндәрҙе үтәйем. Шулай буйтым итеп егеп алдыҡ теге атты", - тип көлөп һөйләй хәҙер Гүзәл апай. Әлеге лә баяғы атайһыҙлыҡ шулай ҡотҡарҙы был бәләнән...

### Ҡыҙым терәкле булды

Ә бына ҡыҙым, Аллаға шөкөр, һәр саҡ арҡалы булды. Ҡыҙым менән апайымдың улы бер класта уҡынылар. Динар ҡустым, унан йәш буйынса бәләкәйерәк булһа ла, Ләйләм өсөн терәк булды. Бер мәл, 9-10 класта әле ул, тәнәфес ваҡытында Динар Ләйләнең күҙен ҡаплап илап ултырғанын күргән дә, Ләйләне кем илатты, тип класташ егеттәрен дер һелкеткән. Бер мәл ҡыҙым менән апайымдарҙан ҡайтып барғанда бер малай ҡапҡаһынан килеп сыҡты ла, минән алдараҡ велосипедта китеп барған ҡыҙымдың арҡаһына таш бәрҙе. Һыңҡ итеп ҡалды ҡыҙым. Мине аңғарманы инде теге хулиган. Баҫтырып ҡараным, ихатаһына инеп йәшенде. Был хаҡта еҙнәмә, Динарҙың атаһына, һүҙ араһында ғына көйөп әйтеп ҡуйҙым. Фәнил еҙнәм шунда уҡ барып, теге малайға ҡыҙымдың яҡлаусыһы кем икәнен аңғартып, "ирҙәрсә" һөйләште. Бүтән ҡыҙыма бармаҡ менән дә тейеүсе булманы. Кемдең кеме икәнен белделәр бит инде.

Ҡыҙыма атаһы көрәк-һәнәк тоторманы. Ауылға бесән әҙерләшергә барғанда ғына эләккеләгәндер, бәлки. Студент сағында ялға ҡайтҡанында атаһы менән ярты төнгә тиклем серләшеп ултырырҙар ине. Уларҙың иплән кенә көлгәненә уянып китеп, ятығыҙ, тиһәм дә, үҙем бик ҡәнәғәт була торғайным - ҡыҙымдың бит атаһы бар!

Ә хәҙер ҡыҙымдың үҙ ғаиләһендә арҡалы булыуына ҡыуанам. Ҡыҙым менән кейәүемдең туйында ҡәйнәһенең әйткән һүҙҙәре күңелемә май булып яғылды: "Улым, - тине ул, кейәүемә төбәп, - атайың нисек итеп мине бер нәмәгә мохтаж итмәй йәшәтте, ысын терәк булды, һин дә киленде шулайтып ҡәҙерләп көт".

Эйе, ағайһыҙлыҡ, атайһыҙлыҡ михнәттәрен бик күп татырға тура килде. Шөкөр, яйлап апайҙарымдың улдары үҫте. Машинамдың бер сөскөрөүе була, ҡайһы ҡустым буш, аҫҡысымды шуныһының ҡулына тоттора һалам (әлбиттә, уларҙы страховкаға яҙҙырып ҡуйғанмын). Ҡараттырып йәки үҙҙәре ҡарап алып килеп ҡуялар...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кешелектең ир-ат тигән өлөшө менән, нигеҙҙә, китаптарҙағы, киноларҙағы геройҙар аша таныштым. Ир-егет көслө, ҡатын-ҡыҙға ҡарата хәстәрлекле, үҙ һүҙен тота белеүсе, гәҙел, аҡыллы булырға тейеш тип инанып үҫтем. Тик... Баяғы барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙар ҙа наҙлы, матур булмаған кеүек, ир-егеттәр араһында ла бөтөнләй кире образдар осрап ҡуя, әлбиттә. Эргәһендә хәстәрлекле, аҡыллы ир заты булһа, ҡатын-ҡыҙға наҙлы, хәстәрлекле хужабикә булыуы ҡыйын түгелдер ул, үҙенән-үҙе шундайға әйләнәләр. Сөнки быға өйрәнергә кәрәкмәй, ул бит гүзәл затҡа тәбиғәттән һалынған. Тик бәгзеләребеҙ тап шул хәстәрлек, ҡурсалау етмәү арҡаһында, һыр бирмәҫ өсөн, ҡатынҡы, көслө ҡатын-ҡыҙ битлеге кейеп йөрөмәй микән?..**

**Таңһылыу БАҺАУТДИНОВА.**

ХӘТЕРКИТАП

# ХАЛЫҠ БӘХЕТЕ ӨСӨН

**Кинорежиссер Булат Йософовтың "Беренсе Республика" тип аталған тулы метрлы тарихи нәфис фильмы төшөрөлгәс, "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына уның геройҙары тураһында ҡыҫҡаса һөйләп, тарих архивтарынан, фәнни хеҙмәттәрҙән, музейҙарҙан тупланған фотоларын, шулай уҡ фильмдың костюмдар буйынса рәссамы Әлиә Байрамғолованың фильмды төшөрөү майҙансығынан яһаған фотоларын да тәҡдим итергә булдыҡ. "Ҡабаттан йәнләнгән фотоһүрәттәр" тигән был проект үҙенең һәләте, хеҙмәте менән ил тарихын, милләт яҙмышын яҙған кешеләрҙең исемен ҡабаттан иҫебеҙгә төшөрөү өсөн кәрәк беҙгә, тип уйланыҡ.**





*Ғөбәй Дәүләтшин менән актер Илгиз Миңләхмәтов.*

**Ғөбәй (Ғөбәйҙулла) Әхмәткирәй улы ДӘҮЛӘТШИН** (актер Илгиз Миңләхмәтов уйнай) - билдәле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре. Беренсе донъя һуғышы башланыу менән рус армияһы һалдаты булып, фронтҡа китә. Ошо мәлдә ул ғүмерен халыҡ бәхете өсөн көрәшкә арнарға хәл итә. 1917 йылдың февраленән алып ҡулға алынғанға тиклем совет һәм партия органдары уны иң яуаплы етәксе вазифаларға тәғәйенләй: Мәскәүҙә үткән мосолмандарҙың 1-се Бөтөн Рәсәй съезы делегаты, "Башкурдистан" гәзите хеҙмәткәре, Татар-Башҡорт Совет Республикаһы ойоштороу съезын йыйыу буйынса комиссия ағзаһы, ВКП(б) Үҙәк комитетының Үҙәк Татар-Башҡорт Бюроһы ағзаһы, "Эшсе" гәзите, "Ҡыҙыл Шәреҡ" журналы мөхәррире, РКП(б) Үҙәк комитеты ҡарамағындағы "Нәшриәт" нәшриәте идаралығы рәйесе, Башҡорт АССР-ы мәғариф халыҡ комиссариатының Академ үҙәге етәксеһе, РКП(б)-ның Арғаяш кантком яуаплы секретары, БАССР мәғарифы халыҡ комиссары етәксеһе урынбаҫары, ВКП(б)-ның Башҡорт өлкә комитетының матбуғат политбүлеге етәксеһе, Башҡорт китап нәшриәтенең баш мөхәррире, Баймаҡ районы "Йылайыр" совхозының политбүлеге начальнигы, Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институты директоры. 1935 йылдың ноябрендә Ғөбәй Дәүләтшин БАССР мәғарифы халыҡ комиссары итеп ҡуйыла. Был вазифаһында туған телдә уҡытыу һәм милли мәктәптәр асыу эшен ойоштороуға ҙур көс һала. 1936 йылдан "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналының баш мөхәррире вазифаһын да йөкмәтәләр. 1934 йылда Башҡортостан совет яҙыусыларының 1-се съезы делегаты.

1920 йылдарҙа Ғөбәй Дәүләтшиндың "Ҡуңалтаҡ тормош эсендә", "Ҡунаҡ" хикәйәләре, "Зильский" повесы (1927) донъя күрә. 1936 йылда Ғөбәй Әхмәткирәй улы "Коммуна" романынан өҙөктәр баҫтыра, әммә был әҫәрен тамамлай алмай.

1937 йылда Ғөбәй Дәүләтшин "контрреволюцион эшмәкәрлек"тә ғәйепләнеп, репрессиялауға дусар була. 8 ай буйына барған допростарҙа тикшереүҙең законһыҙ ысулдарын ҡулланыуҙан һуң, ул милли дәреслектәр төҙөүҙә ҡатнашҡанда зыян итеүен, "Яңы юл" әҙәби-художестволы журналын мөхәррирләгәндә аңлы рәүештә контрреволюцион милли әҫәрҙәр индереп ебәреүен, "Ҡунаҡ" хикәйәһендә Совет власы ваҡытында ярлы крәҫтиән тормошоноң ҡотолғоһоҙ булыуы мәсьәләһен күтәреүен, "Тревога" хикәйәһендә Ҡыҙыл Армияға яла яғыуын "таный". Шулай уҡ республикала асырға рөхсәт ителгән 230 мәктәптең барыһын да тиерлек башҡорт мәктәптәре итергә теләүен, уларҙың 60-ы ғына башҡа милләттәргә тәғәйенләнеүен, уҡытыусыларҙы һәм милли мәғариф етәкселәрен маҡсатлы рәүештә милли принцип буйынса, уларҙың да советтарға ҡаршы фекерҙә булыуын һайлауын, халыҡ араһында ризаһыҙлыҡ тыуҙырыу өсөн татар мәктәптәренә - башҡорт, башҡорт мәктәптәренә татар уҡытыусыларын ебәреүен нахаҡ рәүештә "танырға" мәжбүр итәләр. Һөҙөмтәлә, Ғөбәй Дәүләтшин РСФСР Енәйәт Кодексының 58-се статьяһының бер нисә пункты буйынса ғәйепле тип табыла. 1938 йылдың 10 июлендә ҡарар тормошҡа ашырыла. 1957 йылда аҡлана.

**Гөлнара ЯРУЛЛИНА,**
**тарих фәндәре кандидаты,**
**проект авторы.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



*Әкрәм БЕЙЕШ*

# БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ӨСӨН КӨРӘШ БАШЫНДА

Ваҡытлы революцион совет Башҡортостандағы халыҡтарҙы, "диненә лә, милләтенә лә ҡарамай", автономияла берләштерергә уйлаған һәм тиҙ көндә Башҡортостан съезы йыйып, уға бөтә эште тапшырыу бурысын төп бурыс итеп һанаған. Ваҡытлы революцион совет әҙерләгән "Башҡортостан автономияһы хаҡындағы ҡағиҙәләр проектында" Башҡортостан автономияһының ғәмәлдә булыуы билдәләнгән һәм Автономиялы Башҡортостандың Федератив Рәсәй эсенә инеүе, Автономиялы Башҡортостанда Советтар съезының юғарғы власть органы булып тороуы һ. б. күрһәтелгән.

Ваҡытлы революцион совет Башҡортостанда большевиктар талабына яуап биргән яңы Совет власы органы төҙөгәнлеге хаҡында үҙәк хөкүмәткә тиҙ генә телеграмма ебәргән. Халыҡ Комиссарҙары Советына ул Башҡортостанды татарҙар ойоштороп ятҡан Урал-Волга штатына индереүгә ҡырҡа ҡаршы булғанын белдергән һәм башҡорт автономияһын раҫлатыр өсөн Мәскәүгә тулы хоҡуҡлы вәкәләт ебәреүен хәбәр иткән. Бәхтегәрәй Шәфиев етәкселегендәге дүрт кешелек вәкәләт 26 мартта юлға сыҡҡан. Ләкин Халыҡ Комиссарҙары Советы Башҡортостандың хатта совет автономияһы хаҡында ла ишетергә теләмәгән. Уның урынына ул башҡорт вәкәләте юлға сыҡмаҫ борон уҡ, 22 мартта, Татар-Башҡорт республикаһы төҙөү тураһында декрет сығара һалған. Был Татар-Башҡорт республикаһы татар шовинистары ҡорорға уйлаған Урал-Волга штатынан исеме менән генә айырылған һәм ул төҙөлгән көнөнән үк бөтөүгә дусар булған. Шул уҡ ваҡытта Ырымбур губерна ревкомы Ваҡытлы революцион советты бик ҡаты эҙәрлекләй башлаған. Ырымбур ревкомы башҡорт автономияһының һәр төрөнә принципиаль рәүештә ҡаршы торған һәм башҡорт хәрәкәтен тамам ҡыйратыр өсөн уңайлы мәлде генә көткән. Был эштә уға татарҙар бик ныҡ ярҙам иткән. Татарҙар, Башҡорт хөкүмәтенә ҡаршы көрәшкән кеүек, Башҡортостандың ваҡытлы революцион советына ла тәүге көндән яу булып ҡаршы сыҡҡан. Улар БВРС-ты үҙ ҡулы аҫтына алырға тырышҡан, уның эш сараларына бөтә яҡлап аяҡ салған, төрлө яла яҡҡан һәм башҡорт автономияһына юл ҡуймаҫ өсөн йәнә бөтә көсөн һалған. Ваҡытлы революцион советтың Башҡортостан автономияһына күпселек боронғо башҡорт ерен индереүе, батша заманында талап алынған бөтә башҡорт ерен һәм мөлкәтен Башҡортостан хөкүмәте ҡарамағына ҡайтарыуҙы талап итеүе һ. б. татарҙар менән Ырымбур ревкомының бигерәк ныҡ асыуын ҡабартҡан, уларҙың шовинистик сәменә тейгән. Шуға күрә 1918 йылдың 30 мартында хәрби ревком урынына 25 мартта һайлап ҡуйылған Ырымбур губерна Советының башҡарма комитеты ике ай эшләргә лә ирек бирмәй, Башҡортостандың ваҡытлы революцион советын ҡыуып тараҡҡан. Таратыу өсөн башҡорт менән татар араһындағы тартыштың ныҡ көсәйеүе һылтау ителгән, ләкин төп сәбәп ҡарарҙың үҙендә сиселгән. Унда, социалистик революция милли сик һәм милли автономияны ҡабул итмәй, тип әйтелгән. Үҙәк Совет хөкүмәте Башҡортостандың ваҡытлы революцион советын таратыу тураһында хәбәр алғас, тағы бер һүҙ ҙә өндәшмәгән.

**(Дауамы бар).**

✓ *Минең белеүемсә, башҡорт егеттәренең күбеһе хәрби уҡыу йорттарына ана шул бер яҡлы ғына үҫешеүе һәм был өлкәне ныҡлы өйрәнмәүе арҡаһында бара һалмай.*



**Хәрби кейемдәге ир-егеттәр ҡайҙа ла шунда уҡ иғтибарҙы үҙенә йәлеп итә. Яраталар уларҙы, шулай бит? Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ һоҡланыулы ҡараш менән оҙатып ҡала. Уларҙың һындарын төп-төҙ тотоп атлап китеүҙәре, һәр саҡ бөхтә булған өҫ-баштарын өрөп-һыпырып ҡына тороуҙары, асыҡ, тура, ҡыйыу ҡарашлы булыуҙары барыһы ла эске тәртип, физик һәм рухи көс сағылышылыр. Тап бына шундай башҡорт егеттәре менән таныштырабыҙ бөгөн гәзит уҡыусыларыбыҙҙы. Сибай ҡалаһында тыуып үҫкән һәм хәрби юлды һайлаған Иҙел САФИН менән Ильяс ҠАҺАРМАНОВ улар.**

**Егеттәр, донъялар тыныслыҡ булған заманда нилектән һеҙ былай хәрби тормошто һайланығыҙ әле? Ҡайҙан килә ул беҙҙең егеттәрҙә хәүефле һөнәрҙәргә ынтылыш?**

**Иҙел Сафин:** Кешелек тарихында заманалар бер ваҡытта ла тыныс булмаған. Хәрбилек иһә башҡорттоң ҡанында. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ борон-борондан хәрби "клан" булған. Әле Рәсәй хакимлығына инмәҫтән күпкә алда уҡ улар үҙ ерҙәренең сиктәрен хәрби хеҙмәт режимында йөрөп һаҡлаған.

Мин үсмер саҡтан хәрби булырға хыялландым һәм, үҙемде шуға әҙерләп, Рәсәй ФСКН-ның Себер юридик институтына уҡырға индем. Быйыл, Алла бирһә, тамамлайым. Был уҡыу тәп йылдарынан спорт менән дуҫ булдым. Ҡала һәм республика кимәлендәге саңғы, еңел атлетика бәйгеләрендә ҡатнаштым һәм еңеүҙәр яуланым. Бәләкәйҙән атай-әсәйемдең иркә балаһы булманым, ғаиләлә лә беҙ өс малай, шунлыҡтан малайҙар мәктәбендә яҡшы әҙерлек алдым, тип әйтергә була.

**Икегеҙ ҙә Башҡортостандан ҡырҙа, берегеҙ Мәскәүҙә, икенсегеҙ Красноярск ҡалаһында. Нисек ҡабул иттеләр һеҙҙе хәрби уҡыу йортонда? Башҡорт егеттәре бармы унда? Шундай урында үҙеңде ҡуя белеү өсөн ниндәй һыҙаттар кәрәк? Ғөмүмән, хәрби мөхиткә инеп китеү осорогоҙҙо хәтерләп алайыҡ әле?**

саңғы һәм еңел атлетика буйынса академияның йыйылма командаһы составындамын. Уҡыуҙа ла уңыштарым бар. Командирҙарым һәм уҡыу йорто етәкселеге кемлегемде, ҡайҙан икәнемде һәм ниндәй милләт вәкиле икәнемде яҡшы белә.

Егеттәр араһында ир-егет холоҡло булыу ғына ярҙам итә. Армия байҡаларындағы кеүек, "крутой" булыу асылда юҡ хәбәр ул. Бында һинең бөтөн булмышың асыҡ. Һин көслө икән - ысынлап көслө, һин белемле икән - ысынлап белемле, һин мәҙәниәтле икән - ысынлап мәҙәниәтле. Былар барыһы ла күренеп тора, һине шулай итеп беләләр. Яһалмаланып, алдашып, йылғырланып йәшәп булмай хәрби тормошта. Бындағы тәртипкә һин йәки күнәһең,

Ә хәрби мөхиткә килгәндә, бөтә ерҙә лә кеше булып ҡала белергә кәрәктер. Башҡалар быны баһалай ул, бигерәк тә ир-егеттәр коллективында. Мине ғаиләлә баҫмай, ҡурҡытмай, оялтмай үҫтерә белгәндәр, атай-әсәйемә рәхмәт. Шунлыҡтан, мин ниндәй халыҡ араһында ла үҙемде ғәҙәти, ябай итеп тота, теләгәндә көлә, теләгәндә кәрәген һорай алдым. Быны һәр йәш кеше лә булдыра ала, мөмкин булмай торған хәлдәр юҡ ул, бөтә ерҙә лә аңлаусы, хәлеңә инеүсе, миһырбанлы кешеләр бар.

**Хәрби тормошто һайлау, минең аңлауымса, үҙе үк илһөйәрлек күренеше. Һеҙҙә ошо тойғоно тәрбиәләүҙә кемдәр ҡатнашлыҡ итте?**

**Иҙел Сафин:** Иң беренсе атай-әсәйем, әлбиттә. Улар минең икеһе лә сәнғәт кешеләре. Бәләкәй генә сағымдан Сибай филармонияһының сәхнә артында рухи телмәрҙәр, халыҡ йыр-моңдары тыңлап ултыра торғайным. Өйҙә лә улар бер

**Ни өсөн бөгөн хәрби уҡыу йорттарында башҡорт егеттәре аҙ? Һеҙ быны нисек баһалайһығыҙ?**

**Иҙел Сафин:** Бының сәбәбен мәктәптәрҙең күбеһендә ошо йүнәлештә махсус әҙерлек эштәре алып барылмауынан күрәм. Балалар был хаҡта белмәй яҡшылап. Һәм һуңғы осорҙа беҙҙең халыҡта, бигерәк тә атай-әсәйҙәрҙә, хәрби хеҙмәттән биҙрәп ҡалыу синдромы ла бар, шикелле. Йәнәһе, хеҙмәттә малайҙарға ауыр, уларҙы ҡыйырһыталар һәм башҡалар. Башҡорт малайҙарында шулай уҡ атай-әсәйҙән айырыла алмау, тыуған ерҙә төпләнеү төшөнсәләре лә көслө. Тик был төшөнсәләр сигендә генә йәшәп булмай. Бөгөн хәрби көс, хәрби армия илдә ҙур урынды биләй. Һәм шул урында беҙҙең милләттең аҙ булыуы зитҡа тейә.

**Ильяс Ҡаһарманов:** Башҡорт егеттәрен бәләкәйҙән төрлө яҡлап үҫтерергә кәрәк. Юғиһә, беҙҙә спортҡа ылыҡҡан бала спортҡа ҡаплана, мәҙәни юҫыҡтағылар йырлап-уйнап

# ВАТАНДЫ ҺАҠЛАУСЫ

## тик ҡоралға тотонорға яҙмаһын!



өйрәнәһең, ҡабул итәһең, йәки - юҡ.

**Иҙел Сафин:** Биш йыл уҡыу дәүерендә мин дә берҙән-бер генә башҡорт булдым үҙемдең уҡыу йортонда. Аҙағыраҡ бәләкәй курстарға Башҡортостандан икенсе милләт вәкилдәре килде, улар менән аралашып торабыҙ, мөмкин тиклем ярҙам итергә тырышам.

йортона әләгеү еңелдән булманы, әлбиттә. Башта Сибайҙа, унан Өфөлә тикшереү турҙарын үттек. Шул уҡ физик әҙерлек, сәләмәтлек, төрлө фәндәр буйынса белемебеҙ тикшерелде. Красноярск ҡалаһына беҙ Башҡортостандан ике генә кеше юлландыҡ - Сибайҙан мин һәм Стәрлетамаҡтан бер рус ҡыҙыҡайы. Унда армия сафында хеҙмәт үтеп өлгөргән йәки кадет мәктәптәрен тамамлаған әҙерлекле, көслө абитуриенттар йыйылғайны, күптәрҙең спорт мастерлығына йәки спорт мастерлығына кандидатлыҡ разрядтары бар ине. 85 төбәктән икешәр-өсөшәр кеше килгән. Миңә, ун ете йәшлек кенә егеткә, етди спортсылар менән бер рәттә тороу, әлбиттә, бик ауыр булды. Әммә шул ваҡыт музыкаль белемем булыуы ярҙам итте! Спорт менән бер рәттән, мин музыка мәктәбен дә тамамлағайным Сибайҙа. Баҡтиһәң, институтта курсанттарҙың төрлө яҡлы үҫеше алға ҡуйыла икән. Ябай итеп әйткәндә, көстә генә алға һөрмәйҙәр, ә интеллектуаль кимәлдәре юғары, аңлы, киң даирәле, мәҙәни һәм көслө рухлы ла булырға тейеш булаһаҡ офицерҙар.

**Ильяс Ҡаһарманов:** Мин дә Иҙел ағайҙың әйткәндәре менән килешәм, хәрбилек беҙҙең ҡанда. Хәрби булыу ир-егет өсөн заман талабы ғына түгел йәки, һуғыш булғанда ғына хәрбиҙәр кәрәк, тиғән дә һүҙ түгел. Хәрби булмағанда ла һәр ир-егеттә хәрби әҙерлек булырға тейеш. Ул теләһә ниндәй ваҡытта һәм хәлдә илен, халҡын, яҡындарын яҡлай алһын.

Мин Бөйөк Петр исемендәге стратегик тәғәйенләнештәге ракета ғәскәрҙәре хәрби академияһында белем алам. Шулай уҡ бала саҡтан хыялландым. Мәк-

*Мин әҙерәк тарихыбыҙҙы беләм. Шундай яҙмышлы халыҡтың улы булып та, уға тоғро ҡала алмаһам, минең ата-бабама оят буласаҡ. Илһөйәрлек тәрбиәләүҙә мин тамамлаған Сибай ҡалаһының Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге башҡорт лицейы ла ҙур роль уйнаны. Башҡорт рухы ҡайнап торған ул төбәк тә, мәктәп йәмғиәте лә был тәңгәлдә әүҙем эшләне. Һәм әлеге ваҡытта ошо илһөйәрлек тойғоһо булыуы мине көслө итә лә инде.*

**Ильяс Ҡаһарманов:** Мин уҡырға килгәс тә башҡорт егеттәрен эҙләп ҡараным, әммә тапманым. Бары өсөнсө курста уҡыған бер егет Башҡортостандан булып сыҡты, тик уныһы ла рус милләтенән ине. Минән "Һин кем ул?" тип һораған кешеләр күп булды. "Башҡорт" тиһәм, "Это кто? Где они живут?" тип тә ҡуялар. Егеттәр араһында егеттәрсә лә булып ҡуя ине баштараҡ, кемлегеңде йөҙроҡ менән иҫбатларға мәлдәр ҙә була. Шулай ҙа беҙҙең хәрби уҡыу йортонда тәртип көслө, һуғышыу, бер-береңде ҡыйырһытыу ҡәтғи тыйыла.

Ошо өс йыл эсендә мин "башҡорт" икәнемде физика-математика кеүек төүәл фәндәр һәм спорт аша таныттым. Бөгөн

Минән дә, Ильястан һораған шикелле, кем булыуым менән ҡыҙыҡһыналар ине. Индеецтар араһындағы Колумб кеүек, иптәштәремә тыуған яҡтарым, халҡым, тарихыбыҙ, йолаларыбыҙ хаҡында әкиәт һөйләгән кеүек итеп һөйләй торғайным. Уларға ысынлап ҡыҙыҡ! Хатта бер дәрес ваҡытында, уҡытыусы мине "Һин, моғайын, татарҙыр, фамилияң да татарса" тигәйне, курс егеттәре минән алда башҡорт икәнлегемде "дәлилләп һәм иҫбатлап" ташланы. Сөнки улар минең һөйләгәндәремдән һәм әсәйем ебәргән башҡорт күстәнәстәренән башҡорттар хаҡында мәғлүмәтләр ине. Миңә көләп ҡарап ултырырға ғына ҡалды.

ваҡытта ла "илебеҙ насар" тимәне. Киреһенсә, ҡайҙалыр тәбиғәткә сыҡҡанда ла, нимәләр аңлатҡанда ла әсәйем һәр ваҡыт: "Шул тиклем матур ерҙә йәшәйбеҙ", - тип әйтә торғайны. Икенсенән, мин әҙерәк тарихыбыҙҙы беләм. Шундай яҙмышлы халыҡтың улы булып та, уға тоғро ҡала алмаһам, минең ата-бабама оят буласаҡ. Илһөйәрлек тәрбиәләүҙә мин тамамлаған Сибай ҡалаһының Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге башҡорт лицейы ла ҙур роль уйнаны. Башҡорт рухы ҡайнап торған ул төбәк тә, мәктәп йәмғиәте лә был тәңгәлдә әүҙем эшләне. Һәм әлеге ваҡытта ошо илһөйәрлек тойғоһо булыуы мине көслө итә лә инде.

**Ильяс Ҡаһарманов:** Илемде яратыу ул миңә шул уҡ атайыңды, әсәйеңде яратыу кеүек. Мин хатта "яратаммы-яратмайыммы" тип уйлай ҙа алмайым. Был тойғо минең менән ҡуша тыуған. Һәм үҙемдәге милләтселек хистәрен дә мин хилафлыҡ итеп түгел, ә ғорурлыҡ итеп ҡабул итәм. Ҡайҙа, кемдәр менән һөйләшкән йәки эш иткән ваҡытта ла милләтем, илем, телемә ҡағылған мәсьәләләрҙең минең өсөн мөһим икәнен йәшермәйем. Был шулай булырға тейеш тә. Һин атай-әсәйеңде ниндәй хәлдә лә яҡлашаһың, ҡурсалайһың бит. Рухи ҡиммәттәренә лә шундай мөнәсәбәттә булырға бурыслыһың. Атай-әсәйем уҡытыусылар булып, ғүмерҙәрен балаларға белем биреүгә бағышланы. Улар илһөйәрлек тойғоларын бер беҙгә - үҙ балаларына ғына түгел, әллә нисә быуын йәштәренә лә һалыуына иманым камил.

ҡына йөрөүгә яраҡлаша. Спортсылар "сила есть ума не надо" кимәлендә ҡалһа, тегеләре үҙ-үҙҙәрен дә яҡлай алмай булып сыға. Хәрби булыу - ул математиканы ла, физиканы ла, химияны ла, географияны ла өйрәнеү, төрлө телдәрҙә аралаша алыу, тиҙ һәм етеҙ уйлай, хәрәкәт итә, хәл итә белеү, төрлө психологик алымдарға ҡаршы тора һәм уларҙы файҙалана алыу, холоҡта ҡыйыулыҡ, намыҫлылыҡ тойғоларын үҫтереү һәм физик тәрбиә. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең егеттәр араһында шахматсылар, йырсы-бейеүселәр, музыканттар, спортсылар һәм хатта шағир-яҙыусылар ҙа бар. Хәрби тормошто сикләнгән, тар йүнәлештәге генә йәшәйеш итеп ҡарарға ярамай, киреһенсә, бында егеттәргә төрлө яҡлы һәләттәрен асыу мөмкинлектәре етерлек. Күптәр ошонда шәхес булараҡ күтәрелеп, формалашып ҡала.

Минең белеүемсә, башҡорт егеттәренең күбеһе хәрби уҡыу йорттарына ана шул бер яҡлы ғына үҫешеүе һәм был өлкәне ныҡлы өйрәнмәүе арҡаһында бара һалмай. Ә бит ысынында беҙҙең егеттәр күптәрҙе ҡарағанда түҙемлерәк тә, көслөрәк тә, сәмлерәк тә.

**Уҡыуҙы тамамлағас, һеҙ кем булып сығасаҡһығыҙ? Бөгөн хәрбиҙәргә ниндәй хөкүмәт ярҙамдары бар? Хеҙмәт юлын ҡайҙа дауам итергә иҫәпләйһегеҙ?**

**Иҙел Сафин:** Беҙҙең институтты тамамлаусылар илдә наркотиктарҙың законһыҙ әйләнешен сикләү һәм профилактикалау өлкәһендә хоҡуҡ һаҡлау белгестәре булып сыға. Артабан

улар Рәсәйҙең төрлө хоҡуҡ һаҡлау структураларында хеҙмәтен дауам итә ала. Һуңғы ваҡытта илебеҙҙә хәрбиҙәргә ярҙам итергә тырышалар - фатир-торлаҡ, эш хаҡы түләү һәм башҡа социаль мәсьәләләр әүҙем генә ҡарала. Погонлы костюм кейгән кеше хеҙмәт юлын хөкүмәт ҡайҙа ҡуша - шунда дауам итә инде. Унығы әле билдәһеҙ...

**Ильяс Ҡаһарманов:** Минең хеҙмәтем бөгөнгө замандың иң дәшһәтле стратегик тәғәйенләнештәге ҡорал менән бәйле. Беҙҙең эшләйәсәк урындар һанаулы ғына, әммә мин республикабыҙҙан алыҫҡа ебәрмәүҙәренә өмөт итәм. Киләсәгебеҙ ҙә насар ҡаралмаған, мәҫәлән, яҡшы ғына эш хаҡы, торлаҡ менән тәьмин ителеү, иртә пенсияға сығыу, хеҙмәт барышында дәүләт ҡарамағында булыу һәм башҡалар. Былар барыһы ла кешегә йәшәү һәм хеҙмәт итеү өсөн яҡшы булышлыҡ, тип уйлайым.

**Билдәле бер фильмда героиня: "Генерал ҡатыны булыу өсөн лейтенантҡа кейәүгә сыяраткан ҡыҙыңдың ғаиләһен, әсәһен күрергә кәрәк, башҡа төрлө ҡараштар хата аҙымға килтерәсәк, тип уйлайым мин. Кино героиняһының һүҙҙәренә килгәндә, хәрби ҡатыны булыу ысынлап та еңелдән түгелдер. Шулай ҙа был мәртәбәләр, тип уйлайым.**

**Ир-егеттән азаматлыҡ китһә, нисек буласаҡ, тигән һорауҙы бирһәм, был һүҙҙәрҙән ни мәғәнә аңларһығыҙ һәм нисек итеп яуап бирерһегеҙ, егеттәр?**

**Ильяс Ҡаһарманов:** Азаматлыҡ - ул барлыҡҡа килгән һәм яһап ала торған сифат түгелдер. Ул ҡатын-ҡыҙ түгел, аҡса түгел, уны ҡайҙандыр алып йә юғалтып булмай. Ир-егетлек сифаты тыумыштан бирелә һәм бала саҡта уҡ формалаша. Ир-егеттән азаматлыҡ китһә, көс ҡатын-ҡыҙға төшәсәк. Һәм был бөгөн ниндәйҙер кимәлдә йәшәйешебеҙҙә күҙәтелә лә. Эскелек, наркоманлыҡ, эшһеҙлек, ялҡаулыҡ, моңһоҙлоҡ булған ерҙә азаматлыҡ була алмай.

**Иҙел Сафин:** "Армия - тормош мәктәбе" тигән электән килгән төшөнсә әле лә актуаль тип уйлайым, шуға егеттәргә армия сафында хеҙмәт итеү мотлаҡ. Был, беренсенән, үҙ-үҙеңде һынап ҡарарға ярҙам итһә, икенсенән, кемгәлер "социаль лифт" булған, мөмкинлектәрен киңәйткән ысул булыуы ихтимал. Хәҙер бит, белеүемсә, армия сафында хеҙмәт итмәгәндәр дәүләт органдарында эшләү хоҡуғынан мәхрүм...

Минең олатайҙарым һуғыш юлы үткән, хәрби булған туғандарым да бар. Шунлыҡтан, мин үҫкән ерлектә, ғаиләлә, туғандар араһында "хеҙмәт итеү-итмәү" тигән һорау тыумай ҙа.

**Ильяс Ҡаһарманов:** Егеттәрҙең армия сафында хеҙмәт итеүе мотлаҡ, тип уйлайым. Улар бит ниндәйҙер "ир-егет дәресе" үтергә тейеш. Иң ябайҙарын ғына алғанда, ҡоралдың нимә икәнен күреп, уның менән эш итергә өйрәнеп, хәрби тормош менән танышып. Мәҫәлән, минең Бөрйән районының төпкөл ауылында йәшәгән олатайым Германияла хеҙмәт иткән. Ул

# БУЛАЙЫҠ...



**ғырға ла, уның менән егерме йыллап гарнизондар буйлап күсенеп йөрөргә кәрәк", - тип әйтә. Һеҙҙең менән шул юлды үтергә теләгән ҡыҙҙар бармы? Ғөмүмән, хәрби ҡатыны булырға теләгән ҡыҙ ниндәй ғәҙәттәргә эйә булырға тейеш?**

**Иҙел Сафин:** Мәктәп йылдарынан дуҫлашҡан ҡыҙым менән үткән йәй өйләнештек. Алина Санкт-Петербург ҡалаһында урынлашҡан технология университетын тамамлап, инженер-химик һөнәрен үҙләштерҙе. Әлеге көндә минең уҡып бөткәндә көтә, "Башкиравтодор" йәмғиәтенең Баймаҡ филиалында эшләй. Мин "ҡатыным шулай булырға тейеш" тип әйтә алмайым. Мин уны нисек бар, шулай ҡабул итәм һәм яратам да.

**Ильяс Ҡаһарманов:** Мин өйләнмәгәнмен. Ҡыҙҙарға килгәндә, хәрбиме, башҡа һөнәр эйәһеме, һәр ир-егет үҙенә тура килгән ҡатын теләйҙер. Ҡатын кеше, уның ҡылыҡтары ирҙең, уның ғаиләһенең көҙгөһө бит. Ҡыҙҙар менән аралашҡанда уҡ үҙенә: "Мин был ҡыҙҙың минең балаларымдың әсәһе булыуын теләйемме?" - тигән һорауҙы бирергә кәрәк. Һәм ысынлап

> ***Азаматлыҡ - ул барлыҡҡа килгән һәм яһап ала торған сифат түгелдер. Ул ҡатын-ҡыҙ түгел, аҡса түгел, уны ҡайҙандыр алып йә юғалтып булмай. Ир-егетлек сифаты тыумыштан бирелә һәм бала саҡта уҡ формалаша. Ир-егеттән азаматлыҡ китһә, көс ҡатын-ҡыҙға төшәсәк. Һәм был бөгөн ниндәйҙер кимәлдә йәшәйешебеҙҙә күҙәтелә лә. Эскелек, наркоманлыҡ, эшһеҙлек, ялҡаулыҡ, моңһоҙлоҡ булған ерҙә азаматлыҡ була алмай.***

**Иҙел Сафин:** Эйе, ир-егеттәр сифаттарын малайҙарға бәләкәйҙән уҡ ғаиләлә тәрбиәләйҙәр. Атай-әсәйҙәрҙең үҙ-ара ихтирам менән аралашыуын, ҡатын затына хөрмәт күрһәтеүен, атай кеше талапсан булыуын, ғаиләһен ҡайғыртыуын балалар күреп үҫергә тейеш. Улар бит оторға ғына тора! Шуға күрә уларға тик дөрөҫ өлгөләр күрһәтергә кәрәк. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәмғиәтебеҙҙә тулы булмаған ғаиләләр һаны, атайҙар менән әсәйҙәр бергә йәшәмәү күренештәре күбәйҙе... Быны бөтөрөр кәрәк, әлбиттә.

**Нисек уйлайһығыҙ, егеттәрҙең армия сафында хеҙмәт итеүе мотлаҡмы? Әллә һеҙҙең кеүек хәрби юлды һайлаусыларҙың булыуы ла еткәнме?**

шул хеҙмәтендә "донъя күргән" һәм ошолар хаҡында һөйләй торғайны. Был уның үҙ ғүмерендәге берҙән-бер һәм иң оло сәйәхәте булған. Ә хеҙмәткә бармаһа, ул ундай донъяның барлығын да белмәҫ ине. Бындай тарих һәр хеҙмәт иткән ир-егеттә бар. Ә инде тыуған илде профессиональ кимәлдә һаҡлау - профессионалдарҙың, йәғни беҙҙең бурыс.

**Ватанды һаҡлаусылар көнө һеҙҙең төп байрам. Был көндә нисек үткәрәсәкһегеҙ һәм байрам уңайынан ниндәй теләктәрегеҙ булыр?**

**Ильяс Ҡаһарманов:** Был беҙҙең өсөн ғәҙәти хеҙмәт көнө. Байрамға арналған төшкө аш буласаҡ, әлбиттә, әммә бер ниндәй ҙә ташламалар ҡаралмай - беҙ хеҙмәттә. Байрам теләгем - ир-егеттәргә сәләмәтлек һәм рухи ныҡлыҡ!

**Иҙел Сафин:** Ватаныбыҙға именлек теләйем! Ир-егеттәр Ватанды һаҡлаусы булһын, ә яҡлаусы булып ҡоралға тотонорға яҙмаһын.

Байрам менән, егеттәр! Беҙ һеҙҙең менән ғорурланабыҙ!

**Иҙел Сафин:** Тыуған илгә хеҙмәт итәм!

**Ильяс Ҡаһарманов:** Тыуған илгә хеҙмәт итәм!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Легендар "Офицерҙар" фильмында бер шундай күңелгә тейер, күҙҙән йәштәр һығып сығартыр һүҙҙәр бар. Унда герой: "Тыуған илде һаҡлау тигән һөнәр бар!" - ти. Һәм беҙҙең бөгөнгө һөйләшкән егеттәребеҙ ҙә тап ошо һөнәр эйәләре - тыуған илде һаҡлаусылар!**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәләште.**

## АРҘАҠЛЫЛАР

# БАТЫРҘАН ЭҘ ҠАЛА



**Советтар Союзы Геройы, генерал-майор Таһир Кусимовтың тыуыуына 110 йыл тулыу айҡанлы Өфөлә йәшәүсе яҡташтары матур сара ойоштороҙо. Байрамға район вәкилдәре лә килде. Шулай уҡ Күсем ауылындағы музей хеҙмәткәрҙәре экспонаттарҙан күргәҙмә ойоштороҙо, Ташбулат ауыл советы халҡы әҙерләп алып килгән милли аш-һыуҙар, йыр-бейеүҙәр ҙә уға үҙенсәлекле йәм өҫтәне.**

Генерал Кусимов - Салауатҡа тиң символик фигураға әйләнгән халыҡ геройы ул. Уны күреп белгәндәр ҙә, фотоларҙы, һуғыштан һуң төшөрөлгән документаль фильмдарҙы ҡарап ғына таныусылар ҙа иң тәүҙә батырҙың ябай халыҡ менән аралашҡандағы ихласлығын, кешелеклелеген телгә ала. Ул ысын мәғәнәһендә үҙ халҡының улы була. 1928 йылдың сентябрендә ямышын Ҡыҙыл Армия менән бәйләп, 46 йыл хеҙмәт итеп, курсанттан генерал-майор дәрәжәһенә тиклем күтәрелә. Бөйөк Ватан һуғышына 1942 йылдың апрелендә данлы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының 58-се гвардия кавалерия полкы командиры дәрәжәһендә эләгә. Һуғыш барышында подполковник Кусимовтың часы 19 торама пунктты азат итә, Десна, Снов, Сосница, Днепр йылғаларын һуғышып аша сыға. Таһир Кусимов етәкселек иткән полк хәрби әҙерлеге, ойошҡанлығы һәм дисциплинаһы менән айырылып тора. Шуға ла хәл иткес һуғыштарҙа был полк алғы һыҙыҡта була. Был да Кусимовтың шәхесе тураһында күпте һөйләй. Шайморатов һәләк булғандан һуң Башҡорт дивизияһы командиры итеп тәғәйенләнгән Белов "Путь мужества и славы" тигән китабында батырыбыҙ тураһында шулай тип яҙа: "Кусимовта тәүәккәллек тә, бер үк ваҡытта абайлыҡ та берләшкән. Үҙенең һалдаттарына үҙе өлгө булып торҙо, шуға ла уға буйһона инеләр, кәрәк саҡта ихтыяр көсө һәм командир абруйын да ҡуллана ине. Ул етәкселек иткән 58-се полкты алғы отряд итеп тәғәйенләп яңылышманым".

Кусимов 1943 йылда Днепрҙы аша кискәндә айырыуса батырлыҡ күрһәтә. Курск дуғаһында тар-мар ителгән дошман Днепрҙың уң ярында алдан әҙерләнгән һаҡланыу линияһына йәшеренеү өсөн ҡаса. Кусимовтың полкы уларға ғәскәрен Днепрҙы аша сығарырға һәм нығынырға ирек бирмәҫкә тейеш була. Таһир Тайып улының һөйләүе буйынса, 27 сентябрҙә кисеү башлана. Әммә фашистар уларҙың көткәндәрен аңлап ҡалып, ут аса. "Йылға снарядтар ярылыуҙан ҡайнай башланы. Тап ошо мәхшәр мәлендә "Сибай" йырының көйө ҡолағыма салынды. Йырсы, әйтерһең дә, был сал Днепр ярында башҡорт киңлектәре, ғаиләләребеҙ, балалар һәм ейәндәребеҙҙең киләсәге өсөн көрәшеүебеҙ хаҡында иҫебеҙгә төшөрөргә теләй ине. Ә Тыуған ил тойғоһо һәм уның яҙмышы өсөн яуаплылыҡты аңлау яугирҙы еңелмәҫ итә". Ошо уңышлы яу өсөн Кусимов 3-сө дәрәжәләге Суворов орденына, ә 1944 йылдың 15 ғинуарында Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була.

1944 йылдың яҙында кавалерия командиры маршал Буденный тәҡдиме менән Кусимов Фрунзе исемендәге Хәрби академияға уҡырға китә. 1951 йылда 15 йәшендә генә ҡулына тәүге тапҡыр әлифба алған ябай ауыл малайы икенсе тапҡыр юғары уҡыу йортон - Ворошилов исемендәге СССР-ҙың Хәрби Көстәре Генераль штабының Юғары Хәрби Академияһын алтын миҙалға тамамлай. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа төрлө урындарҙа хеҙмәттә була. 1963-1969 йылдарҙа республиканың Хәрби комиссары булып эшләй. Ошонан хаҡлы ялға сыға. Партия һәм йәмәғәт эшендә әүҙем ҡатнаша, РСФСР-ҙың Юғары Советы, Төркмән АССР-ы, Башҡорт АССР-ы депутаты була. 1986 йылдың майында вафат була. Беҙҙең хәтерҙәрҙә ул һаман да баһадир булып, кавалерия атакаларын оҫта ойоштороусы ябай халыҡтан сыҡҡан ҡаһарман батыр булып ҡала.

Өфөләге Еңеү паркында генерал Кусимовтың бюсы ҡуйылған, баш ҡала урамдарының береһе уның исемен йөрөтә. Әбйәлил районы Асҡар ауылындағы мәктәп-гимназияға уның исеме бирелгән. Геройҙың тыуған ауылы Күсемдә Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Ғүмәр Ғилманов ойошторған музей йәштәрҙә хәрби-патриотик рухта тәрбиәләү үҙәге булып тора. Әбйәлил районының һәр ауылында Таһир Кусимовтың исемен йөрөткән урам бар. Батырҙарҙан бына шундай яҡты эҙ ҡала.

**✓ Юҡ, улай тип әйтһә, ул халыҡты ҡайғырта булып сыға лаһа. Ә былай ул Законға хеҙмәт итә. Башы ла иҫән, ултырған ултырғысы ла ныҡ. (Ярты йылдан һуң ул министрҙы законһыҙ йорт төҙәткән өсөн барыбер алып ташланылар).**



Сабыйҙарса ихласлығы, саф күңеле менән яҡын, таныһыҡ ине был ауыл малайы күпте күргән табипҡа.

- Ҡайтҡас, эсмәйһеңме? Атың менән вәғәҙә итһәң, сығарам.

Шамил күҙҙәрен сырт-сырт йомоп алды ла тыйнаҡ ҡына йылмайҙы.

- Эсеүен, эсмәҫмен дә, тик...
- Нимә тик?
- Яңылыш эсеп ҡуйһам.
- Ул саҡта тағы бында алып киләбеҙ ҙә бәйләп ҡуябыҙ, атыңды һуябыҙ. Вәғәҙә - иман, - тип көлдө иҫәр табип.
- Юҡ, ул саҡта ат менән вәғәҙәләмәй торам. Эсмәйем мин, эсмәйем, ышанығыҙ. Иптәш доктор?

Килгәненә ун алты көн тигәндә, дауахана баҡсаһындағы ҡыу ағастан әтмәләп алған таяҡҡа таянып, "Ат уйнатып алдан бара, Шайморатов генерал " тип йырлап килеп сыҡты Шамил ашатып-эсереп, дауалап кеше иткән "төрмәнән". Ихлас оҙаттылар үҙен. Хатта бер йәш туташ күҙен дә ҡыҫып маташты. Ә дауалаусы табип юллыҡ аҡса ла бирҙе. Һәйбәт кешеләр күп ул донъяла, тип уйланы бер ҡатлы Ташлыйылға егете. Кешеләрҙән һорашып, үҙ районы яғына киткән оло юлға сыҡты ул.

* * *

Башҡа һыймаҫ был хәбәр - туҙға яҙмаҫ бер ҡарағас тарихы ауылға йәшен тиҙлегендәй таралды. Фәнилдән бер ҡарағас өсөн бер машиналыҡ аҡса талап итәләр. Кемдәр? - әллә ҡайҙан килгән ят бауырҙар. Урманды тартып алдылар ҙа хәҙер үҙебеҙҙе талайҙар. Әсәһе, Сәлимә апай, кибеттән ҡайтып етмәҫ борон уҡ был хәбәрҙе ишетте, башҡалар кеүек бик ышанманы ла, ҡайтҡас, ире менән улы дөрөҫләгәс, йөрәген тотоп бөтөнләй ятты. "Атайымдың рухынан көләләр бит былар. Кеше өсөн ата-әсәһен мәңгегә оҙатыуҙан да ҙур ҡайғы бармы икән? Шул ваҡытта хәлгә инер мәлдә былар ҡан ҡоҫторалар. Быны нисек аңларға? Түрәләрҙе әрләгән, илен, районын, ауылын яратмаған кешеләргә элек аптырай торғайны үҙе. Ошолай нәфрәт уяналыр инде. Түрәгә лә, иленә лә... Уйлаһаң, һәр кем үҙ эше менән булған кеүек. "Ҡыҙыл китап"-ҡа ингәс, ярамағандыр ҙа. Тик нишләп әле иҫтәренә төшкән һуң, мотлаҡ нишләп Сәлимәләргә, уның атаһына төшкән һуң ул быңдай яза? Аҡсаһын да табып түләрһең, ә атай тураһындағы изге иҫтәлек иң тәүҙә хәҙер ошо хәл менән хәтергә алынасаҡ бит. Йөрәкте, хәтерҙе тетрәтер изге хәтирәләр, әйтерһең, булмаған. Ниндәйҙер законды яҙғанда ла кешесә мөнәсәбәт һаҡланырға, милли биҙәктәр, дини үҙенсәлектәр, урындағы йола серҙәре иҫәпкә алынырға тейештер ҙәһә..."

Фәрит ағай өндәшмәҫкә әйләнде. "Былай күктән яҙҙам көтөп ултырып та булмай инде, - тип уйланды. - Ҡарарҙары ысынлап та (һаман да ышанып етмәйҙәр ине) дөрөҫ булһа, төпсөгөбөҙҙән бөтөнләй яҙабыҙ бит. Төрмә унан бандит яһаясаҡ. Былай ҙа эшһеҙлектән, эскелектән кешелектән сығып бара. Тик намыҫы таҙа уның. Хилаф эшкә барыр һис ҡоторого юҡ та, төрмә боҙасаҡ. Бейәне һатырға тура килә. Бар эште атҡарып, йыл да тигәндәй ҡолон табып, күпмелер булһа ла аҡса эшләү сығанағы, тип тороп булмай... Биш-алты меңлек пенсия менән генә берәй нәмә ҡыйратырмын тимә. Баш булһа, табылыр әле. Ауыл кешеләренән яҙҙам һорамайынса булмаҫ та. Тик яртыһынан күбеһенең хәле беҙҙең кеүек. Кем үҙе етмәгәнде бүлешә алыр икән".

Фәнил иһә был хәлде тәүҙә еңел ҡабул итте. Яңылышҡандарҙыр, ҡурҡытырға уйлайҙарҙыр, барыһы ла үҙ яйына ҡайтыр әле, тип өмөтләнде. Иртәгәһенә Нурислам килеп тағы ла иҫкәртҡәс, әллә ысынлап шул тиклем штраф һалмаҡсыһығыҙмы, тип тағы аптыраны. Өсөнсө көнөнә төштән һуң башланғыс мәктәптәге телефонға прокуратуранан Лаврентьев тигәндәре, законһыҙ рәүештә ҡырҡҡан ағас өсөн ҡаралған сумманы ваҡытында түләмәһәгеҙ, эшегеҙҙе судҡа ебәрәбеҙ, тип тә иҫкәртҡәс, Фәнил эштең ысынлап та рәсми төҫ алыуын аңланы. "Мин уны түләй алмаясаҡмын", - тип яуапланы эшһеҙ егет. "Улайһа закон буйынса ныҡлы эш итәбеҙ" - телефондың теге осонда яуап ҡәтғи яңғыраны. Быларҙан ҡотолоп булмаҫын төшөндө Фәнил. Ул тиклем аҡса табып булмаҫын да яҡшы белә ине ул. Шуға нишләргә белмәне, ҡулға алыуҙарын көттө. Атай-әсәйҙе бөлдөрөп, штраф түләп йөрөп булмай инде. Ултырыр ҙа ҡайтыр.




Мәктәптән бойоғоп, уйланып ҡайтып килгәнендә, үҙҙәренең ҡапҡа төбөндә Мостафа ҡарт осраны. Эскәмйәгә ултырҙылар.

- Бер йомош менән килдем әле, Фәнил улым. Теге олатайыңдың ҡул таяғы иҫәнме әле? - тип һүҙ башланы өлкән кеше. "Тапҡан ваҡыт, таяҡ ҡайғыһымы һуң", - тип уйланы Фәнил. Асыуы килде. Тик һиҙҙермәне.
- Тора һарайҙа.
- Шуны музейға алайым, тип килгәйнем, - һаҡал-мыйығын һыйпап ҡуйҙы ҡарт.
- Ябай, тинең дә һуң үҙең, - өлкән кешегә "һин"ләп һалдырҙы кәйефһеҙ егет.
- Эйе, ябайлыҡҡа ябай, күтәргән йөгө ябай түгел.
- Нимә, олатайҙы әйтәһеңме ни?
- Ситдиҡ ағай дан ине, уны күтәргән ат та, таяҡ та затлы булыр. Уйлаһаң, хәҙер үҙебеҙҙең урман ағасынан эшләнгән һәр таяҡ ҡомартҡы кеүек күренә инде. Сығар, һатып алам.

Фәнил инеп китте. Һарайҙа ҡул таяҡтың ялтыр тотҡаһын тотоп оҙаҡ ҡына тынып торҙо. Таяҡтың башҡа урындарын да усы менән тотколап алды. Тик барыбер ҙә тотҡаһы, ысынлап та, йылы ине. "Олатайҙың ҡул йылыһы һаман һаҡлана икән, - тип уйланы егет. - Эх, олатай, ошо йылың бөгөн булһа икән дә. Үҙең дә, йылың да етмәй миңә. Тирәйүңгә лә".

Ҡул таяғын Мостафа ҡартҡа тотторғас, уныһы гәзиткә төрөлгән ыҡсым ғына конверт һуҙҙы.

- Аҡсаң кәрәкмәй, бушҡа бирәбеҙ, - Фәнил алмай эскәмйәгә барып ултырҙы. Мостафа ҡарт иплəп кенә уның яурынына яҫы усын һалды:
- Эш таяҡта ғына түгел, изге рухта ла...

Конверттың бик ҡалын булыуын күргәс, Фәнил, ҡаушап, уны төшөрөп ебәрҙе.

- Юҡ, кәрәкмәй.

Аҡһаҡал эйелеп конвертты алды ла Фәнилдең эргәһенә, эскәмйәгә, ҡуйҙы.

- Ал, Фәнил улым, бөләм хәлегеҙҙе. Бына булған тиклемен әбейең менән йыйып алып килдем. Киләсәктә мөмкинлегең булһа, ҡайтарырһың, юҡ икән... Ә Ситдиҡ ағайҙы йығылыуҙан һаҡлаған таяҡ, ҡәберендә һаҡлаған ҡарағас кеүек, ҡиммәт тора ул. Борсолма, ал. Намыҫыңа көс төшмәҫ. Тик эсеп ҡуйма.
- Мортаза ҡарт, таяҡты ҡултыҡ аҫтына арҡыры ҡыҫтырып, яйлап ҡына амин тотто ла ҡайтыу яғына атлап китте. Бер аҙ барғас артына боролдо ла баяғы таяҡҡа таянып Фәнилгә оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Шунан башын әйеп уйланып ултырған Фәнил ишетһен өсөнмө, ҡаты итеп тамағын ҡырып ҡуйҙы ла:
- Нишләйһең, быуынығыҙ менән тормош бәйгеһендә янған тай хәлендә ҡалдығыҙ шул. Тын алып, көс йыйғас, елер саҡтарығыҙ булыр әле, - тине. Таяҡты яңынан ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып китеп барҙы.

Фәнил ни эшләргә белмәне. Шунан һаҡ ҡына конвертты асты, ҡағыҙ аҡсаларҙы яйлап ҡына һананы: ете мең һум. Бер пенсия, тимәк. Илағыһы килде егеттең. Нишләптер ҡарашын күккә төбәне. Апасыҡ зәңгәр күктә ҡотолоу юлдарын эҙләнеме? Исмаһам, бер болот әҫәре булһасы. Шуның берәйһенә булһа ла йәбешеп китер ине ул. Әллә аҫылынырға ла үлергәме? "Булманы был тормош! Булды бары Ниндәйҙер бер тормош йораты..." барыбер. Эш юҡ, ата-әсә елкәһендәге сей яра. Хәҙер килеп бәхетһеҙ, бәрәкәтһеҙ бер зат. "Хәйерһеҙ" тип юҡҡа йөрөтмәйҙәрҙер. Минең арҡала күпме кеше ҡыйынлыҡ кисереп, зарға батып йөрөй. Мин юҡ, проблема ла юҡ. Ярай, үлдем дә тей, алып барып ерләрҙәр, ә ҡәбергә ниндәй бура ҡуйырҙар? Ҡарағас ярамай. Таҡта кәртә ҡуйһалар, бар ғәм алдында оят таһа. Йолала булмағанды. Юҡ. Юҡ, үлергә ярамай.

Тәбиғилекте закон ҡамсыһы менән ярып та, мәғәнәһеҙ йөк һалып та үҙгәртеп булмайҙыр. Барыбер Ер күсәрен түрәләр ҙә, прокурорҙар ҙа түгел, ошо Мостафа бабай кеүек ябай тәбиғәт балалары әйләндерә. Шуны аңларға тейеш тәһә мин. Үлергә, имеш. Штрафынан ҡотолһаммы, эсеүҙе бөтөнләй ташлайым. Эш табам, бурыстарҙы ҡайтарам. Ауыл халҡына эш табасаҡмын. Рафа, Шома менән булдырмайбыҙмы ни беҙ уны? Иртәгә Шома эргәһенә барып килгәндә, ә? Өфөгә барырлыҡ аҡсаны ҡайҙан табаһың тағы. Аҡса бер муҡса ла, тик... Нурислам, ҡаҫып китмә, тине. Ней беребеҙҙә лә телефон юҡ..."

* * *

Сәлимә апай, былай көтөп ятһаҡ, ысынлап та, йөктө күтәреп булмаясаҡ таһа, тип мәктәпкә килде. Уҡытыусылар менән бергәләп район хакимиәте башлығы исеменә был эшкә асыҡлыҡ индереүҙәрен һәм ярҙам итеүҙәрен һорап хат яҙҙылар. Ябай ғына башланған хат аҙағында рәсми төҫ алды. Ҡарағай тарихы менән бергә урман араһында ятҡан ауылдың бөтөнләй йәшәү рәүеше юҡҡа сыға барыуы хаҡында яр һалыу ине ул. Алтмыштан ашыу кеше уға имзаһын ҡуйҙы.

Ә "Башҡортостан" гәзитенә хатты әсәй кеше, күңелендә нимә булғанын тәфсирләп, хаҡлыҡ эҙләп үҙе ҡағыҙ битенә теҙҙе. Был һағышты бауырына баҫыр әмәле булмағанға тотондо ул ҡәләмгә. "Атайҙың етеһен уҡытҡандан һуң, тикшереүҙәр башланды. Үҙебеҙҙән участковый өйгә килеп инде. Аптырап киттек. "Аралбаев ошонда йәшәйме? Ҡарағасты һеҙ ҡырҡтығыҙмы? Ҡайҙан, ҡасан?" - ти. Фәнил улыма көн бөттө: һорау алыуҙар, тикшереүҙәр, ҡурҡытыуҙар башланды. Элек-электән урлашып көн күргән булһа, яуап бирә белер ине, - тип тәүҙә эштең айышына төшөндөрҙө. - Бер төп ағас өсөн 60 мең һум штраф түләргә ҡуштылар, бысҡыһын тартып алдылар. Ныҡыша торғас, урамдағы бер атыбыҙҙы "штрафты түләгәнгә тиклем" тип Поляковкаға алып китеп бикләп ҡуйҙылар.

Был донъяның тигеҙһеҙлегенә аптырарһың. Ауыл халҡы менән район етәксегенә хат яҙҙыҡ. Файҙа сыҡманы. Дөрөҫлөктә эҙләүсе юҡ. Атайымдан алда ла донъя ҡуйғандар булды, әммә уларҙың туғандарын һорау алып йөҙәтмәнеләр бит. Ә 80 йәшлек бабайҙың ҡәберенә тиклем тикшерҙеләр. Әйтегеҙ әле, кешеләр, атайымдың балаларының рәнйеше кемгә кәрәк булды икән? Үлер көнөндә белеп, ҡарағасты алдан үҫтереп, уны ҡырҡыу өсөн рөхсәт билетын хәстәрләп ҡуйып булмай. Ябай халыҡҡа ярҙам итмәгәс, нигә беҙгә депутаттар, хужалар? " Шунан оҙон итеп атаһы, уның хеҙмәт ҡаҙаныштары хаҡында теҙҙе. Хат яҙғанда күҙҙәренән йәше туҡтамай аҡты. Бөртөк-бөртөк йәш аҡ ҡағыҙ битен сылатып бөттө. Эш юғарыла, үҙәктә ултырғандарға барып терәлгәс, был хаттың да бер файҙаһы булмаясағын белһә лә, яҙҙы, шулай эсен бушатты ҡатын.

Шуныһы ҡыҙыҡ, хат тиҙ арала баҫылып та сыҡты. Аҫтында Урман хужалығы министрлығының аңлатмаһы ла бирелгәйне. Ысынлап та, Аралбаев рөхсәтһеҙ ҡарағасты ҡырҡҡан икән, закон буйынса яуап бирергә тейеш, тигән министр. Һәм үҙен аҡлар өсөнмө, әллә ошолай ғына хәлегеҙгә инә алам, типме: " Башҡортостандың ҡайһы бер районларында, ислам ҡануниарына тоғролоҡ һаҡлап, ҡәбер өҫтөнә бура ултыртыла. Йоланы һаҡлау һөҙөмтәһендә кешеләр ауыр һәм унайһыҙ хәлдә ҡалмаһын өсөн республикабыҙҙа тейешле закон ҡабул ителеүе зарур. Был проблема беҙҙе күптән борсой. Уны ыңғай хәл итеү өсөн үҙебеҙҙең тәҡдим менән депутаттарға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Миненсә, мәрхүмдәрҙең ҡәбере өҫтөнә бура ҡуйыу өсөн йыл әйләнәһенә кешеләргә күпмеләр күләмдә ағас бүленергә һәм был тәҡдим закон менән нығытылырға тейеш", - тип тә өҫтәгән. Эйе, дөрөҫ тә. Тик шул "тейеш", "кәрәк"тән ары китә алмайбыҙ шул. Министрҙан, башҡорт йолаһы шуны ҡушҡас, тейешле закон ҡабул иткәнсе, бер юлға ярлыҡап торогоҙ, тигән яуап көткәйнеңме, Сәлимә. Юҡ, улай тип әйтһә, ул халыҡты ҡайғырта булып сыға лаһа. Ә былай ул Законға хеҙмәт итә. Башы ла иҫән, ултырған ултырғысы ла ныҡ. (Ярты йылдан һуң ул министрҙы Өфө уртаһында законһыҙ йорт төҙәткән өсөн барыбер алып ташланылар. Өйө ҡарағастан булғандыр әле, моғайын).

Министрҙың яуабы урындағы урман хужалығы етәкселәрен оторо сәмләндереп ебәрҙе. Фәнилде һорау алырға тип район үҙәгенә, уныһы Ташлыйылғанан алтмыштан ашыу саҡрым алыҫлыҡта ята, алып та киттеләр. Йөҙ йорттан торған Ташлыйылға бөтөнләй шаңҡып ҡалды. Әгәр ҙә кәрәкле сумманы килтермәһәләр, иркенән дә мәхрүм итеп ҡуйыҙары бар икән.

**(Дауамы бар).**

ИР-АҘАМАТ



**"СССР тарҡалыр алдынан хәрби хеҙмәткә алдылар. Төньяҡ Хәрби-диңгеҙ флотына эләктем. Ярты йыл эсендә донъялар үҙгәрә башланы, шул дәүерҙә армия ла, унда хеҙмәт иткән һалдаттар ҙа бер кемгә лә кәрәкмәй һымаҡ ине. 1992 йылда ғәрәсәт булып, утрауға һуҙылған электр энергияһы бағаналары йығылып бөттө. Беҙ казармаларҙа 23 көн буйы һыуыкта йәшәнек. Шул ваҡытта ныҡлы һыуыҡ эләктерҙем. 1993 йылда сирҙең тәүге билдәләре күренә башланы, йылап-йылап өйөнәктәр ҡуҙғалды. Йылдар буйы йыйылып килеп, ошондай хәлгә ҡалдырып ҡуйҙы", - тип тауышына һис бер зар сығармайынса, яҙмышына яҙғанды сабыр ғына күтәреп һөйләй Морат Йәнбирҙин.**

# БӨРКӨТТӘР ОЯ ТАШЛАМАЙ

Ә мин уны иҫем китеп тыңлайым. Иҫ китерлек тә шул, сөнки һап-һау, өрләктәй егеттәр, ауылдарҙа эш юҡ, тип яйлап ҡына тормош төбөнә тәгәрәгән мәлдә, ҡасандыр тыуған иленә хәрби бурысын үтәргә барып, ватанының ил һаҡсыларына битарафлыҡһыҙ хеҙмәтәһендә бөгөн ике көнгә бер гемодиализ үтеп торған ир-уҙаманының, мин сирле, тип һуҙылып төшөп ятмайынса, киреһенсә, эргәһенә әүҙем ир-егеттәрҙе туплап, йәмғиәтебеҙ өсөн файҙалы эштәр башҡарып йөрөүе үҙе бер батырлыҡ бит! Ә барыһына ла былтыр Баймаҡ районының Темәс ауылындағы ваҡиғалар сәбәпсе була. "Эйе, былтыр сентябрҙәге ваҡиғалар тормошомдо үҙгәртеп ебәрҙе, ниндәйҙер көстө уятты, артабан былайтып йәшәргә тейеш түгелбеҙ, ни өсөн был хәл тап минең Башҡортостанымда килеп сыҡты, тип уйландым. Борон милләт алдында торған проблемаларҙы, ил-йорт мәсьәләһен йыйындарҙа хәл иткәндәр, беҙ, Әбйәлил районы ир-егеттәре лә, халыҡты битарафлыҡтан уятырға тейешбеҙ, тигән ҡарарға килеп, бер ҡорға тупланырға булдыҡ..."

Әммә барыһы ла еңел генә килеп сыҡмай: һәр ауыл советына ваҡытлыса яуаплылар билдәләп, ойошманы ойоштороу йыйынын үткәрергә булғас, ҡаршылыҡтар килеп тыуа: алдан һөйләшелгән булһа ла, район үҙәгендәге "Уңыш" стадионына уларҙы индермәйҙәр. Ләкин был егеттәргә, киреһенсә, рух, сәм генә өҫтәй - улар аптырап ҡалмай, һабантуй майҙанына сығып китә. Шунда инде Морат Йәнбирҙинды ир-егеттәрҙең район буйынса хәрәкәтенә яуаплы итеп һайлап ҡуялар. Йәйләп йыйындар ауыл советтарында үткәрелә, ойошма туплана, уға әүҙем, рухлы, эшҡыуар егеттәр килә башлай. "Тап шул мәлдә район хакимиәте башлығы алышынды, интернеттан уға үҙебеҙҙең эш тураһында аңлатып яҙҙым. Ул ҡабул итеүгә яҙылып, килергә ҡушты. Һәр кешенә 15 минут ҡабул итһәләр, беҙҙең 20 егеттән торған делегация менән ике сәғәт ярым бөтә булған мәсьәләләрҙе ултарға һалып һөйләшеп ултырҙыҡ. Шөкөр, район хакимиәте башлығы менән уртаҡ тел таптыҡ. Хәҙер клуб ишектәре асыҡ, йыйындарҙы үткәрергә мөмкин, үткәрегеҙ, тип кенә торалар", - ти әңгәмәсем.

Егеттәр эште эскелеккә ҡаршы көрәштән башлай, сөнки булған барлыҡ проблемаларҙың башында ошо ағыу торғанын яҡшы аңлайҙар. Йыйын ваҡытында аңлатыу эштәре алып баралар. Шулай ҙа кәрәк ваҡытта йәшерен генә алкоголле эсемлектәр һатып ятыусылар өҫтөнән бөркөт кеүек осорға ла күп һорамайҙар. Хатта халыҡ араһында "Бөркөттәр оса" тигән лаҡап та таралған. Хәҙер социаль селтәрҙәрҙә "SOS! Ҡайҙан араҡы табырға була?" тигән яҙыуҙар ҙа күренгеләй башлаған, сөнки халыҡты ағыулаусы, аңын томалаусы эсемлектәр менән сауҙа иткән нөктәләр кәмей, һатыусылар асыҡтан-асыҡ эш итергә тартына. Әлбиттә, эскелекте ҡыҫҡа ваҡытта ғына туҡтатып булмай, әммә киләсәктә егеттәр бөгөнгөләй дәррәү булып, халыҡтың киләсәге хаҡына ошондай көрәш юлдарында йөрөргә һәм ыңғай һөҙөмтәгә өлгәшергә әҙерҙәр.

"Хәҙер инде яйлап икенсе темаға - кесе эшҡыуарлыҡты үҫтереү мәсьәләһен күтәрҙек. Беҙҙең халыҡ буш ятырға, эшһеҙлектән баш эйергә тейеш түгел - уларҙы нисек эшле итергә, эш юлдарын күрһәтергә ниәтләнек. Ойошманың үҙенең юрисы бар, булған һорауҙарҙы уға йүнәлтәбеҙ. Ул аңлатып һөйләй. Әлеге көндә күп кенә йәштәр үҙ эштәрен асты һәм грантҡа ғариза бирергә йөрөй", - әңгәмәсемдең тауышында ғорурлыҡ саҡҡылары ла сағылып ҡала. Шулай булмай ни, үҙҙәренең әүҙемлеге менән улар күпме йәш кешегә терәк булған, рух өҫтәгән, илһамландырған. Заманында үҙе йәшәгән Көнсығыш ҡасабаһына газ үткәрткән, ауыл советында староста булып та эшләгән кеше бит әле ул. Халыҡ менән эшләү, аңлатыу алып барыу, уларҙың проблемалары хәл итеү уның булмышына ята. "Үҙемдә утҡа алып барып тығам да, шунда янам, - тип көлә Морат. - Инициативаларым менән ауыл советы башлығын ҡаңғыртып бөтәм".

Ҡасандыр үҙе лә эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә Морат, бура бурай, баш ҡалаһы "Золотая усадьба" тигән фирма менән бергә эшләй, Өфөлә, баҡсаларҙа әллә күпме өй күтәрә. Урманды ситкә биргәс, ағас алыуы ауырлаша, хаҡы күтәрелә, шуға ул ағас эшен ҡалдырып, такси хеҙмәте асып, үҙенең компанияһын ойоштороп ебәрә. Әммә сәләмәтлеге буйынса проблемалар килеп сыҡҡас, был эшен дә ҡалдыра. Былтыр ул умартасылыҡҡа тотона: "Был минең 10 йыл күңелемдә йөрөткән хыялым ине", - ти Морат.

"Ни өсөн халыҡ, бигерәк тә йәштәр һеҙгә ылыға?" - тип һорайым Мораттан. "Халыҡтың властарға бик үк ышанысы юҡ. Етәкселәр матур итеп отчет бирәләр, матур итеп һөйләйҙәр, әммә халыҡ тураһында бик уйламайҙар. Мәҫәлән, һайлауҙар. Шул уҡ ауыл советына, район советына, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға, Рәсәй Дәүләт Думаһына һайлауҙар үтә. Депутаттарҙы һәр кимәлгә йүгереп йөрөп үткәрәбеҙ. Әммә һайлау үткәс, улар халыҡты онота, отчет яһамайҙар, һорау-үтенестәрҙе властарға еткермәйҙәр. Халыҡ үҙаллы, депутатар үҙаллы тик йөрөйҙәр. Бәлки, шуға халыҡ беҙҙә ниндәйҙер яңы, үҙен яҡлаусы көс күрәләр. Аҡсабыҙ юҡ, бары тик рухыбыҙ ғына бар, әммә, шуны эшләргә кәрәк ине, быны эшләргә кәрәк ине, тип социаль селтәрҙәр аша яҙалар, шылтыратып әйтәләр. Халыҡ рухлы, дөрөҫ ғәмәлдәр башҡарған кеше артынан эйәрергә, уны яҡларға, хупларға әҙер, тик уның мәнфәғәте ситтә ҡалмаһын. Халыҡ - беҙгә, беҙ халыҡҡа таяныс бөгөнгө көндә", - ти ул, ныҡлы ышаныс менән.

Ышаныс тигәндән, Яңы йыл алдынан Магнитогорск ҡалаһында булған фажиғәне ишетеү менән егеттәрҙең бер төркөмө унда ярҙамға ашыға, икенсеһе интернет селтәре аша халыҡҡа мөрәжәғәт итеп, баҙар буйлап йөрөп, йылы кейемдәр, продукция йыйып, киске сәғәт 4-кә йөҙ мең һумдан ашыу тауар тейәп юлға сыға. "Баҙарҙа эшләгән апайҙар 3-4-әр меңлек өр-яңы кейемдәрҙе төрөп кенә тоттороп ебәрҙеләр. Был да халыҡтың беҙгә ышаныһын күрһәтә бит. Шуға беҙ ҙә уларға яҡыныраҡ булырға тырышабыҙ".

Башҡаларҙан айырмалы, Әбйәлил егеттәренең Морат Йәнбирҙин етәкләгән "Бөркөт" ойошмаһы үҙҙәренең уставын әҙерләй. Әйткәндәй, карапты нисек атайһың, уның яҙмышы шулай була, тиҙәр. Ә бөркөттәр бер ваҡытта ла оя ташламай, бәхет эҙләп ситкә китмәй, үҙенең тыуған урынына ерегеп йәшәй һәм ил-йортон хәүеф-хәтәрҙән ҡурсалап, бейектән күҙәтеп, күкте иңләп, арымай-талмай оса ла оса...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

## Йәшәү мәғәнәһе

Фәрхетдин ағай ғүмере буйы байлыҡ йыйҙы, ҡулындағын ҡыҫып тотто, кейем-һалым да, өйгә йыһаз да ала һалып барманы, тиндәрен усына һалып иҫәпләп, арзанлы аҙыҡ-түлек менән туҡланды. Үҙенең ҡыҫмырлығын, һаранлығын аҡларға телəптер, гел һөйләнә торғайны: "Бына етерлек итеп бол йыйып алайым әле, шунан әҙәмсә йәшәй башланыр..."

Яныраҡ уны урамда тап иттем, ҡартайған, бирешкән, өҫтөндә һаман да әүәлге кейеме. Күрешеп хәл-әхүәл белешеп тора биргәс, ул өмөтһеҙ ҡул һелтәне: "Мин гел иртәгәгә ҡалдырып көн иттем, бөгөн килеп шуны белдем, ғүмер тигәнең үтә лә китә икән ул, хәҙер йыйғанымдың кәрәге лә, хәжәте лә ҡалманы. Бәхтиһен, йәшәү мәғәнәһе - бөгөнгө көн, әлеге ваҡыттың күҙ асып йомған мәле икән!.."

## Холоҡ

Дауаханала эшләп йөрөгәндә тулы кәүҙәле, төҫкә-башҡа күрмәлекһеҙ, йәмһеҙ бер ҡатынды белдем. Ҡатын-ҡыҙҙы йәмһеҙҙән һалдырып түбәнһетергә, кәмһетергә ярамай, һәр хәлдә, ул урта һылыу самаһында ине шикелле. Бәлки, ҡайтышыраҡ та булғандыр, кем белә, хәлбүки уны әйләнгән һайын күрге, көн һайын тап итке килеп тормай ине. Ә бына кәүҙәһен тулы тип кенә әйтеү аҙҙыр, ауырлығы центнер тирәһе тартҡандыр, унан артығыраҡ булмаһа. Күлдәкте лә, эш халатын да махсус заказ менән, киндер тоҡтай мул итеп тектерер кейҙе. Ғүмер баҡый ҡиәфәтенән тартынып йәшәне, башҡалар араһында ситен, кәм ҡыланды. Шулай ҙа кемдең ҡулында - шунын ауыҙында, тиҙәр бит, билгән вазифаһынан файҙаланып, медицина картаһының кәрәкле тапҡырына ауырлығын 79 килограмм 950 грамм тип яҙып ҡуя торғайны. Башҡалар быға шикләнеп ҡараһалар ҙа шул, ынтылған, хыялланған һанына ышанып, инанып йәшәне.

Эшкә килгәнемдә коллегам үтә лә шәп кәйефтә ине. Һирәк күренешкә аптырап-ҡырап ҡалһам да комплимент әйтергә ашыҡтым:

- Һеҙ бөгөн май ҡояшылай балҡыйһығыҙ!

- Көндәге фигелем! - Теге мәленән алда асылырға ашыҡманы. Ә үҙе күнелле көй көйләп, ауыр кәүҙәһен еңел ҡыймылдатып, унынһын-быныһын эшләп маташҡан була. Теле ҡысытыр, сыҙаманы барыбер, тышҡа бәрҙән, урғыған шатлығының сәбәбен аңлатты:

- Уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһе яҡынлаша бит. Медосмотр үткәрҙек, күрше ауылдарҙан да килгәндәр. Араларында бер ҡатын бар ине, үлсәгәйнем, ауырлығы - центнерҙан ашыу. Ужас! - Буй-һынына күҙ ташлауымды шәйләп ҡалып, аҡлангандай итеп өҫтәне. - Минән ике килограмм ярымға ауырыраҡ, представляете - ике килограмм ярымға!

- Бәлки, кәмерәктер, беҙҙәге һеҙ ҡулланған үлсәгес яңылыш күрһәтә торған ҡайны саҡ?

- Ну, почти... Икенән дә кәм түгел һәр хәлдә! - Ҡауырыйҙарын таҙартҡан тутыйғоштай, дәү халатының итәктәрен тартыштырып, төмөз таныуын ыуҙы, йөҡа сәстәрен һыпырҙы. - И я бы сказала, внешний вид так себе, тегенең янында Снегурочкаға тиң икәнмен!

Сәйер, үтә лә сәйер ҡатын-ҡыҙҙың холҡо! Етешһеҙлектәрен, кәмселектәрен ҡаплар, йәшерер өсөн янында йәмһеҙ, йыуан, күрмәлекһеҙ икенсе берәүҙең йөрөп ятыуы төп шарт, шул саҡта ғына ул үҙен башҡаларҙан сибәрерәк, нәзәкәтлерәк һәм камилыраҡ итеп тоя!

## Муйын

Малсы Зәйни ағай әрпешерәк, шаптырыраҡ фигелле, кейгән кейеменә лә, бит-йөҙөнә лә иғтибар итеп барған кеше түгел. Ҡайны саҡ уға иҫкәрмә яһайым:

- Тиргә кереп шыбаҡшып күренә, көн һайын иртәнсәк муйыныңды йыуһаңсы, абзый!

- Бәй, нинә уны кәрәккән-кәрәкмәгәндә ышҡып йоҡартырға, эш күлдәген кейгәнмен дә баһа, ҡунаҡҡа саҡыра ҡалһалар, таҙа күлдәк кейәм бит, шунда йыуылыр әле! - тип яуаплай теге.

Баҡтиһән, ошо бер ҡатлы яуапта тәрән кинәйә ятҡан. Хәҙер ҙә күлдәкте билгән вазифаға ҡарап кейәләр, муйынды ла шул урынға ярашлы итеп тоталар һәм боралар. Бәгзе берәүҙәр халыҡ араһында кейгәнен юғарыға үрләһә, алыштыра һала, һүҙе лә үҙе лә үҙгәрә.

Эш тураһында һүҙ сыҡһа: "Муйын булһа ҡамыт табылыр!" - ти торғайнылар, әүәле. Хәҙер уны икенсе төрләрәк итеп, муйын булһа, уға ярашлы күлдәк табылыр, тип тәҙәтергә мөмкин. Унан инде кейгән кейеменә ҡарап, муйынды йыуырғамы әллә юҡмы икәнлекте хәл итергә ҡала...

*✓ Киҙеү менән ауырығандан һуң килеп тыуған күңелһеҙ хәлдәрҙең күбеһенә дөрөҫ дауаланмау "ғәйепле". Күптәр үҙ белдеге менән антибиотиктар эсә башлай. Киҙеү - вируслы ауырыу, антибиотик уны дауаламай.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КИҘЕҮГӘ ЕҢЕЛ ҠАРАМА

■ Ҡағыҙ менән ҡулығыҙҙы ҡырҡҡанығыҙ барҙыр, моғайын. Бындай яра ныҡ ауырта һәм оҙаҡ йүнәлә. Калифорния университеты дерматологтары быны ң сәбәбен белә. Бармаҡтар, ирен кеүек тойоу һәләтенә эйә урындарҙа айырыуса һиҙгер нервы остары туплаған. Фән уларҙы ноцицепторҙар тип атай. Тап улар тире йәрәхәтләнеүе тураһында мейегә сигнал ебәрә. Шуға ла ҡырҡылған ҡул үҙәккә үтеп һыҙлай ҙа инде. Етмәһә, бындай йәрәғәт ауыр йүнәлә. Беренсенән, ҡулдар менән әүҙем ҡулланабыҙ. Икенсенән, ҡағыҙ тигеҙ булмаған яра ҡалдыра. Ә ундайҙар, билдәле булыуынса, төҙәлә һалып китмәй. Ҡағыҙ ағастан һәм төрлө сүстәрҙән әҙерләнә, улар ҙа яраға эләгеүе ихтимал. Дерматологтар билдәләүенсә, яра тәрән булһа, ҡанды туҡтатыусы тромбтар, ә һуңынан өҫтөнән һаҡлаусы ҡатлам барлыҡҡа килә. Ҡағыҙ менән киҫкәндә яра нервы рецепторҙарына тейә, әммә ҡан ойошоу механизмын эшләтеп ебәреү өсөн тейешле кимәлдә тәрән түгел. Шуға ла тирегә уны күҙәнәктәр менән алыштырыу өсөн оҙайлы ваҡыт кәрәк.

■ Иртәнге аш туҡлыҡлы булырға тейеш, тигән булабыҙ. Йәнәһе, иртән яҡшылап туйынабыҙ ҙа, көн дауамында аҙыраҡ ашайбыҙ. Иртән ашамаһаң, һимерәһең, тейеүселәр ҙә бар. Яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, иртәнге аш ашарға күнеккәндәр ябыҡмай, ә ашамағандарға һимереү янамай. Ғалимдар иҫәпләүенсә, иртәнге аш һәр кемдә үҙенсә. Кемдер ныҡ майлы ашай, кемдер диетик продуктар ҡуллана. Тап ниндәй ризыҡ һайлауың һинең буй-һынына тәьҫир итә лә инде. Һуңғы 28 йыл дауамында үткәрелгән 13 тикшеренеү һөҙөмтәһендә шул асыҡланған: иртәнге ашты ашаусыларҙың дөйөм калориялары иҫәбе күберәк булған. Ә ашамаусылар тәүгеләргә ҡарағанда, 0,44 килограмға еңелерәк булып сыҡҡан. Барыһы ла матдәләр алышыныуына бәйле, ти белгестәр. Шуға ла туҡланыу буйынса аныҡ күрһәтмәләр биреүе ауыр.

■ Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы билдәләүенсә, киҙеү менән ауырығандан һуң килеп тыуған күңелһеҙ хәлдәрҙең күбеһенә дөрөҫ дауаланмау "ғәйепле". Күптәр үҙ белдеге менән антибиотиктар эсә башлай. Киҙеү - вируслы ауырыу, антибиотик уны дауаламай. Унан һуң, ул иммунитеттың нигеҙе - файҙалы микрофлораны юҡҡа сығара. Икенсенән, киҙеү йоҡторғандар табипҡа мөрәжәғәт итмәй. Бары белгес кенә дөрөҫ диагноз ҡуя һәм дауалай ала. Киҙеүҙең билдәләре бөтөнләй башҡа дауалау талап иткән күп кенә башҡа сирҙәргә оҡшаш. Киҙеү мәлендә иһә махсус вирусҡа ҡаршы саралар тәғәйенләйҙәр. Уларҙы ауырыу башланған осорҙа ҡабул итә башлайҙар. Киҙеү менән организм үҙе көрәшһен, тип уйлау ҙа хата. Киҙеү менән көрәш организмдың хәлен ала, был иһә башҡа инфекцияларҙың үҫешенә килтереүе ихтимал. Ауырығанда эшкә йөрөү, йәмәғәт урындарына сығыу тыйыла. Башҡаларға ла сир йоҡтораһығыҙ, үҙегеҙ яңы инфекциялар эләктереп ҡайтасаҡһығыҙ.

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# ИҢ БАЙ

**Бер ауылда йәшәгән ике күрше бик татыу булған. Тормоштоң ҡәҙерен белгән улар: яҙ көндәрендә баҡсалары йәшелләккә күмелгән, көҙөн мул уңыш йыйғандар. Тамаҡтары туҡ, өҫ-баштары бөтөн, күңелдәре көр булған. Ике ғаиләлә лә малайҙары донъяға килгән. Улдары үҫеп, ир ҡорона ултырғас, ике ғаилә байрам өҫтәле артында, үҙ-ара һөйләшеп, донъя көтөүҙе балаларына тапшырырға килешкән.**



- Ҡасан нимә сәсерҙе, әйҙә, егеттәр үҙҙәре хәл итһен. Ә беҙ, хөрмәтле күршем, уларҙың ихтыярына һис тә ҡаршы килмәйек, йәме? - тигән күршеләрҙең береһе.

- Ризамын, - тигән икенсеһе, - теләктәре булһа, өйҙәрҙе лә үҙҙәренсә йыһазлаһындар, өҫ-баштарын да үҙаллы бөтәйтһендәр, мал-тыуарҙы ла ихтыяждарына ҡарап ишәйтһендәр.

- Улдарыбыҙ үҙаллы йәшәһен, лайыҡлы кәләште лә үҙҙәре һайлаһын. Тик бер-беребеҙҙе туйға саҡырырға онотмайыҡ.

Ике дуҫ, ике күрше бер-береһенең ҡулын ҡыҫҡан. Бисәләре лә ирҙәренең килешеүен хуплаған һәм күршеләр үҫеп еткән балаларының теләге буйынса йәшәй башлаған. Әммә ошо көндән башлап күршеләрҙең йәшәйеше ҡырҡа үҙгәргән.

Бер ғаиләләге егет йүнселерәк булып сыҡҡан, шуға күрә ауылдаштары уны Беренсе тип йөрөткән. Икенсе ғаиләләгеН уйсан булғаны, яй ҡуҙғалғаны өсөн Икенсе тип атағандар. Беренсе егет оҙаҡ уйлап тормаған, атаһы үҫтергән урмандағы ағастарҙы ҡырҡып, баҙарға сығарып һатҡан. Хужалыҡтағы ат та баҙар ҡорбанына әйләнгән. Ҡулына төшкән аҡсаға ул еңел автомобиль һәм трактор һатып алған. Йүнсел егет баҙарҙа һарымһаҡтың ҡиммәт булыуын иҫәпкә алып, баҡсалағы бөтөн майҙанды һөрөп, һарымһаҡ сәскән. Килешеү буйынса ата-әсәһе балаһына ярҙамлашҡан. Йыйылған уңыштан ғаилә, ысынлап та, ҙур килем алған. Ҡулаҡсаны оҫта ҡулланып, төҙөүселәр яллап, былар заманса материалдан заманса өй төҙөткәндәр. Эшҡыуар егет нисек итеп килемде тағы ла арттырыу тураһында көнө-төнө баш ватҡан. Икенсе яҙға ул күп итеп һуған сәскән. Был уңыштан да һәйбәт килем алғас, еңел автомобилен яңыртҡан һәм замансарағын һатып алған.

Бер көн баҫыу юлында ике күрше егет осрашҡан. Быларҙың береһе еңел автомобилдә, икенсеһе йүгерек бейә егелгән еңел арбала икән. Йүнсел эшҡыуар машинаһынан төшмәй генә күршеһенә һүҙ ҡушҡан:

- Миңә ҡара, күрәһеңме, текә автомобилдә генә йөрөйөм, ә һин һаман Нух заманындағы арбанан төшмәйһең. Мин ике ҡатлы коттедж төҙөнөм, һин ата йортонда көн күрәһең. Беҙҙең атайҙар бик татыу йәшәй. Теләһәң, күрше хаҡына, һине лә заманса йәшәргә өйрәтермен, киләһе йыл яҙға нимә сәсергә кәңәш тә бирә алам, - тигән ул.

- Ниәтең өсөн рәхмәт, тик мин үҙемсә йәшәп өйрәнгәнмен. Ирекле фекерләү ҡәҙерлерәк миңә, - тип яуап биргән арбала ултырғаны. Артабан һөйләшеү ошо юҫыҡта дауам иткән:

- Һуң, мин бит һинең ирекле фекерләүеңә ҡағылмайым, ихлас күңелдән ярҙам итмәксемен.

- Ихласлығың өсөн рәхмәт, күрше. Тик ирекле фекерләүгә матди әйберҙәр ҡамасаулай шул. Мәҫәлән, һинең автомобилең...

- Ул нисек итеп фекерләүгә ҡамасаулаһын? Һине мин һә тигәнсе уҙып китәм, ҡалаға барып еткәнеңсә, мин үҙ йомоштарымды йомошлап, ҡайтып та етәм. Техникам ғына имен булһын да, яғыулыҡ булһын.

- Әлбиттә, машинаға атты уҙып китеү бер ни тормай. Әммә һин бит үҙең руль артында ултырғанда иғтибарыңды, фекерләүеңде тик машинаға йүнәлтәһең: рычагтарҙы күсерәһең, педалдәргә баҫаһың, датчиктарҙы күҙәтеп бараһың. Минең ат яй барһа ла, һәүетемсә генә үҙенсә бара, уйланырға ҡамасауламай, хатта мин йоҡлап киткән хәлдә лә өйгә алып ҡайтасаҡ. Һин, яғыулыҡ кәрәк, тиһең, минең ат үҙ ризығын үҙе таба. Әйткәндәй, әле ҡайҙа ҡабаланып китеп бараһың?

- Запас частәр алырға кәрәк. Автомобилгә нимә кәрәген мин алдан уҡ белеп торам.

- Тимәк, техниканы бик яҡшы өйрәнгәнһең?

- Әлбиттә. Өс йыл буйы махсус уҡыным да баһа. Иҫләйһеңдер, уҡырға барырға һине лә өгөтләгәйнем.

- Өс йыл буйы фекер ҡеүәһен техника өйрәнеүгә бағышлағанһың, тимәк. Онтала торған, иҫкерә торған техникаға бағышлағанһың.

АТАЙЫМ

# ШУНДАЙ ЛӘЗЗӘТ МЕНӘН...

## яңылыҡтар тыңлай ине

**Көн дә "Бәйләнештә" селтәренә инеп, телевизор ҡарап, гәзит уҡып, яңылыҡтарҙы барламайынса, көнөм тулы түгел һымаҡ минең.**

"Яңылыҡтар" тигәс, атайымды иҫләп, һағынып та, көлөп тә ҡуям. Ауылдарҙа телевизор тигән мөғжизә күренә башлағас, һәр кемдең дә уны алырлыҡ мөмкинлеге булманы әле. Күрше генә өйҙә мәктәп директоры булып эшләгән олатайымдың (атайымдың бер туған ағайы) өйөнә ауылдағы иң тәүге телевизор килеп ултырҙы. Илдәге яңылыҡтарҙы белеү теләге шул тиклем көслө булған атайым тапшырыуҙар программаһындағы "Яңылыҡтар" тигән урындарҙы ҡыҙыл ҡәләм менән һыҙып ҡуйыр ине. Үҙе тышта эш менән мәшғүл булып йөрөһә лә, тапшырыу ваҡыты яҡынлай башлаһа, "Ҡыҙым, нисә минут ҡалды?" тиеп, әйләнгән һайын һорай торған ине. Унан инде, ваҡыт етеү менән, еңел йүгереп, олатайҙарҙың өйөнә ыңғайлар ине. Кесе ҡыҙы булып, унан бер тотам да ҡалмай, иркәләп эйәреп йөрөгән мин дә уның артынан йүгерәм инде. Ун биш минутлыҡ "Бөгөн донъяла" тапшырыуын, ярты сәғәтлек "Ваҡыт" һәм "Яңылыҡтар" тапшырыуын тыңлап, шулай атай эргәһенә һыйынып, бер тауыш та сығармай ғына ултырыр инем. Тапшырыу бөткәс, атайҙың сыңарсай бармағына йәбешеп, мөһим эш эшләгән кешеләй ҡайтырға сыға инем. Мин бит инде ҙур эш эшләнем: тапшырыу ваҡытын атайға һуңламай ғына хәбәр иттем! Ә инде уйынға әүрәп, ана шул ваҡытты иҫкәртмәй, онотоп ебәрһәм... атайҙан арыу ғына эләгә торғайны. "Нимә булған икән инде, бер тапҡыр яңылыҡ тыңламағандан?" тиеп, эстән генә үпкәләп йөрөй торғайным. Хәҙер генә, үҙемә лә олоғара төҫ ингәс, аңлайым уны: ысын-ысындан илһөйәр кешегә илдәге хәлдәр һулар һауа кеүек кәрәк булған инде. Үҙенә күрә камиллашыу ысулы ла, үҙ-үҙен үҫтереү сараһы ла булған инде ул тапшырыуҙар. Үҙебеҙҙең өйҙә телевизор барлыҡҡа килгәс, атайымдың ниндәй ләззәт менән яңылыҡтар тыңлауын

# КЕЙӘҮ КЕМ?

- Һуң, һинең атың да бит ҡартая, ваҡыты еткәс, үлә.

- Әлбиттә, ҡартая. Әммә бит уның ҡолоно ҡала. Тере йәндәр кешегә мәңге хеҙмәт итә, йәнһеҙ әйберҙәр, киреһенсә, кеше ғүмерен ҡыҫҡарта ғына.

- Ауыл халҡы һине бушҡа ғына сәйер кеше тип атамай икән. Мине йүнсел булғаным, бай булғаным өсөн хөрмәт итәләр, ә һин атайың тапҡанды файҙаланып йәшәүҙән башҡаға эшкинмәйһең. Һин бит атайың йортонда бер ниндәй үҙгәреш тә яһаманың: баҡсағыҙ, мал-тыуарығыҙ ҙа шул килеш ҡалды.

- Минә баҡсаның шул килеш ҡалыуы оҡшай. Шул килеш яратҡанға үҙгәртмәйем.

- Ысынлап та, сәйерһең һин, күрше, - тип көрһөнгән автомобилдәге егет, - тимәк, булғанға ҡыуанып йәшәп тик ятаһың инде, улай булғас. Ирекле фекерләйһең, йәнәһе?

- Әлбиттә.

- Ә ирекле фекерләүеңдән һиңә ни фәтеүә? Нимәгә кәрәк ул фекер ирeклеге?

- Йәшәйештең асылына төшөнөү, бәхетле булыу өсөн кәрәк. Асылын юғалтҡандарға ярҙам итеү өсөн кәрәк. Мәҫәлән, һиңә.

- Миңә? Әйтһәң, әйтеп ҡуяһың да инде! Ярҙамыңа мин һис тә мохтаж түгелмен. Беләһеңме, ауылдағы иң шәп ҡыҙ миңә кейәүгә сығасаҡ. Уларҙың барыһы ла минең менән тормош көтөргә атлығып тора. Һәр ҡыҙҙың бай булғыһы килә: иркен өйҙә йәшәүҙән, текә машинала елдереүҙән әле береһенең дә баш тартҡаны юҡ.

- Бай булыу ғына бәхетле булыуҙы аңлатмай бит әле.

- Ә ярлы булыу?

- Етешмәй йәшәү ҙә яҡшы түгел.

- Бай ҙа, ярлы ла булмағас, ниндәй булырға һуң һиненсә?

- Мул тормоштан әле бер кем дә туймаған. Шөкөр итә белергә кәрәк. Үҙ аҡылың менән йәшәп кенә бәхетле булып була.

Эшҡыуар үҙ юлында булыуҙы артығыраҡ күреп, ҡул һелтәп, ары елдергән.

Ошо һөйләшеүҙән һуң бер йыл үтеүгә, күрше йәшәгән ике ғаилә ағзалары бергә йыйылған. Уларына кәләш әйттерергә ваҡыт етте, тип кәңәш ҡорған улар. Буласаҡ килендәренең кемлеген һорашҡас, эшҡыуар егет беренсе булып һүҙ башлаған:

- Атай, мин ауыл старостаһының ҡыҙын оҡшатам, уны ҡатынлыҡҡа алырға уйлайым, - тигән ул.

- Күреп торам, улым, һин - шәп егет. Ысынлап та, старостаның ҡыҙы яҡын тирәлә иң сибәрҙәрҙең береһе. Уны күргән һәр кем матурлығына һоҡлана. Әммә уны бигерәк үҙ һүҙле, тиҙәр. Сибәр генә түгел, бик аҡыллы ла икән, хатта ата-әсәһе лә ҡыҙҙарын аңлап етмәй, тиҙәр. Аңлайышһыҙ бер бәндә тиер инең, ауыл ҡатындары кәңәш һорап уға йөрөй, балалары ауырып китһә, уға алып баралар.

- Үҙ һүҙле булыу насармы ни? Мин дә төшөп ҡалғандарҙан түгел: бына тигән өй төҙөнөм, яҡын тирәлә минең автомобиль иң текәһе. Иң мөһиме, осрашҡан ваҡытта ул миңә бик сәйер һәм уйсан итеп ҡарай.

- Улым, ә һин кемде оҡшатаһың? - тип һорай икенсе атай.

- Миңә лә ауыл старостаһының ҡыҙы оҡшай, - тип яуаплай улы.

- Ә ул үҙе һиңә ҡарата ниндәй мөнәсәбәттә?

- Белмәйем. Мин уның менән һөйләшкәнем юҡ. Осрашҡан саҡта ул ҡарашын ситкә ала.

Ике күрше бер үк көндә кәләш әйттерергә килешә. Килгәндәр, әҙәпле генә ултырышҡандар, ниәттәрен әйткәндәр. Староста ҡыҙын саҡырып алған да:

- Бына, ҡыҙым, беҙгә яусылар килгән. Бер юлы ике егет һинең ризалығыңды һорай. Беҙ шулай килештек: үҙең һайла, ҡыҙым. Ҡарарыңды бөгөн әйтәһеңме, әллә иртәгәгә тиклем көтәйекме?

- Атай, мин хыялланып, әллә күпме таңдар аттырҙым, - тигән йәш ҡыҙ, - яуабымды хәҙер үк әйтә алам.

- Әйт, улай булғас. Беҙ түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ.

Ҡыҙ һүҙен ашыҡмай ғына башлаған.

- Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт, хөрмәтле ауылдаштар. Үҙ ғүмерҙәрен минең яҙмыш менән бәйләргә теләгән улдарығыҙға ла рәхмәтлемен. Бик тәүфиҡлы улдар тәрбиәләгәнһегеҙ. Икеһенең береһен һайлау енелдән булмаҫ һымаҡ. Әммә минең әсәй булғым килә һәм буласаҡ балаларымдың бәхетле булыуын теләйем. Улар етеш йәшәһен, тип хыялланам, балаларым һөйөүгә ҡойоноп үҫһен, ирекле булһындар. Шуға мин бай егетте һайлайым.

Эшҡыуар егеттең атаһы ғорур ҡиәфәттә урынынан торған. Икенсе егеттең атаһы башын аҫҡа эйеп, өнһөҙ ҡалған. Ҡыҙ уның эргәһенә килеп:

- Мин һеҙҙең улығыҙға кейәүгә сығам, - тигән.

Ҡаушап ҡалған староста ла урынынан торған. Әлбиттә, ул ҡыҙын ауылдағы иң бай кешегә кейәүгә бирергә теләгән.

- Бик аҡыллы һүҙҙәр әйттең, ҡыҙым. Төплө фекереңә ҡыуангайным. Әммә һин иң бай кейәүҙе дөрөҫ һайламаның. Бына ул - ауылдың ғорурлығы, иң бай кейәү, - тип, Беренсе егеттең атаһына төртөп күрһәткән. - Ул ауылда беренсе булып ике ҡатлы өй төҙөнө. Машинаһы, тракторы бар. Бер хәсрәтһеҙ йәшәрлек аҡсаһы ла етерлек.

Атаһының аптыраулы һүҙҙәренә ҡыҙы былай тип яуап биргән:

- Атай, бәлки, һин үҙеңсә хаҡлыһыңдыр ҙа. Әммә мин иң тәүҙә буласаҡ балаларымды ҡайғыртам. Улар әле һин һанап сыҡҡан әйберҙәрҙән ниндәй игелек күрһен: балаларым үҫеп еткәнсе трактор онталыр, машина тутығыр, өй иҫкерер.

- Аҡса булғанда, балаларығыҙ яңыларын һатып алыр: машинаһын да, кейем-һалымын да...

- Ҡыҙыҡ, ә күпме яңы нәмә алып була икән ул аҡсаға?

Эшҡыуар егеттең атаһы ғорур яуап биргән:

- Минең улымдың аҡсаһы шундай миҡдарҙа: кәрәк булһа, бөгөнгө хужалығыбыҙ кеүек тағы өс хужалыҡ һатып алып була. Күршенең ике аты булһа, беҙ бер нисә өйөр йылҡы һатып алырбыҙ.

- Мин һеҙҙең ғаиләгеҙгә бәхет теләйем. Әммә атайҙан ҡалған баҡсаны һатып алғандай аҡса әлегә юҡ был донъяла. Ҡолон сағында бала менән бергә уйнап үҫкән аттан тоғро ат та юҡ. Һеҙҙең хужалығығыҙ аҡса етештерә, ә минең һөйгәнемдең хужалығынан муллыҡ бөркә, - тип яуап биргән аҡыллы ҡыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был кинәйәнең һығымтаһын уҡыусы үҙе яһаһын, тинек. Йә, кемгә оҡшаған, кем күңеленә яҡын бында һүрәтләнгән геройҙар? Һәр хәлдә, беҙ уҡыусыларыбыҙҙан был кинәйә тураһында фекер ишетергә теләр инек.**

**Исмәгзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

хәтерләһәм, әле лә сараһыҙҙан йылмайып ебәрәм инде. Дикторҙың һәр һүҙен баш ҡағып ҡеүәтләр, яҡшы хәбәрҙәргә бала һымаҡ ҡыуаныр, күңелһеҙҙәрәк ваҡиға булһа, үҙенә урын таба алмай ыуаланыр ине. Һуғыш, аслыҡ, емереклек юлдарын иле менән бергә үтеп, шул тиклем дә уның яҙмышы өсөн һәр күҙәнәге менән үҙен яуаплы итеп тойғанға ла шулай эшләгәндер инде ул.

Беҙҙең өйҙә ул заман кешеләренең күбеһендә булған йыһаздар ҙа, шул йыһаздарҙың эсе тулып торған әйберҙәр ҙә булманы. Уның ҡарауы, нисә төрлө гәзит-журнал баҫмалары булһа, барыһын да алдыра инек. Урындыҡ ситенә ятып, бер аҙ ял иткәнендә "Политическое самообразование" тигән журнал уҡый торғайны. Тышлығы ла күҙ алдымда хатта: ҡыҙыл төҫтә, Маркс, Энгельс һәм Лениндың башы төшөрөлгәйне. "Нимәһе шул тиклем ҡыҙыҡ икән?" тиеп, ул журналды мин дә ҡараштырам да, ҡыҙыҡ бер нимә лә тапмай, ситкә шылдырып ҡуйыр инем. Ана, минең ҡыҙыҡлы гәзит-журналдарым етерлек: "Пионер" журналы, "Башҡортостан пионеры" гәзите, "Веселые картинки", "Мурзилка" журналдары... Рухи байлыҡ өсөн бер ваҡытта ла аҡса йәлләмәгән икән ҡәҙерлеләрем. "Һәнәк" менән "Крокодил" журналына ғына бер ҙә яҙылманы улар. Ә миңә ҡыҙыҡ, күрше-тирәгә инеп булһа ла, барыбер уҡып ҡуя инем.

Атайым, ғөмүмән, һәр төрлө күңел асыуҙарға ҡаршы ҡарашлы кеше булды. Юҡ сәбәпте бар итеп ҡунаҡ йыйынаманы улар. Бөтә кеше йыйылып ятып байрам иткән бөтә ил байрамдарын да эшкә һынаманы ул: "Ул ниндәй байрам инде, бына Еңеү көнө ысынында ла байрам!"- тиер ине. Үҙе кеүек һуғыш яланын үткән, күңел тулы хәтирәләр йөрөткән кешеләр менән рәхәтләнеп һөйләшеп ултырырҙар ине. Йырлашып та алырҙар ине. Атайым, ғөмүмән, монло итеп йырлай ине ул, тик үҙ алдына ғына. Балта оҫтаһы булғас, ҡулы ағас эшендә, бөтә издиһаты шул эшләнеп ятҡан әйберендә, ә үҙе танау эсенән, талғын ғына йырлай торғайны... "Тыуған ауылым", "Ҡуш нараттар", "Сибай"... Уның оҫталыҡ өҫтәле аҫтына ултырып, юныҫҡыларға күмелеп, ағас таптарынан әүрәп уйынсыҡ яһап, шул йырҙарҙы тыңлап үҫкәнгә, улар бөгөн радиола ишетелеп ҡалһа, күңелем тулып, шул вайымһыҙ саҡтарымды иҫкә төшөрәм.

Бына шулай, яңылыҡтар иҫтәлектәргә әйләнеп, бала саҡтарға алып китте. Бер мәлгә генә атай-әсәй ҡосағындағы иркә ҡыҙға әйләнеп, гәзит-журнал, китаптар тулы тыуған өй йылыһында иҙерәп алдым. Мәкәләмде уҡып сыҡһағыҙ, һеҙ ҙә шулай итерһегеҙ, моғайын.

**Миләүшә ҠЫҘРАСОВА.**

**Хәйбулла районы Әбеш ауылы.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Гарвард медицина мәктәбе табибы Герберт Бенсон бер интервьюһында: "Шундай осраҡты ҡарайыҡ: әгәр шәкәргә ныҡ ышанаһығыҙ икән, был инаныс һеҙгә һауығырға ярҙам итер. Бында нимәгә ышаныуығыҙ мөһим түгел - дини доктринағамы, үҙегеҙҙең табибығыҙғамы, тәбиғәткәме. Беҙ барыбыҙ ҙа нимәгәләр ышанабыҙ һәм һауығыу өсөн барлыҡ матди көстәрҙе саҡырабыҙ. Ул һәр кешенең үҙе генә ышанған нәмә булыуы мөмкин".

Был инаныуҙы көнсығыш психологияһы белгесе, веда астрологы Рами Блект та хуплай. "Оло йәштәгеләрҙең сире өс кимәлдә барлыҡҡа килә, - ти ул. - Карма кимәле - иң мөһиме. Әгәр беҙ был кимәлдә эшләмәһәк, иртәме, һуңмы, ул беҙҙең уйҙарыбыҙ, ғәмәлдәребеҙ менән үткәндәрҙә һалынған булһа, сир киләсәк һәм, киреһенсә, әгәр карма кимәле таҙа булһа, бер ниндәй эпидемия йәки нәҫелдән килгән сир йоғонто яһамаясаҡ. Хәҙерге медицина нәҫелгә һәм кешенең генетик кодын өйрәнеүгә ҙур әһәмиәт бирәләр. Был код физик тәндең компьютер программаһына оҡшаш һәм ул ниндәй сирҙәр нәҫелдән килеүен асыҡларға ярҙам итә. Был кодты уҡыу һәм аңлау өсөн махсус белем кәрәк. Заман медицинаһы тән концепцияһынан ары китмәй һәм уға йән программаһын күрһәтеүсе карма коды булыуы билдәле түгел.Мәҫәлән, минең бер туған ағайым бар һәм беҙ уның менән бар мөнәсәбәттәрҙә лә ныҡ айырылабыҙ: яҙмышыбыҙ ҙа төрлөсә, сирҙәребеҙ ҙә бер үк түгел һ.б. Был төпкө аң программалары (самскаралар) менән билдәләнгән карма кодының айырмалығы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Тәү сиратта, ул астрологик телдә яҙылған - тормошобоҙҙағы иң мөһим документ булған каталь карта. Бик ҡатмарлы һәм уны бары тик Веда астрологияһы мастеры ғына уҡый ала. Астрологияның башҡа төрҙәре уны тулыһынса уҡырға һәләтле түгел. Веда йондоҙнамәһе карма кодын күҙаллай һәм, бары тик физик ҡеүәт тураһында мәғлүмәт биргән генетик кодтан айырмалы, рухи ҡеүәтте һәм кешенең йәшерен мөмкинлектәрен күрһәтә, иң мөһиме - уның менән теге йәки был ваҡиғаның ҡасан буласағын ҙур теүәллек менән әйтеп бирә. Беҙ һәр уйыбыҙ, һәр ғәмәлебеҙ менән ниндәйҙер планетаның ыңғай йоғонтоһон йә көсәйтәбеҙ, йә уны насарайтабыҙ".

**Ни өсөн ҡартайғас, йышыраҡ ауырыйбыҙ?** Доктор Евдокименко былай ти: "Бик йыш оло йәштәгеләр минең психологик экскурсымды тыңларға теләмәй һәм: "Доктор, мин ҡарт кеше, миңә үҙгәрергә һуң инде. Ни өсөн ҡарт көнөмдә мин нимәләр үҙгәртергә тейешмен?" - ти. "Ысынлап та, ни өсөн, - тип яуаплайым мин. - Әгәр сәләмәтлек торошо ҡәнәғәтләндерә икән йәиһә ғүмерегеҙҙең һуңғы йылдарын (беҙ кемгә күпме ғүмер бирелгәнен белмәйбеҙ) сирле һәм бәхетһеҙ булырға, ғүмерегеҙҙе аңлы рәүештә ҡыҫҡартырға теләһәгеҙ - үҙгәрмәгеҙ. Әммә хәл-торошоғоҙҙо яҡшыртам тиһәгеҙ, был планетала булыуығыҙҙы оҙайтырға теләһәгеҙ, йәшегеҙгә ҡарамайынса үҙ өҫтөгөҙҙә эшләргә, үҙгәрергә һәм камиллашырға тура киләсәк".

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**



## 25 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 25 февраля. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.00 "Наши люди" с Юлией Меньшовой.
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Гадалка". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 Д/ф Премьера. "Андрей Тарковский. Трудно быть Богом". [12+]
1.05 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
4.05 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/с "Чужие дети". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Наука 102. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 Д/с "Чужие дети". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Храни меня, мой талисман". [16+]**
**1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.00 Спектакль "Люди на том берегу". [12+]**
**4.45 "Весело живем". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 26 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 26 февраля. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.00 "Наши люди" с Юлией Меньшовой. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Гадалка". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Церемония вручения премии "Оскар-2019". [6+]
2.00 "Модный приговор". [6+]
2.50 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.50 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым".
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/с "Чужие дети". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 Д/с "Чужие дети". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Специальный репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Сабрина". [16+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]**
**4.45 "Весело живем". [12+]**
**5.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 27 ФЕВРАЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 27 февраля. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.00 "Наши люди" с Юлией Меньшовой.
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Гадалка". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Мстислав Ростропович. Просто Слава". [12+]
1.00 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.20 "Мужское / Женское". [16+]
4.10 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым".
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/с "Чужие дети". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 Д/с "Чужие дети". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Коко до Шанель". [16+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Под знаком Марса". [12+]**
**4.30 Башҡорттар. [12+]**
**5.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 28 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 28 февраля. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.00 "Наши люди" с Юлией Меньшовой.
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Гадалка". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 На ночь глядя. [16+]
1.00 Т/с "Убойная сила". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым".
2.00 Т/с "Каменская". [16+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/с "Чужие дети". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 Д/с "Чужие дети". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Специальный репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Только между нами". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 1 МАРТА ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.20 "Сегодня 1 марта. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
14.00 "Наши люди" с Юлией Меньшовой.
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.15 "Вечерний Ургант". [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Я - Хит Леджер". [12+]
1.55 Х/ф "Побеждай!" [16+]
3.55 "Мужское / Женское". [16+]
4.45 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Юморина". [16+]
23.40 "Выход в люди". [12+]
0.55 Х/ф "Один единственный и навсегда". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Расцвет великих империй". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 "Весело живем". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей.**
**16.30 "Заповедники РФ". [12+]**
**17.00 Д/ф Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Республика Live. [12+]**
**19.30 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Замандаш. [12+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**22.45 Новости (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Экзамен для двоих". [12+]**
**1.45 Спектакль "Завидуй, Америка, завидуй". [12+]**
**4.00 Д/ф "Расцвет великих империй". [12+]**
**4.45 Х/ф "Экзамен для двоих". [12+]**

## 2 МАРТА СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Тот самый Мюнхгаузен". [0+]
8.10 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Михаил Пореченков. Обаятельный хулиган". [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Идеальный ремонт". [6+]
13.25 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
16.10 Международный музыкальный фестиваль "Жара".
18.15 Церемония открытия зимней Универсиады-2019. Прямой эфир.
21.10 Время.
21.25 "Сегодня вечером". [16+]
0.40 Футбол. Чемпионат Испании. "Реал Мадрид" - "Барселона". Прямой эфир.
2.45 Х/ф "Прекращение огня". [16+]
4.40 "Давай поженимся!" [16+]
5.30 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Х/ф "Осторожно! Вход разрешён". [12+]
13.40 Х/ф "Любить и верить". [12+]
17.30 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.45 "Один в один. Народный сезон". [12+]
23.15 Х/ф "Акушерка". [12+]
3.35 "Выход в люди". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 М/ф "Чичиленд". [0+]**
**8.45 "Большой чемодан. [6+]**
**9.30 Моя вершина. [12+]**
**9.45 Гора новостей. [6+]**
**10.00 Тамыр. "Набираем высоту". [0+]**
**11.45 Замандаш. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 100 имен Башкортостана. [6+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Конкурс кураистов им. А. Искужина. [12+]**
**18.00 Новости (на баш. яз.).**
**18.20 Церемония открытия XXIX Всемирной Зимней Универсиады 2019 года в Красноярске.**
**19.30 Моя вершина. [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.45 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Полный контакт". [16+]**
**1.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.15 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**4.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.15 Х/ф "Полный контакт". [16+]**

## 3 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Тот самый Мюнхгаузен". [0+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Жизнь других". [12+]
11.15 Д/ф Премьера. "Большой белый танец". [12+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Большой белый танец". [12+]
13.00 Х/ф "На Дерибасовской хорошая погода, или На Брайтон-Бич опять идут дожди". [16+]
14.50 Д/ф "Леонид Гайдай. Бриллиантовый вы наш!" [12+]
15.50 Премьера. "Главная роль". [12+]
17.25 "Три аккорда". [16+]
19.25 "Лучше всех!" [0+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
0.45 Х/ф "Подальше от тебя". [16+]
3.15 "Мужское / Женское". [16+]
4.05 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

4.40 Т/с "Сваты". [12+]
6.40 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.55 Смеяться разрешается.
16.00 Х/ф "В плену у лжи". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.50 "Дежурный по стране".
1.50 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.25 Т/с "Пыльная работа". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Күстәнәс. [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Перекличка". [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [0+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**17.30 Лыжная акробатика. Финалы. Всемирная Зимняя Универсиада. Прямая трансляция из Красноярска. [0+]**
**18.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**19.00 Лидеры региона. [12+]**
**19.30 Әлләсе... [6+]**
**20.15 "Теге өсәү!" [12+]**
**20.45 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 Х/ф "Тропы". [16+]**
**1.15 Спектакль "Кукольный дом". [12+]**
**3.30 Историческая среда. [12+]**
**4.00 Х/ф "Тропы". [16+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Февраль-март (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (20) дүшәмбе | 6:48 | 8:18 | 13:30 | 17:11 | 18:41 | 20:11 |
| 26 (21) шишәмбе | 6:46 | 8:16 | 13:30 | 17:13 | 18:43 | 20:13 |
| 27 (22) шаршамбы | 6:43 | 8:13 | 13:30 | 17:15 | 18:45 | 20:15 |
| 28 (23) кесе йома | 6:41 | 8:11 | 13:30 | 17:17 | 18:47 | 20:17 |
| 1 (24) йома | 6:39 | 8:09 | 13:30 | 17:19 | 18:49 | 20:19 |
| 2 (25) шәмбе | 6:36 | 8:06 | 13:30 | 17:21 | 18:51 | 20:21 |
| 3 (26) йәкшәмбе | 6:34 | 8:04 | 13:30 | 17:23 | 18:53 | 20:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ ***Намыҫтың иң яҡшы үҙенсәлеге шунда: ул һәр ваҡыт һинең яҡлы. Һинә яҡшы саҡта ул һине бер ваҡытта ла борсомай.***

***(Роберт Орбен).***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БЫЛ НИНДӘЙ ЫРЫУ ВӘКИЛДӘРЕ?




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**6-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Нәжми. Маликов. Дүртөйлө. Ғата. Сәс. Өрөк. Дунғыҙ. Крор. Мирзаянов. Балл. Рух. Офоҡ. Икра. Ося. Аҡшам. Фил. Йома. Анжи. Негр. Инша.

**Вертикаль буйынса:** Саҡмағош. Дисперсия. Рамазанов. Март. Фәнүнә. Өтөр. Әрле. Ҡалта. КВ. Нури. Өлкәр. Шарж. Игорь. Илеш. Ғабдрахимов. Борай. Ашуғ. Шәйҙуллина.

**Сканворд һорауына яуап:**

| I | II | III | IV | V |
|---|---|---|---|---|
| | | | | |

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 февраль "Ҡаһым түрә"** (Б. Бикбай, Х. Ирғәлин), драма 12+
**24 февраль "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+
**24 февраль "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев), драма 16+
**25 февраль Фидан һәм Азамат Ғафаровтар концерты** 6+
**26 февраль "Урал батыр"**. Үлемһеҙлек тураһында ҡобайыр. Башҡорт халыҡ эпосы буйынса 12+
**27 февраль "Прометей"** (М. Кәримдең "Ташлама утты, Прометей!" пьесаһы буйынса) 16+
**28 февраль "Иң бәхетле төн!"** (А. Касона), мелодрама 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 февраль "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+
**28 февраль "Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева әҫәре буйынса), музыкаль риүәйәт 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23 февраль "Буратино" (А. Толстой).** 12.00, 14.00 0+
**24 февраль "Маша и Медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер). 12.00, 14.00 0+

БАҠСА

**Матурлыҡҡа, гөл-сәскәгә ҡараһаң, уларға һоҡланһаң, үҙеңдә энергия, көс, йәшәүгә дәрт артҡанын тояһың. Шуның өсөндөр ҙә беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, сәскәләр яратабыҙ. Тиҙҙән - яҙ, унан йәй ҙә етә. Ишек алдын сәскә менән биҙәр өсөн бөгөндән хәстәрлек кәрәк. Үҙ тәжрибәмдән сығып, гәзит уҡыусылар менән петуния сәсеү серҙәре менән уртаҡлашайым әле.**

# ЙӘЙ ЙӘМЕН...

## бөгөн хәстәрлә

Бөгөн магазин-баҙарҙа нимә генә юҡ, кемдер әҙер үҫенте һатып ала ла ҡуя. Артыҡ мәшәҡәтләнмәйем, тиһәң, иң ҡулайы шул инде. Мин орлоҡтан үҫтерергә яратам. Ваҡ ҡына орлоҡтан шундай матур сәскә үҫеп сығыуын күҙәтеү мауыҡтырғыс шөғөл ул.

Петуния үҫтереүе еңел түгел, сыҙамлыҡ кәрәк. Ҡайһы бер баҡсасылар торф таблеткаһына 1-әр орлоҡ сәсә. Ә беҙ бөгөн ябай һәм күп сығым талап итмәгән ысулды - тупраҡҡа сәсеүҙе ҡараясаҡбыҙ. Быының өсөн үтә күренмәле пластик контейнерҙар кәрәк, уларҙың үҙенең ҡапҡасы ла була. Контейнерҙың яртыһынан тупраҡ һалырға. Үҫентеләр өсөн махсус тупраҡ та һатыла. Шулай уҡ баҡса тупрағы ла бара, сәскәләр унда ла яҡшы үҫәсәк.

Шулай итеп, тупраҡтың өҫтөнә тыштан индереп, 2-3 см ҡалынлыҡта ҡар һалабыҙ. Шул ҡарҙың өҫтөнә орлоҡтарҙы һибеп кенә сығаһың. Ҡапҡасын ябаһың да, ҡояшлыраҡ урынға ҡуяһың. Тәҙрә төбөндә лә яҡшы була. Ҡар ирей килә орлоҡтар тупраҡтың өҫтөндә ятып ҡала. Ҡар һыуына орлоҡтар яҡшы итеп шытып, үҫеп сығырға тейеш. Сәскәләр бер аҙ үҫкәс, берәмләм кенә айырым пластик стаканға, дымлы тупраҡҡа ултыртып сығаһың. Был саҡта инде һабағын тупраҡҡа тәрәнерәк сәсәһең, тамыр йәйеп, нығына. Сәскләрҙең башын семтеп алығыҙ, шунда улар ҡуйы булып, нығыраҡ тармаҡланып үҫә, тимәк, сәскәһе лә күберәк була. Мин сәскәләрҙе 23 февралдән 26-һына тиклем сәсәм. Кемдер ай календаренә ҡарай.

**Гөлгөнә БАЙЕГЕТОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТЕЛЕВИЗОР ҠАРАУСЫҒА

**Республика етәксеһе Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса Башҡортостанда халыҡтың һанлы телевидение приёмниктарын һатып алыуға сығымдарын ҡаплайҙар һәм һанлы телесигнал булмаған урындарҙа спутник антенналарын ҡуялар.**

Республиканың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығында хәбәр итеүҙәренсә, бушлай тәрилкәләр ҡуйыуға тәүге ғаризалар Нуриман районында йәшәүселәрҙән килде. "Спутник приёмниктарын ҡуйыуҙа дәүләт ярҙамы цифрлы эфир телевидениеһына инмәгән зонала йәшәүселәргә күрһәтелә. Ошо зонанан ситтә урынлашҡан тораҡ пункттарҙың исемлеге РТРС сайтында баҫылған. Ярҙамды граждандарҙың ике категорияһына: пенсияһына федераль социаль өҫтәмә алған пенсионерҙарға һәм аҙ тәьмин ителгән балалы ғаиләләргә күрһәтеү күҙаллана. Быының өсөн документтар исемлеген йыйырға кәрәк. Улар менән Матбуғат агентлығы сайтында танышырға мөмкин. Республиканың һәр районында ҡуйыу мәсьәләһен хәл итеүҙе тиҙләтеү өсөн халыҡҡа документтар пакетын әҙерләргә ярҙам итеүсе билдәләнгән. Бәйләнеш өсөн мәғлүмәттәр менән яуаплы кешеләрҙең исемлеге бар", - тип билдәләне Башҡортостандың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 3 июндән Башҡортостанда аналог тапшырыуҙар тулыһынса туҡтатыла. Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәрендә сигналды өҙөү 11 февралдән үк башланды. Цифрлы эфирҙы төбәктең күпселек биләмәһендә ҡарарға мөмкин. Һанлы сигнал булмаған ерҙә юлдаш тәрилкәләрен ҡуйырға тәҡдим ителә. Матбуғат агентлығы ғаризалар ҡабул итә, "Спутник-телеком" иһә аҙ тәьмин ителгән граждандарға "Телекарта" тәрилкәләрен бушлай ҡуя. Граждандарҙың ошо категорияларына хаҡы 1000 һумға тиклем һанлы приёмник һатып алған өсөн дә компенсация түләнә. Быының өсөн чек менән күп функциялы үҙәктең яҡындағы бүлексәһенә барырға кәрәк.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ



# ҠУРАЙ БҮЛӘК ИТӘЙЕК!

**Учалы районы Уральск ҡасабаһының музыкаль мәктәбендә һәм "Ирәмәл" балалар ижади үҙәгендә балаларға ҡурай серҙәрен өйрәтеүсе Дим Мөжәүәров хаҡында яҡташтары "Үҙ эшенә бөтөн күңелен һала", тиҙәр. Ике тиҫтәнән ашыу балаларға башҡорт моңона юл асыусы Дим Рәфҡәт улы шулай уҡ ҡурай эшләүсе оҫта булараҡ та киң билдәле.**

- Ҡурайҙа уйнарға 7 йәшемдә өйрәндем, - тип һөйләп китте ҡурайсы. - Тәүге уҡытыусым - Рәис Низаметдинов. Минең күңелемдә ҡурайға һөйөү тәрбиәләүсе остазымды һәр ваҡыт оло хөрмәт менән иҫкә алам. Нәҡ уның енел ҡулы менән тормошомдо милли музыка ҡоралыбыҙ - ҡурай менән бәйләнем. 9 синыфтан һуң Өфө сәнғәт училищеһын, унан сәнғәт институтын тамамлап, үҙемдең тыуған яҡтарҙа Рәйес ағайҙың юлын дауам итәм.

Балалар менән эшләй башлағас, ҡурай етмәүе бәкәлгә нығ һуҡты. Учалыла ғына түгел, ә тотош республика буйлап ҡурай эҙләгән саҡтар ҙа булды. Махсус музыкаль магазиндарҙағы ҡурайҙың хаҡы үтә ҡиммәт. Ә ҡурайҙа уйнарға өйрәнеп кенә йөрөүсе бала уны онтарға, һындырырға мөмкин, шуға күрә ҙур аҡса түгеү урынһыҙ. Минеңсә, ниндәй түңәрәктә шөғөлләнеү ҙә атай-әсәйҙәрҙең кеҫәһенә һуҡмаҫҡа тейеш. Шуға күрә, ниәт иттем дә, үҙем ҡурай эшләргә булдым. Дөрөҫөн әйткәндә, бәләкәй саҡта уҡ ҡурай эшләп ҡарағаным булды. Әле булһа бесәндә ялда туҡтаған арала, ҡурай үләненә тишектәр эшләп, яңы ғына сабылған үлән өҫтөнә ултырып, ҡояшта ҡыҙынып ҡына үҫкән ҡурайҙа үҙем белгән көйҙәрҙе уйнап ултырыуым иҫтә.

Бер йыл тирәһе - ҡулды шымартыуға, ҡурай эшләүҙең бөтә нескәлектәрен аңлауға, кәрәкле материалдар табыуға китте. Әлеге ваҡытта яҡынса өс көндә бер ҡурай эшләйем. Балаларға өйрәнеү өсөн пластик ҡурайҙар тотонам. Әлбиттә, уның моңо ысын ҡурайҙыҡы кеүек "тере" түгел, ләкин эшләүгә енел, ҡулланылыу ваҡыты оҙайлы. Ҡурай эшләү өсөн материалды Марий Эл республикаһынан алдырам. Шулай уҡ махсус ҡоролма һатып алып, ҡурай һаҡлар өсөн футляр ҙа эшләйем. Уларға ла һорау ҙур.

Заказ биреүселәр араһында айырым кешеләр ҙә, музыкаль мәктәптәр һәм түңәрәктәр бар. Мәктәптәр, билдәләүемсә, шпондан (нәҙек кенә ағас) эшләнгән ҡурайҙарға өҫтөнлөк бирһә, олораҡтар иһә үҙҙәренә урманда үҫкән "ысын" ҡурайға заказ бирә. Шулай уҡ бүләккә тип әҙерләткәндәр ҙә байтаҡ. Хәҙер исемшәрифе яҙылған ҡурай бүләк итеүе айырыуса киң таралды. Һәр башҡорттоң өйө түрендә ҡурай булырға тейеш, тигән фекерҙәмен, шуға күрә бындай заказдарҙы бөтә күңелемде һалып башҡарам. Швейцария, Америка, Германия, Украина кеүек илдәрҙә лә мин эшләгән ҡурайҙар "йәшәй". Францияның милли музейында, беҙҙең республика менән таныштырыусы стендта, шулай уҡ минең ҡурайҙың урын алыуы үҙем өсөн оло мәртәбә һанайым, сөнки уны мин үҙемдең эшемдә, тырышлығымды баһалау ғына итеп түгел, ә башҡорт ҡурайына дан йырлау һымаҡ ҡабул итәм.

Бөтә донья буйлап үҙебеҙҙең милли уйын ҡоралыбыҙға ҡыҙыҡһыныу уятыуға, уның төрлө ҡитғаларҙа яңғырауына булышлыҡ итеүем менән бәхетлемен. Артабан да яратҡан шөғөлөмдө ташламай, уны камиллаштырыу өҫтөндә эшләйәсәкмен. Балаларҙы ҡурайҙа уйнарға өйрәтеү үҙе бер кинәнес булһа, уларҙың мин эшләгән ҡурайҙарҙы ҡулланыуы икеләтә ҡыуаныслы.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ



# "АРҒЫМАҠ"ТАР БӘЙГЕ ТОТА

**9-19 мартта Сәғүд Ғәрәбстаны Короллегенең Эр-Рияд ҡалаһында Король Абдул Азиз исемендәге "CamelFestival" барышында "Күсмә халыҡтар донъяһы" халыҡ-ара этнофестивале уҙғарыла. Сарала башҡорт этно-музыкаһы ла яңғырай. "Арғымаҡ" төркөмө этно-музыка һәм этно-хит номинацияларында иң яҡшы башҡарыусы исеме өсөн көрәшә.**

"Саҡырыу уҙған йылдың аҙағында уҡ башҡорт артистарының Ҡырғыҙстанда "Бөтә донья күсмә халыҡтар уйындары"ндағы сығышынан һуң килде. "Арғымаҡ"ты саранһың ҡунағы итеп саҡырҙылар, ләкин музыканттар конкурс программаһында сығыш яһарға теләк белдерҙе. Бына бер нисә ай инде "Арғымаҡ" фестивалгә үҙенсәлекле һәм мауыҡтырғыс программа әҙерләй", - тип хәбәр иттеләр Башҡорт дәүләт филармонияһынан. Донъяуи форумда этнобейеү, этнобаҙар (биҙәүҡулланма ижады күргәҙмә-йәрминкәһе), сәсәндәр сәнғәте (эпостар, легендалар), үҙенсәлекле жанр (уйындар, трюк элементтары) кеүек номинацияларҙа ла енеүселәр билдәләнә.

Ижади бәйгенең шарттарына ярашлы, һәр илдең вәкилдәре сәнғәттең сәхнә, уйын, кәсепселек төрҙәрендә халыҡтың тарихын, мәҙәниәтен һәм көнкүрешен сағылдырған милли программа тәҡдим итергә тейеш. Һәр делегация 15-20 минутлыҡ биштән күберәк концерт программаһы әҙерләй. Енеүсегә аҡсалата премия, "Күсмә халыҡтар донъяһы" халыҡ-ара этнофестиваленең махсус бүләге һәм дипломы тапшырыла.

Әйткәндәй, "Арғымаҡ" төркөмөнөң яңы программаһын өфөләр 2 мартта "Башҡортостан" дәүләт концерт залында тамаша ҡыла ала. Төркөм концертын үҙенең 10 йыллыҡ юбилейына арнаған.

# ХАЛЫҠ ТАЛАНТТАРЫ

**Башҡортостанда "Тере шишмәләр" үҙешмәкәр халыҡ ижады конкурсы еңеүселәре билдәле булды. Башҡортостан халыҡтарының фольклор традицияларын үҫтереүгә һәм күсәгилешлелекте һаҡлауға йүнәлтелгән ижади бәйге ике йылға бер тапҡыр үткәрелә.**

Быйыл сара Күгәрсен районында уҙҙы. Фольклор байрамы Архангел, Бөрйән, Ейәнсура, Йылайыр, Көйөргәҙе, Күгәрсен, Хәйбулла райондарынан, Сибай, Мәләүез һәм Күмертау ҡалаларынан алты балалар һәм 24 өлкәндәр үҙешмәкәр ижади коллективын йыйҙы, тип хәбәр иттеләр Республика халыҡ ижады үҙәгендә. Жюри һәм тамашасылар иғтибарына фольклорҙың әйтеш, йыр, бейеү жанры, халыҡ байрамдары, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, уйындары тәҡдим ителде. Гран-призы Күгәрсен районынан балалар фольклор ансамбле яуланы. Өлкәндәрҙең фольклор коллективтары араһында Бөрйән районынан "Элгәләү" халыҡ фольклор ансамбле һәм Хәйбулла районынан "Караһыу" башҡорт фольклор ансамбле I дәрәжә лауреат исемен алды. Коллективтар "Фольклорҙа халыҡ традицияларын тергеҙеү һәм һаҡлау" номинацияһында ла билдәләнде.

Фестивалде ойоштороусылар - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Күгәрсен районы хакимиәтенең мәҙәниәт идаралығы.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТЕЛӘГЕНДЕ АЛҒА СЫҒАРМА,

## маҡсат ҡуйып йәшә

Беҙ тормош китабының бер генә битен дә йыртып ырғыта алмайбыҙ, ә бына китапты тотош килеш утҡа ырғытыу бер ни тормай.

**(Жорд Санд).**

Ах, үҙ хаталарында ситтән тороп ҡына өйрәнһәң икән!

**(Б. Крутиер).**

Һәр көн бәләкәй генә тормош ул: һәр иртә - бәләкәй генә йәшлек, һәр кис йоҡоға әҙерләнеү - бәләкәй генә үлем.

**(Артур Шопенгауэр).**

Кеше иңенә ауырлыҡ күтәрткәндә ярҙам ит, төшөргәндә ярҙам итмә.

**(Пифагор).**

Ғүмер аҙағында ғына һинең бар тормошоң ғилем эстәү менән үткәнен, ә һин унда иғтибарһыҙ уҡыусы булғаныңды аңлайһың.

**(В. Розанов).**

Эйе, сәйәсмәндәр ябай кешеләргә күп иғтибар бүлә, ләкин изгелекле булғандан түгел был. Эттәр ҙә бит тәнендәге бөрсәләренә күп иғтибар бүлә.

**(Патрик Орурк).**

Асыҡ ишеккә лә туҡылдатып ин, бәлки, уны һинең өсөн асмағандарҙыр.

**(Доминик Опольский).**

Намыҫтың иң яҡшы үҙенсәлеге шунда: ул һәр ваҡыт һинең яҡлы. Һинә яҡшы саҡта ул һине бер ваҡытта ла борсомай.

**(Роберт Орбен).**

Хәйерселәр байҙарҙан түгел, үҙҙәренән күберәк хәйер эләктергән хәйерселәрҙән көнләшә.

**(Бертран Рассел).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Һуҡырайыр алдынан күҙҙәр хатта сәс осондағыһын да күреп өлгөрә.**

**Һаңғырауланыр алдынан ҡолаҡтар хатта бәләкәй ләпәкәйҙәр осҡанын да ишетеп өлгөрә.**

**Тәм тойғоһо тупаҫланыр алдынан тел бер ҡоҙоҡтоң һыуын икенсеһенән айыра ала.**

**Еҫ тойғоһон юғалтҡанға тиклем танау янған ағас еҫенән серек ағас еҫен дә айыра ала.**

**Тәне ҡатып ҡалғанға тиклем кеше тиҙ йүгереүҙең ни икәнен белергә өлгөрөп ҡала.**

**Аҡылын юғалтҡанға тиклем кеше йөрәге ялғандан дөрөҫлөктө бик тиҙ айыра ала.**

**Быларҙың сәбәбе шунда: бер сиккә барып етмәйенсә, әйберҙәр ҡапма-ҡаршы әйбер хәлено ҡусә алмай".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 4077
Заказ - 146